Рәсәй Федерацияһы мәғариф министрлығы
Башҡорт дәүләт университеты

З.Я.Шәрипова

# Башҡорт әҙәбиәтендә һүрәтләү саралары

(әҙәби эшмәкәрлек мәсьәләләре)

Өфө - 2003

УДК 82.73(07)

ББК 83.3(2 Рос=Баш)(27)

**Шәрипова З.Я.**

Башҡорт әҙәбиәтендә һүрәтләү саралары. — Өфө, Башҡорт дәүләт университеты баҫмаһы, 2003. — 128 бит.

Рецензенттары: филология фәндәре кандидаттары Э.Х. Вилданов, М.Х. Нәҙерғолов.

Ҡулланмала филологик белем биреүҙең дәүләт стандарты талаптары иҫәпкә ялына һәм әҙәби эшмәкәрлек мәсьәләләре тел һәм әҙәбиәт ғилемдәре ялғамында яҡтыртыла.

Уҡыу ҡулланмаһы студенттарға, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларына, әҙәби ижад менән шөғөлләнеүселәргә тәғәйенләнә.

Учебное издание ***Шарипова Зайтуна Яхиевна***

ИЗОБРАЗИТЕЛЬНЫЕ СРЕДСТВА В
БАШКИРСКОЙ ЛИТЕРАТУРЕ

***(на башкирском языке)***

Нәшр. лиц. № Б 848344, 15.05.2000. Баҫырга ҡул ҡуйылды 19.03.03.
Ҡағыҙ форматы 60x84[1]/1в- Офсет ҡағыҙы № 1. Шартлы баҫма таб. 7,44.
Тиражы 300 экз. Заказ № 1947.
Әҙер оригинал-макеттан ризограф ысулы менән баҫылды. ДУП «Өфөполиграфкомбинаты» 450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.

I8BN 5-85051-274-8

Шәрипова З.Я., 2003

# ИНЕШ

Кешелек донъяһының иң бөйөк, иң изге, иң мөғжизәле ҡаҙанышы булараҡ, тел әҙәм балаһының уй-фекерен сағылдыра һәм бик тә һиҙгер, үтә һығылмалы һәм универсаль аралашыу ҡоралы булып хеҙмәт итә. Бер ҡараһаң, көндәлек тормошта тел уны-быны белдереү, ниндәйҙер маҡсатҡа өлгәшеү сараһы һымаҡ ҡына, шунлыҡтан уға артыҡ иғтибар ҙа итмәйһең, асылына төшөнөргә тырышмайһың да. Әммә күҙ алдына килтереүе ҡыйын: ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында ҡапыл... телебеҙ юҡҡа сыҡты, ти. Нишләрбеҙ?! Кешеләр бер-береһенә мөнәсәбәтен нисек белгетер, нисек итеп тормош тәжрибәһе менән у ртаҡлашыр, бер-береһен хәүеф-хәтерҙәрҙән ҡайһылайтып ҡурсалар?

Барыбыҙға ла мәғлүм: тел - айырым әҙәми заттарҙың көнитмешен генә түгел, ә тотош йәмғиәттең, хатта илдәр, дәүләттәрҙең йәшәйешен һәм артабанғы үҫешен үҙенсәлекле ойоштороусы ҡеүәтле сара ла ул. Ә инде яҙмаға теркәлгән һүҙҙең кешелек донъяһы өсөн әһәмиәтен тәфсилләп һөйләп тораһы ла юҡ. Әгәр ҙә ҡасандыр яҙма уйлап табылмаһа, бер ниндәй алға китеш тә, фәнни-техник революциялар ҙа тормошҡа ашмаҫ ине, тип раҫлауҙа ла һис бер хилафлыҡ булмаҫ. Яҙмаға теркәлә башланыуы менән һәр бер милли телде фәнни өйрәнеүгә үҙенән-үҙе мохтажлыҡ тыуа. Теге йәки был һүҙҙе дөрөҫ әйтеүҙең, урынлы ҡулланыуҙың, хатаһыҙ яҙыуҙың, аңлайышлы итеп һөйләмдәр теҙеүҙең яҙылмаған ҡағиҙәләрен бер тәртипкә килтереп, дөйөм ҡулланылыш нормаларын эшләргә кәрәк була. Орфоэпик, орфографик, йәғни грамматик йәһәттән билдәле бер системаға һалынғас ҡына тел әҙәби тел статусына күсә. Һүҙ ыңғайында иҫкә төшөрөп китәйек: милләтебеҙҙең мәшһүр уҡымышлылары, осороноң сәйәси-иҡтисади кәртәләренә ҡарамай, үткән быуаттың егерменсе йылдарында башҡорт темлен ғәмәлгә ашырыуҙа ысын батырлыҡ һәм фиҙакәрлек күрһәтә.

Ҡайһы ғына милли әҙәби тел булмаһын, уның иң камил үрнәктәре булып әҙәби әҫәрҙәр тексы һанала. Быуаттар һуҙымында халыҡ хәтеренә һеңешкән иң тапҡыр һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәрҙе ҡулланып ижад иткәндә, яҙыусы үҙ һөйләмдәре аша әҙәби картина, улай ғына түгел, шәхси һүҙ оҫталығына ҡарап, тотош бер яңы художестволы донъя асыуға өлгәшә. Шул әҫәрҙе уҡыған саҡта һәр уҡыусы эстетик матурлыҡтан кинәнес табырға өйрәнә, уның күңелендә әҙәби зауыҡ ярала.

Кешеләргә сәнғәт художестволы образдар аша тәьҫир итә, хис-кисерештәргә юлыҡтыра: спектакль ҡарағанда театрҙа икәнебеҙ онотола, күргәҙмәлә картиналар ҡараһаҡ та, уйҙарыбыҙ алыҫҡа оса, китап уҡығанда ла мауығабыҙ, һөйөнәбеҙ йә көйөнәбеҙ. Тәбиғи, бәғзе кеше быныың менән генә ҡәнәғәтләнмәй, уларҙы сәнғәт әҫәрҙәренең нисегерәк "эшләнеүе" лә ҡыҙыҡһындыра. Был инде ҡатмарлыраҡ, сөнки теге йәки был рәссамдың, актерҙың йә иһә әҙиптең ижад "лабораторияһы"на һынамсыл, ғәҙел байҡау яһалыуы мөһим.

Ижад процесын белмәй-аңламай тороп, әҙәби әҫәрҙең ысын ҡиммәтен асыҡлау мөмкин түгел. Әҙәбиәт белгестәренән тыш, күп һанлы китап уҡыусылары ла һәр кемгә таныш ғәҙәти һүҙҙәрҙән нисегерәк итеп юғары әҙәби-художестволы текст ижад итеүҙең серҙәренә күпмелер хәбәрҙар булыуы фарыз. Фарыз тибеҙ, сөнки киләсәктә оҫта яҙыусылар, шағирҙар тап шул әҙәби һүҙгә мөкиббән гашиҡтар китап һөйөүселәр араһынан үҫеп сыға. Уйсан уҡыусы әҙиптең фекерҙәрен, образдарын күңеленән үткәреп, яҙыусының нәфис һүҙенең ҡәҙерен баһаларға, илһам алып, үҙе лә яҙышырға өйрәнә.

Художестволы текст милли әҙәби телде өйрәнеү өсөн иң ҡулай сығанаҡ һанала. Ижад процесында яҙыусы файҙаланған һүрәтләү сараларын үҙләштерә барып, нәфис һүҙҙең һәм һүҙ сәнғәтенең серҙәренә төшөнөү мөмкинлеге тыуа. Һүрәтләү мөмкинлектәренең иҫ киткес күп төрлөлөгө, һығылмалылығы таң ҡалдырғыс һәм һәр кемдең йөрәген туған телгә һөйөү һәм оло хөрмәт уятырға һәләтле. Поэтик телмәрҙе тәрәндән төшөнөп, әҙәби тексты эстетик яҡтан баһалай белеү кешеләрҙең телен байыта, телмәрен йөкмәткелерәк һәм сағыуыраҡ яһай. Әҙәби әҫәр тексын яҡшы үҙләштереү ғәмәлдә тел тойғоһон үҫтерә һәм дөйөм тел культураһына эйә шәхес тәрбиәләүгә ыңғай шарттар тыуҙыра.

Туған телде яҡшы белеү һәр шәхестә үҙенең асылына төшөнөп, үҙ булмышын раҫлау, башҡалар араһында үҙенең кешелек дәрәжәһен иҫбатлау йәһәтенән байтаҡ мөмкинлектәр аса. Телде белеү -йәмғиәтебеҙҙең һәр намыҫлы ағзаһының яуаплы бурысы ул. Был эште

туранан-тура ойоштороусы һәм ысынлап тормошҡа атҡарыусы сифатында иң тәүҙә тел һәм әҙәбиәт белгестәре сығыш яһай. Иң башта улар үҙҙәре телдең барлыҡ нескәлектәрен белергә, теоретик белемдән тыш, тел менән эш итеүҙең практик күнекмәләренә эйә булырға тейеш. Милли телдең лексик байлығын яҡшы үҙләштереү өҫтөнә, һүрәтләү (тасуирлау) саралары менән иркен эш итергә өйрәнеү иһә буласаҡ филологтар өсөн айырыуса мөһим.

## I бүлек

## Белем һәм уның төрҙәре

Башҡорт халҡы борон-борондан уҡ белемдең кеше тормошонда уйнаған ролен дөрөҫ билдәләп, кешелек донъяһында уның ҙур әһәмиәткә эйә булыуын таныған. "Белем алыу — энә менән ҡойо ҡаҙыу" кеүек мәҡәлдәрҙә уҡыу-өйрәнеү процссының бик ауыр икәнлеге һыҙыҡ өҫтөнә алына. Әммә ләкин һуңынан белем кешегә ғүмере буйы ышанyслы хеҙмәт итәсәк ҙур потенциаль көскә әүерелә. Юҡҡамы ни, "беләге бар берҙе йығыр, белеме бар меңде йығыр" тип раҫланмай. Улай ғына түгел, белеме барҙың ҡәҙере лә бар, тимәк, белем кешелек дәрәжәһен күтәрә, һәр берәүҙең йәмғиәттәге социаль статусын арттыра. "Белем нур, белмәү - хур" тип, халыҡ белемде бәхетле киләсәккә -прогресҡа илтә торған яҡты юл, алға әйҙәп тороусы нур сифатында данлай.

Күпмелер белем туплау, йәғни әйләнә-тирә донъяны өйрәнеү кешелек таңында уҡ башланған. Кешенең ысын мәғәнәһендә кеше булып формалашыуын да тап шул белем туплау процесынан һис тә айырып ҡарау ярамай. Быуаттар һуҙымында һәр кемдең көндәлек йәшәүгә бәйле шәхси тәжрибәһе бергә өйөлөп, ниндәйҙер практик күнекмәләр, һынамыштар, тыйыуҙар рәүешендә быуындан-быуынға ҡәҙерләп тапшырыла килгән. Ваҡыт үтеү менән улар теге йәки был йәмғиәттә традиция, ғөрөф-ғәҙәт, йола булып нығынған. Кешеләрҙең көндәлек тормошонан яралған бындай белем төрлө ҡитғаларҙа, төрлө замандарҙа, һис шикһеҙ, төрлө халыҡтарҙа үҙенең тулылығы һәм характеры яғынан ныҡ айырылған. Берәүҙәр кешенең физик ихтыяждарын тәьмин итә торған белемгә өҫтөнлөк бирһә, икенселәр - рухи ихтыяжға...

Һәр башҡорт элек белергә тейешле белемдең йөкмәткеһе мәғрифәтсе ғалим М. Өмөтбаевтың киң билдәле һүҙҙәрендә асып һалына: "Аҫаба башҡортҡа өс нәмәне белеү мотлаҡ: беренсеһе үҙеңдең сығышыңды, йәғни үҙ ырыуыңды белеү, икенсеһе — йондоҙҙарҙы исемләп аңлатыу һәм өсөнсөһө - хандар тураһындағы риүәйәттәрҙе һәм өләңдәрҙе белеү".[1]

Ни өсөн тап ошоларҙы белеү һәм артабанғы быуындарға тапшырыу үтә мөһим һаналған һуң? Ул халыҡтың, беренсе сиратта, йәшәү рәүешенә бәйле.

Быуаттар һуҙымында башҡорт ерҙәре Азия һәм Европа ҡитғаларын тоташтырыусы ҡапҡа, тегеләй йә былай күскенселәргә коридор ролен үтәгән: дәһшәтле ҡыйралыштарҙа башҡорт иленә *әллә* күпме мәртәбә яу яланына әүерелергә тура килгән. Шул мәхшәрҙә башҡалар араһында тарҡалып, берҙәмлекте ҡаҡшатмаҫ өсөн дә кәрәк булған тарихи белем. Тимәк, килеп сығышың аша милләттең этногенетик йәһәттән формалашыуын, хандар һәм батырҙарҙың эшмәкәрлектәре аша ил тарихын белеү, йәғни милли үҙаңды һаҡлауға йүнәлтелгән белем барлыҡ бүтән типтағы белемгә ҡарағанда ла өҫтөнлөклө иҫәпләнгән. Донъялыҡта башҡорттоң халыҡ булып йәшәүенең төп шарты булараҡ, милли үҙаң тәрбиәләүҙе һәм ул процестың даими, һис ниндәй өҙлөкһөҙ дауам итеүе өсөн көс түгеүҙе һәр кемдең мөҡәддәс бурысы тип ҡараған ата-бабаларыбыҙ.

Сал тарих төпкөлөнән миллиондарса йылдар ағышында кешелек үрҙә иҫкә алынған көндәлек белемгә таянып ғүмер һөргән. Тормошта ул һәр кемгә әсә һөтө менән тапшырылыр яҙылмаған ҡанундар, һис бер уйһыҙ-икеләнеүһеҙ механик рәүештә башҡарылыр күрһәтмәләр формаһын алған. Хәҙерге фәндә бындай белем "**көндәлек-практик белем** (обыденно-практическое знание)" тип йөрөтөлә. Тарих баҫҡысынан өҫкә атлаған һайын кешелектең белемгә ихтыяжы арта барған. Ваҡыт үтеү менән ул төрлө ҡулайламалар, приборҙар, үлсәмдәр юлы менән әйләнә-тирәләге ысынбарлыҡтың асылына төшөнөү өсөн махсус рәүештә белем эҙләү юлына баҫа. Махсус эҙләнеүҙәр һөҙөмтәһендә табылып, дөрөҫлөгө, йәғни хәҡиҡәткә тап килеү-килмәүе эксперимент, тәжрибә, моделдәр ярҙамында ҡат-ҡат тикшерелеп, бер системаға

һалынған белемгә **фәнни белем** тип әйтәләр. Донъяны фәнни тикшереүҙең маҡсаты — әйләнә-тирәләге барлыҡ үҙгәреш-үҫеш процестарының асылына һәм үҙ-ара бәйләнештәренә төшөнөргә тырышыу. Тәбиғәттәге бөтә күренештәрҙең барыһын да, хатта әҙәм ышанмаҫ үтә серлеләрен дә тыуҙырған сәбәптәр бар, уларҙың һәр береһе ниндәйҙер тәбиғи закондар менән аңлатыла ала тигән аксиома фәнни эҙләнеүҙәргә нигеҙ итеп алына. Ниндәй юлдар һәм ысулдар менән нисегерәк табылһа ла, ҡайһы илдә, ҡайһы телдә кем ҡулланыуына ҡарамаҫтан, белем (ғилем) йөкмәткеһе үҙгәреп китмәй: хәҡиҡәт ҡайҙа ла хәҡиҡәт булып ҡала.

Цивилизацияның билдәле бер үҫеш баҫҡыстарында бығаса тупланған белем системаһының, хатта фундаменталь тип иҫәпләнгән фән положениеларының хәҡиҡәткә тап килмәгән-леген иҫбатларлыҡ яңы асыштар тыуыуы ихтимал. Шулар нигеҙендә матди етештереү саралары, тамырынан үҙгәреп, кешенең көндәлек йәшәйешендә быға тиклем хатта күҙ алдына килтереп булмаҫтай өр-яңы, мәҫәлән, компьютер, цифрҙар ярҙамында төшөргән фотоаппарат кеүек, техника мөғжизәләрен тыуҙыра. XX быуаттың икенсе яртыһынан донъя кимәлендә ошондай фәнни-техник революция башланып, әле лә уңышлы дауам итә, тип икеләнмәйенсә раҫларға мөмкин.

Фәнни белемдең кеше тормошондағы роле һәм әһәмиәте, хәҙерге йәмғиәттәрҙәге функциялары хаҡында тау-тау китаптар яҙылған. Бөгөнгө көндә һәр бер кешенең донъяға ҡарашы, ер йөҙөндәге ҡайһы бер илдәрҙең айырым төбәктәрен иҫәпкә алмағанда, мәктәп һәм бүтән уҡыу йорттарында бала сағынан уҡ фәнни белем нигеҙендә формалаша.

Фәнни белемдең йөкмәткеһе һәм сифаты теге йәки был шәхескә, йә ул һайлаған айырым гнкшеренеү-өйрәнеү ысулына, йә булмаһа ниндәйҙер географик-территориаль сиктәргә бәйле түгел.

Көндәлек-практик һәм фәнни белемдән тыш өсөнсө төрлө белем дә бар: уныһы - **художестволы белем.** Художестволы белемдең үҙенсәлектәре хаҡында һүҙ сыҡһа, ҡайһы бер ғалимдар уны хатта фәнни белемгә ҡарағанда ла тәрәнерәк, күп яҡлыраҡ һәм кешеләргә тәьҫир итеү йәһәтенән көслөрәк, тип баһалай. Донъяны танып белеүҙең үҙенә бер үҙенсәлекле формаһы булараҡ художестволы белем дә кешегә кешеләр араһында үҙ урынын табырға ярҙам итә. Йәшәүҙең мәғәнәһен ҙурлап, уның гуманистик тәғәйенләнешенә инанып, изгелектең яуызлыҡты, яҡшылыҡтың яманлыҡты, ғәҙеллектең ғәҙелһеҙлекте еңеүе әсән хеҙмәт итергә кәрәклекте лә төшөндөрә художестволы тип аталған был белем төрө.

Художестволы белемде туплауҙа төп сығанаҡ булып сәнғәт әҫәрҙәре хеҙмәт итә. Музейҙарҙа эленеп торған картиналарҙың, китапханаларҙа теҙелгән китаптарҙың көндәлек йәшәйештә артыҡ кәрәге лә юҡ һымаҡ: улар бит тән аҙығы түгел, ә йән аҙығы. Әммә ул арһыҙ тормоштоң бер йәме лә булмаҫ ине. Сәнғәт әҫәрҙәре рухҡа йоғонто яһай, дөрөҫөрәге, рухты уята, йәшәүҙе мәғәнәле итә. Кеше ҡулдары тыуҙырған сәнғәти мөжғизәләр аша әҙәм балаһы үҙен-үҙе өйрәтә. Ижади мөмкинлектәрҙең сикһеҙ икәненә ышаныс нығып, һәр берәүҙә йәшәү дәрте уяна.

## ХУДОЖЕСТВОЛЫ БЕЛЕМ СЫҒАНАҒЫ -СӘНҒӘТ. СӘНҒӘТ ТӨРҘӘРЕ

Кешене әйләндереп алған донъя иҫ киткес күп яҡлы һәм бик төрлө. Көндәлек аралашыуҙа уны, ғәҙәттә, йәнле һәм йәнһеҙ тәбиғәт тип дөйөмләштерәләр. Кем йәки ниндәй илаһи көс тарафынан, ҡасан һәм нисек, ни сәбәптән һәм ниндәй маҡсаттар менән яратылған — быларҙың һәммәһенә лә кешелек үҙен-үҙе белә башлағандан алып яуап эҙләй.

Нимә ул сәнғәт тигән һорауға асыҡлыҡ индереү өсөн, кешенең барлыҡҡа килеү тарихынан бигерәк, уның кешелек сифаттарына төшөнөү зарур.

Кешене ер йөҙөндәге барлыҡ йән эйәләренән уның ижади эшкә һәләтле булыуы айырып тора, шуға күрә лә фәндә, Ф.Энгельс һүҙҙәре менән әйткәндә, "труд создал человека" тигән ҡараштар нығынған. Иғтибарлыраҡ ҡараһаң, һәр йән эйәһе лә үҙенсә "тир түгә": ҡырмыҫҡа ҡатлы-ҡатлы, оҙон-оҙон юлдары булған тау хәтле иләү өйә, ҡама йылғаның ағымына ҡаршы торорлоҡ быуалар быуып ташлай, үрмәкес ау үрә, сыйырсыҡ оя яһай һ.б. Хайуандар һәм хатта айырым ғәжәйеп үҫемлектәр башҡарған быңдай "эш" оҙаҡ йылдар буйына фәндә уларҙың тәбиғәтенә һалынған шартлы рефлекс менән аңлатылды. Һуңғы ваҡытта ҡайһы бер йән эйәләренең физиологияһын яҡындан оҙайлы күҙәтеүҙәр һөҙөмтәһендә сенсацион һығымталар яһала: имеш, хатта сәскәләрҙең дә

примитив формала ғына булһа ла, аңы бар... Әлбиттә, уныһын киләсәктә фән йә ышандырырлыҡ дәлилдәр менән раҫлар, йә кире ҡағыр.

Кеше эшмәкәрлеге шулай ҙа үҙенә бер башҡа икәнлеге һәр кемгә мәғлүм һәм ул бер ниндәй ҙә бәхәс тыуҙырмай. Үрҙәге йән эйәләре тәбиғәттең, үҙендәге материалдарҙы, бик булмаһа үҙҙәренең организмы бүлгән матдәләрҙе файҙалана, ә кеше аңлы рәүештә, үҙенең маҡсатына ярашлы, бығаса тәбигәттә булмаған, бер ҡасан да тәбиғәт үҙе барлыҡҡа килтерә алмаҫлыҡ өр-яңы синтетик материалдарҙы уйлап табыуға һәләтле. Был, әлбиттә, бик ябай сағыштырыу, тик шуныһын оноторға ярамай: кеше ундай материалдарҙы етештереү өсөн махсус ҡорамалдар, ҙур-ҙур завод-фабрикалар төҙөй. Фәнни техник ҡаҙаныштарҙан файҙаланып, ялҡыткыс бер төрлө, механик рәүештә башҡарылған эштән үҙен-үҙе бушатып, кешене алыштырырлыҡ автомат-станоктар, роботтар уйлап сығара.

Көндәлек йәшәйештә кешенең эшмәкәрлеге көйләнелгән күнекмәләр рәүешендә бара. Тамаҡ ялғау, өй йыйыштырыу һәм башҡа шуныңише үҙенде
ҡарауға йүнәлтелгән эштәрҙе генә түгел, йәмәғәтселек ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереү өсөн тәғәйенләнгәндәрен дә уйһыз-ниһеҙ, күнегелгәнсә башҡарып була. Әммә һәр осорҙа ла "минән киткәнсе — эйәһенә еткәнсе" тип башҡарылған эш хупланмаған. Ундай эш ялҡаулыҡ билгеһе тип баһаланған халыҡ тарафынан һәм ижади эшмәкәрлек уға ҡаршы өлгө итеп ҡуйылған. Башҡорт халыҡ яҙыусыһы З. Биишеваның 1964 йылда яҙылған "Һөнәрсе менән Өйрәнсек" исемле хиҡмәтле хикәйәтендә тап шундай хеҙмәт эйәләре тураһында тасуирлана.

*...Ул якта -кыҙҙар һыуҙы бик тәрәндән. -кая таш итәгендәге кескәй генә шишмәнән, тар уңәсле көршәк һауыттар менән ташый икән. Саҡ кына яҙа баҫһа, көршәк ялп итеп осоп төшә лә... ватыла. Етмәһә, ябай балсыктан арлы- бирле һупалап яһалған был көршәктәрҙә һыу тиҙ ҙә боҙола, узенең шишмәләге сафлығын, татлылығын да югалта икән.*

*Һыу ташый торған көршәктәрҙең тупаҫ һәм ауыр булыуы ла ҡыҙҙар өҫөн бик тә уңайлы булмаған, әлбиттә. Көршәктәрҙең шулай килбәтһеҙ һәм бик тиҙ ватылыусан булыуы өсөн ауылда тик бер генә кеше көйөнмәгән. Киреһенсә, һөйөнгән генә. Сөнки көршәктәр ни тиклем тиҙерәк, йышырак ватылһа, уға шул хәтле табыш килгән. Был кеше ошо ауылдың көршәк яһаусыһы Өйрәнсек булған, һумер буйы шул эш менән көн куреп тә, бер ҡасан да ысын оҫта була алмаған өсөн, ауыл халкы, көлөп, уга "Өйрәнсек" тип исем ҡушҡан.*

*Был ауылда Өйрәнсек менән йәнәш тағы бер оҫта йәшәгән, Уныһы ла шулай уҡ балсыктан, ҡомдан әүәләп сәй эсә торған касалар яһай икән. Ауылдаштары был оҫтаны бик яраткан, хөрмәт иткән. Сөнки ул үҙенең эшенә бөтә йәнен, йөрәген һалып эшләй, ул яһаған касалар шундай нәфис, йоҡа һәм еңел булып сыға...Халык уны хөрмәтләп "Һөнәрсе" тигән ҡушамат биргән... Һөнәрсе бер ҡасан да тынғы белмәгән, һәр вакыт эҙләнгән, өйрәнгән. Шуға, ахыры, ул үҙ һөйәрендә көндән-көн үҫкән, камиллашкан. Һәр бер каса уның өсөн яңы асыш, яңы уңыш булған...*[2]

Ғөмүмән, кешенең эске тәбиғәте бер төрлө, ялҡыткыс хеҙмәтте үҙ итмәйҙер. Ижади башланғыс кешенең һәр эшмәкәрлегенә үтеп инә. Ниндәй генә эш башҡармаһын, үҙенсә генә алымдар ҡулланып, теләгәненсә һәм уйлағанынса матур итеп үтәп сығыуҙан ҡыуаныс кисермәгән берәү ҙә юҡтыр, моғайын. Әле антик дәүерҙә үк бөйөк аҡыл эйәһе Аристотель ижади башҡарылған бар эшмәкәрлекте лә: дауалау, аш бешереү, диңгеҙ гиҙеү һ.б. - "искусство" тип билдәләгән.[3]

Бер ыңғайҙан "сәнғәт" һүҙенең мәғәнәһенә асыҡлыҡ индереү фарыз. Ул ғәрәп телендәге "санәғә"-эшләү, етештереү, семәрләү, матурлап эшләү һ. б. ошоға яҡын мәғәнәләрҙе белдергән ҡылымдан яһалған һәм, ғөмүмән, "эш, хеҙмәт" йә "яһалмалыҡ, яһалғанлыҡ" тигән мәғәнәләрҙә ҡулланыла. Урыҫ телендә эквивалент төшөнсә булып хеҙмәт иткән "искусство" һүҙе лә бит, бер ҡараһаң, эште башҡарыу оҫталығына ишаралаһа, икенсеһе ("искусстненный") шулай уҡ теге йәки был сәнғәт осороноң кемдеңдер алтын ҡулдары һәм аҡылы менән яһағанлығын аңлата түгелме?

Донъялыҡта көн итер өсөн, йәғни үҙен-үҙе ҡарар һәм физиологик ихтыяждарын ҡәнәғәтләндерер өсөн яһалған, ҡоролған, төҙөлгән әйберҙәрҙән айырмалы рәүештә, сәнғәт әҫәрҙәре кешенең күңел донъяһын байыта, илһам һәм йәшәү дәрте өҫтәй, ҡыҫҡаһы, рухи аҙыҡ хеҙмәтен үтәй. Кешенең кеше рәүешенсә йәшәүе өсөн тәненең һәм йәненең үҙ-ара гармонияһы зарур. XX быуат аҙағындағы сәйәси-иҡтисади үҙгәреш-түңкәрелештәр

арҡаһында рухилыҡтың юҡҡа сыға яҙыуы илдә ниндәй афәттәр тыуҙырғанын оҙон-оҙаҡ һөйләһе түгел.

Кешене аҡылы һәр ваҡытта үҙгәрешкә, яңылыҡҡа, ижади эшмәкәрлеккә этәрә. Әйткәндәй, "жәддә" (яңырыу, яңылыҡ индереү) тигән тамырҙан яһалған "**ижад**" һүҙе үҙе үк бындай эшмәкәрлектең рәүешен теүәл аныҡлай. Әҫәргә кире ҡайтайыҡ.

*...Эштән ҡалған ваҡытында Һөнәрсе тауҙар, урмандар гиҙгән. Әйләнә-тирәне, ағас-ташты өйрәнгән. Үҙен өҙлөкһөҙ борсоп торған һорауҙарға тәбиғәт ҡуйынынан яуаптар эҙләгән. Алыҫ ҡалаға барып, уҙенә тиклем йәшәгән бөйөк һөнәрселәрҙең эштәре менән дә танышып ҡайтҡан... Һөнәрсе эҙләнеүен дауам иткән. Ер ҡаҙыған, таш, аҡтарған, текә ҡаялар аҫтына, мәмерйәләргә төшкән. Ахыр сиктә теләгенә ирешкән. Берҙән-бер көндө Һөнәрсе тап бая көндөҙ һиңә күрһәткән кеүек мөғжизәле көршәкте эшләү бәхетенә ирешкән...*

*Яңы ғына тумалған томбойоҡто хәтерләткән был ғәжәп көршәкте мин бик оҙаҡ әйләндереп-әйләндереп ҡарап ултырам. Уның нәфислеген, матурлығын, сәскә һәм семәрҙәренең гүзәллеген маҡтау түгел, ябай ғына аңлатып бирерғә лә һүҙ таба алмаҫымды тойоп, бөтөнләй юғалып ҡалам. Сөнки ғәҙәти көршәк түгел, ә бөйөк сәнғәт өлгөһө, кеше аҡылы тыуҙырған ҡабатланмаҫ ижад емеше ине минең ҡулымда!..*[4]

Көнәрсегә булған оло хөрмәттең икенсе бер хикмәте тиҙ ватылмаҫ, еңел һәм уңайлы көршәктә генә түгел, ә уларҙың иҫ киткес матур биҙәлеүендә икән. Кеше эшмәкәрлегенең икенсе бер үҙенсәлеге - унын матурлыҡҡа ынтылышлы булыуында, тип таба ғалимдар борон-борондан уҡ.

Шулай итеп, матурлыҡ ҡанундары буйынса аңлы рәүештә, ижади башҡарылған эшмәкәрлек һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән сәнғәт. Йөкмәткеһе һәм формаһы яғынан өр-яңы, йәғни ҡабатланмаҫ әйберҙәр (картиналар, йорт йыһаздары, биҙәнеү-төҙәнеү әйберҙәре, архитектура ҡоролмалары һ.б.) - барыһы ла сәнғәт әлкәһенә ҡарай. Ниндәй генә формала булмаһын, улар ижадсының үҙе тураһында, ул йәшәгән төбәк, ундағы мөхит, тарихи осор хаҡында һәм башҡа мәғлүмәттәр бирә. Үрҙәге әҫәрҙә лә бит Һөнәрсенең көршәктәренә Өйрәнсек үҙ исемен яҙып ҡуйған хәлдә лә, кешеләр ысын оҫтаның кем икәнлегенә йөҙ йылдан һуң да барыбер төшөнә.

Матурлыҡ тойғоһона бирелеп эшләнелгән, башҡарылыу рәүеше һәм формаһы йәһәтенән уникаль ҡомартҡылар, әлбиттә, музейҙарҙа лайыҡлы урынын алып, артабанғы быуындарға үткәндәгеләрҙең үҙенсәлекле аманаты, киләсәккә сәләме булараҡ хеҙмәт итә. Сәнғәт әҫәрҙәре менән танышыу процесында алынған белем көслө ыңғай эмоциональ кисерештәр фонында үҙләштерелә, һөҙөмтәлә кеше үҙен яңынан тыуғандай хис итә, рухы яңыра. Шуға күрә лә художестволы белемдең шәхес формалашыуын да, унын эстетик зауығының сифатын һәм тотороҡлолоғон булдырыуҙа әһәмиәте әйтеп бөткөһөҙ ҙур. Художестволы белем - донъяны танып белеүҙең үҙенсәлекле формаһы ла, айырым шәхесте эстетик-этик тәрбиәләү сараһы ла ул.

Төрлө осорҙарҙа әллә ҡайһы ҡитғаларҙа ижади эшләгән сәнғәт продукцияһы йөкмәткеһе һәм формаһы яғынан ифрат сыбар. Сифаттары буйынса фәндә улар бер нисә күҙлектән төркөмләп ҡарала.

Ағас, металл, балсыҡ, туҡыма һәм башҡа материалдарҙы файҙаланып, тормош-көнкүреш, биҙәнеү-төҙәнеү әйберҙәре, скульптура, картина, архитектура ҡоролмаһы кеүек ҡасандыр бер яһалғандары оҙаҡ йылдар буйы үҙгәрешһеҙ ҡала бирә. Былар - **статик сәнғәт төрҙәре.** Уларҙың араһындағы айырма күҙгә ташланып тора, мәҫәлән, кешенең балсыҡ йә металдан күсермә һыны — скульптура күләмле (объемный) булһа, таҡтаға беркетелгән туҡыма йә ҡағыҙға яһалған һүрәт — бер генә яҫылыҡта. Картинала тик махсус төшөрөү алымдары менән күләм эффекты тыуҙырыла.

Ә бына бейеү, йыр, балет театр спектакле, кинофильм һымаҡтар тәүгеләренән бөтөнләй айырыла. Бындай сәнғәт әҫәрҙәре ғәмәлдә теге йәки был башҡарыусының билдәле бер ваҡыт ағышында башҡарған музыкаль, хәрәкәт һ.б. эшмәкәрлегенән ғибәрәт булып, динамикала, процеста ғына ҡарала ала. Ҡайһы бер ғалимдар, мәҫәлән, Г.Н.Поспелов, В.Е.Хализев,[5] бындайҙарҙы **экспрессив** сәнғәт төрҙәре, тип атау яғында. Тағы ла шуныһы: башҡарыуға тәғәйенләнгән сәнғәт күренештәренең авторҙары ла бер нисә - һүҙ

авторы, көй авторы, хәрәкәт авторы һ.б. Ә уларҙы сәхнәләштереүселәре һәм туранан-тура башҡарыусылары бихисап булып, һәр ҡайһыһы үҙенсә ижад мәлен кисерә. Һуңғы ваҡытта ижадсыларҙың күбеһе төрлө сәнғәт мөмкинлектәрен эффектлыраҡ файҙаланыу һәм тағы ла тамашасы өсөн тәьҫирлерәк итеү юлдарын эҙләй. Ижад алымдарын үҙ-ара яраштырып, айырым-айырым түгел, ә ҡатнашмаһынан яралған синтетик ҡатмарлы сәнғәт төрҙәре нығына башланы һуңғы осорҙа. Мәҫәлән, кинофильм дә һүҙ, хәрәкәт, һүрәт, музыка файҙаланылһа, балетта - музыка һәм хәрәкәт, ҡурсаҡ театрында — скульптуралар, көй, һүҙ, хәрәкәт, һүрәт һ.б. Хатта эстрада йырын башҡарыу процесы ла хәҙер бейеү, пантомима, видеоһүрәт һәм башҡа алымдар менән байытылғанына шаһитбыҙ.

Сәнғәт әҫәрҙәрен етештерәм тип, кеше үҙе теләгән бер форманы биреү өсөн теләһә нисек итеп эшкәртә алырлыҡ барлыҡ тәбиғи материалдарҙы (ағас, таш, балсыҡ һ.б.), хатта үҙенең тәнен-тауышын, буй-һынын да ҡулланышҡа индергән. Бары тик ундай материалдар ярҙамында, башҡалар күрерлек һәм ишетерлек образдар тыуҙырып, шулар аша ниндәйҙер фекер белдерерлек кенә булһын!

Фекер белдереү тигәндәй, сәнғәт әҫәрҙәренең тышҡы күренеше, эшләнгән материалы йә булмаһа башҡарыу рәүеше йәһәтенән төркөмләү артыҡ ҡыйынлыҡ тыуҙырмай. Ә бына йөкмәткеһе буйынса, йәғни формаға һалынған "йәшерен мәғәнәһе" буйынса, классификациялау бигүк еңел эш түгел. Ошо юҫыҡтан ҡарағанда, барлыҡ сәнғәт әҫәрҙәрен икегә бүлергә була.

Беренсе төркөмгә әйләнә-тирәләге донъяны, нисек бар, шул рәүешерәк күҙ алдына баҫтырырға мөмкинлек биргәндәрен, мәҫәлән, һынлы сәнғәт, скульптура, пантомима кеүектәрен, "изобразительные" йәки **һүрәтләүгә, һынландырыуға ҡоролған сәнғәт төрҙәре** тип атайҙар.[6]

Икенселәре иһә реаль предметтың тулы күсермәһе түгел, ә уларҙың айырым элементтарын хәтерләткән һәм ысынбарлыҡта булыуы мөмкин булмаған предметтар, мәҫәлән, орнамент, архитектура, бейеү, музыка әҫәрҙәре. Улар туранан-тура тормош картинаһын һүрәтләмәй, ә тәбиғәт биҙәктәрен, тәбиғәт күренештәрен үҙенсәлекле сағылдыра. Орнаментта, мәҫәлән, сәскә-үҫемлектәр формаһы, хайуандар профилен ҡабатлаған биҙәктәр булыуы мөмкин. Был төр сәнғәт әҫәрҙәрендә ижадсының кисерештәре, уй-хыялдары менән бергә мөхиттең үҙенсәлектәре, буяу-формалар аша донъяны аңлау-аңлатыу кимәле, матурлыҡ идеалы тасуирлана. Шуға ла был төркөмгә -экспрессив **(латин һүҙе** "выразительный" мәғәнәһендә), йәғни эске **үҙенсәлектәр аша ниндәйҙер уй-**кисерештәрҙе **тасуирлаусы, белдереүсе сәнғәт төрө** тип әйтәләр. Сәнғәт төрҙәре араһындағы сиктәр үтә ныҡ ҡәтғи түгел. Йыш ҡына теге йәки был төргә хас булған алымдар ҡатнаш файҙаланыла, мәҫәлән, ваза эшләү һәм уны билдәле стилдә биҙәкләү, кино-видеотаҫмалар төшөрөү. Хәҙерге заманда айырым кешегә генә түгел, бер ыңғайҙан массаларҙы ҡуҙғыта-шаштыра торған яңынан-яңы художестволы саралары эшкә егелә һәм шулар һөҙөмтәһендә быға сасабулмаған сәнғәт өлгөләре тыуыуы ихтимал.

## II бүлек

## Художестволы әҙәбиәт. Әҙәби текст

Ә художестволы әҙәбиәт сәнғәттең ҡайһы төрөнә ҡарай һуң?

Был һорауға теүәл яуап биреү өсөн үҙенән-үҙе "художестволы әҙәбиәт" тигән төшөнсәне бер аҙ асыҡлау талап ителә. Художестволы, икенсе төрлө әйткәндә, матур йәки нәфис әҙәбиәт күп кенә фәнни хеҙмәттәрҙә - "тормош дәреслеге",[7] икенселәрендә -"донъяны танып белеү формаһы",[8] өсөнсөләрендә -айырым сәнғәт төрө[9] тип атала.

Бер ҡараһаң, уларҙың һәммәһе лә үҙенсә дөрөҫ, әммә ул билдәләмәләр, айырым-айырым торғанда, матур әҙәбиәттең барлыҡ үҙенсәлектәрен үҙ эсенә алып бөтмәй. Был ғәжәп түгел, сөнки художестволы әҙәбиәт тип йөрөтөлгән күренеш бик ҡатмарлы, күп ҡырлы сифаттарҙы үҙенә туплаған. Йыш ҡына теге йәки был фәнни тикшеренеүҙәрҙә художестволы әҙәбиәттең ҡайһылыр яғы: йә тәғәйенләнеше, йә функциялары, йә әһәмиәте, йә йөкмәткеһе, йә бүтән сифаттары ҡарала һәм шунан сығып билдәләнә лә инде. Нисек кенә өйрәнелмәһен, художестволы әҙәбиәт тәбиғәттән үҙе яратылған күренеш түгел, ә башҡа сәнғәт өлгөләре

кеүек үк кеше эшмәкәрлегенең емеше. Тап ошо юҫыҡта ҡарағанда ғына уға хас булған фундаменталь дөйөм үҙенсәлектәрҙе айырып алырға була.

Әйткәндәй, яҙыусы "әҙәбиәт" ижад итмәй, ул яҙма яҙа. Ошоға ҡарап, уны Европала латин телендәге "литер-хәреф" тигән тамырҙан яһалған "литература" һүҙе менән йөрөтә башлағандар борондан уҡ. Шәреҡ традициялары нигеҙендә үҫешкән халыҡтар иһә, шул иҫәптән башҡорттар, былдай яҙмаларҙың иң тәүҙә кешене белемгә, әҙәпкә өйрәтеүен иҫәпкә алып, "әҙәп" тигән ғәрәп һүҙенән яһалған "әҙәбиәт" атамаһын үҙ иткән. "Литература" ла, "әҙәбиәт" тә, логика күҙлегенән билдәләһәк, дөйөмләштерелгән абстракт төшөнсәләр, уларға йыйылма (собирательное) мәғәнә һалынған. Әҙәбиәт тигәндә, шул уҡ фекерҙе икенсе төрлө әйтһәк, бихисап ижадсылар тыуҙырған яҙмаларҙың - уйҙағы, аңдағы - шартлы рәүештәге тупланмаһы к үҙ уңында тотола.

Һәр берәү ҡағыҙға төшөргән барлыҡ яҙма ла сәнғәт күренеше тип иҫәпләнә алмай. Уларҙың күп өлөшө кешеләрҙең үҙ-ара аралашыуҙарын еңеләйтеү, көндәлек тормошон йәки йәшәйешен көйләү, кешелектең тормош тәжрибәһен һәм тупланған белемде теркәү әсән башҡарыла. Яҙыусыларҙың илһамлы ижады һөҙөмтәһендә яҙылғандары ғына сәнғәт күренеше һәм "художестволы, матур, нәфис" тигән сифаттар ярҙамында аныҡланып, ғәрәптең "әҫәр" тигән һүҙе менән атала. Тағы ла шуны иҫәптән сығарырға ярамай: "художестволы" һәм "әҙәби" бер үк яҫылыҡтағы синонимик төшөнсәләр була алмай. Сәнғәт өлкәһененең барлыҡ өлгөләрен дә, мәҫәлән, кинофильмдарҙы, картинаны, художестволы әҫәр (художественное произведение) тип әйтергә була. Һүҙ сәнғәте күренеше булғандары, тимәк, художестволы әҫәрҙәрҙең бер өлөшө генә "әҙәби әҫәр" тип йөрөтөлә.

Һүҙ оҫталарының ижад емеше - әҙәби яҙманың фәндә тағы бер атамаһы бар. "Бәйләнеш, берләшмә" тигән мәғәнәләге "текст" тигән латин һүҙе күптән инде халыҡ-ара терминға әүерелгән. Әҙәби яҙма тәү ҡараштка ябай күренеш һымаҡ, ләкин төбөнә төшә башлаһаң, ҡатлы-ҡатлы мәғәнәләре асыла бара. Шуның өсөн дә "текст" төшөнсәһенә теүәл билдәләмә биреүе еңел эш түгел. Ғалимдар раҫлауынса,[10] хәҙерге фәндә "текст" **төшөнсәһенә йөҙәрләгән билдәләмә бар.** Уларҙың һәр береһенә туҡталып тороу беҙҙең маҡсатҡа инмәй, бары был өлкәләге яңы тенденциялар юҫығында бер аҙ асыҡлап китеү урынлы булыр.

XX быуаттың, 60-80-се йылдарында фәндәрҙең үҙ-ара бәйләнештәрен тығыҙайтырға, бигерәк тә һәр фән өлкәһендә комплекслы тикшеренеүҙәрҙе киң йәйелдерергә юл асылғас, әҙәбиәт ғилеме һәм лингвистика ялғамында өйрәнелгән структур поэтикаға тағы ла ҡыҙыҡһыныу уянды. Шул сәбәптән "текст" төшөнсәһен аныҡлауға йүнәлтелгән хеҙмәттәр күбәйҙе. Айырыуса быуат аҙағында был термин актуалләште, сөнки ул информацион процестарға бәйле йылдам үҫешкән яңы фән тармаҡтарында нигеҙ булырҙай төшөнсәгә әүерелде.

Хәҙерге ваҡытта "текст" һүҙенә үтә киң мәғәнә һалына. Мәҫәлән, семиотика тигән фәнни йүнәлештә текст "шартлы тамғалар йыйылмаһы" тип ҡарала һәм текст күпмелер информацияны хәбәр итеү-итмәү күҙлегенән өйрәнелә.[11] Ниндәйҙер тамғалар йә бүтән төрлө саралар ярҙамында теләһә ниндәй ысул-алым менән, теләһә ниндәй материалдан (балсыҡ, таш, тимер, быяла, ҡағыҙ, туҡыма һ. б.) яһалған һәр әйбер, әгәр ҙә күпмелер информация бирһә, текст тип иҫәпләнә ала. Мәҫәлән, шартлы тамғалар һәм буяу менән һыҙылған географик карта ла — үҙенә күрә текст. Ә шулай художестволы картинаның, хореографик әҫәрҙең һәр береһе үҙенсәлекле эстетик информация бирә. Ҡыҫҡаһы, үрҙә беҙ ҡарап үткән сәнғәт төрҙәренең барыһы ла, семиотика күҙлегенән ҡарағанда, "текст" менән эш итә була. Ёгәр ҙә беҙ ошо теорияны үҙ итһәк, нисегерәк һәм ниндәй саралар ярҙамында яһалғанлығына ҡарап, текстарҙы икегә бүлер инек.

**Һүҙһеҙ (несловесные) текстар.** Былдай өлгөләр, ҡабатлап әйтһәк, һүҙһеҙ текстар кеше организмына хас сигналдар системаһының, атаҡлы физиолог академик И. П. Павлов буйынса, беренсе төрөнә тәғәйенләнә. Фәндәге статистика раҫлауынса, кеше 90% тирәһе информацияны тап шул тыумыштан бирелгән, йәғни тәбиғәт яратҡан, беренсе сигнал системаһы тип йөрөтөлгәндәрҙән - күҙ һәм ҡолаҡ аша ҡабул итә.

**Һүҙҙәрҙән төҙөлгән (словесные) текстар** туранан-тура кешенең икенсе сигналдар системаһын барлыҡҡа килтергән аңға тәьҫир итә. Бәхәс юҡ: өндәрҙең шартлы тамғаһы - хәрефтәр ярҙамында ҡағыҙға яҙылған һүҙҙе күҙ күрә, бары күрә генә. Ә ул һүҙҙең мәғәнәһе аң тарафынан ҡабул ителә. XIX быуаттың суфый шағиры, тыумыштан тома һуҡыр Шәмсетдин Зәки асылда әҙәми заттың "ике" типтағы күҙе булыуы хаҡында бик дөрөҫ

әйткән:

Күҙ кәрәктер, күҙ кәрәк, эй ир мәне,
К үҙлегә ғибрәт булыр йыһан хәле.
Күҙ түгел заһир күҙе. Батын күҙе
Булмайынса, күренмәҫ мәғәнә йөҙө.

Донъялағы хәлдәрҙе күреү әсән маңлай күҙе -тышҡы күҙ хеҙмәт итһә, уны аңлау әсән эске "йәшерен( батын)" күҙ - күңел күҙенең булыуын шарт итеп ҡуйған үҙ осороноң атаҡлы шағиры Ш. Зәки.

Һүҙҙәрҙән ойошҡан текстарҙы үҙенсәлектәренә ҡарап, художестволы һәм художестволы, теүәлерәк итеп әйткәндә, әҙәби һәм әҙәби булмаған ике төргә айырырға мөмкин.

**Әҙәби булмаған текстар** йәмғиәттәге үҙ-ара бәйләнештәрҙә ҙур роль уйнай һәм ифрат киң функция башҡара. Уларға фәнни һәм рәсми эш ҡағыҙҙары, журнал-газеталар әсән яҙылған материалдар, публицистика, ҡыҫҡаһы, информатив тип йөрөтөлгән текстарҙың барыһын да индерергә мөмкин. Ғәҙәттә, бындай текстар әҙер шаблон, стандарт буйынса яҙылып, ҡалыплашҡан формаларҙа (отчет, протокол, хат, хәбәрнамә һ.б.) була.

**Әҙәби текстың** әҙәби түгелдәренән айырмаһы тәү ҡарашҡа әллә ни ҙур түгел һымаҡ. Ул да теге йәки был милли телдең лексик берәмектәренән - айырым һүҙҙәрҙән туҡыла, һәм, уҡыусыға, эстетик информация белдереп, донъяны танып белеүгә, ысынбарлыҡ тураһында белем туплауға булышлыҡ итә.

Әҙәби текстың бүтәндәренән айырып торған төп үҙенсәлеге - уның образлылығы. Буяуҙар ярҙамында рәссам, мәҫәлән, берәй тәбиғәт күренешен һүрәт итеп төшөргән кеүек, яҙыусы ла һүҙҙәр менән кешеләр тормошондағы хәл-ваҡиғаларҙы киноэкрандағы ише асыҡ һәм төҫлө итеп күҙ алдына баҫтырырға һәләтле. Әйләнә-тирәләге донъя — ул объектив ысынбарлыҡ, йәғни материаль кәүҙәләнеше булған реаллек, ә әҙәби текст - шул реаллектең виртуаль күсермәһе. Ул кеше аңында образ-күсермә рәүешендә сағыла. Көндәлек йәшәйеш тәбиғи рәүештә кешеләрҙә даими тәьҫораттар, уй-кисерештәр уята. Баҡһаң, һүҙҙәрҙән теҙелгән әҙәби текста һүрәтләнгән виртуаль донъя ла шундай көслө хис-тойғолар тыуҙырырлыҡ эмоциональ тәьҫир көсөнә эйә икән. Шулай итеп, яҙыусы тыуҙырған әҙәби донъя, әгәр ҙә ысынлап та художестволылыҡ сифаттарына эйә булһа, кешеләрҙе илата ла, йыуата ла, көлдөрә лә ала.

Бына әле беҙ яҙған фәнни, йәғни художестволы булмаған текстан юғары художестволы әҙәби әҫәр ни яғы менән айырыла, шуны асығыраҡ күрһәтер өсөн түбәндә Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың 1962 йылда ижад иткән "Сәнғәт" шиғырын тәҡдим итәбеҙ.

Еңелерәк кеүек шағирҙарға:
Беҙ, исмаһам, тойғо-уйҙарҙы
Күҙҙәр менән әйтеп бирә белгәс,
Ятҡырмайбыҙ бикләп уларҙы –
Бикләр замандарҙы уҙғарҙыҡ!..
Рәссам да аса үҙ донъяһын,
Йәйғор буяуҙарға буятып.
Ә көй сығарыусы моңо менән
Иң-иң нескә хистәр уятып,
Һөйләй, көйләй белә...
Ә башҡалар?
Нишләй улар - ғашиҡ булһалар,
ҡайғырһалар,
йәки ҡыуанһалар,
Сикһеҙ бәхет менән тулһалар!
Бәлки, әйтмәгән уй көслөрәктер,
Хислерәктер һүҙ,
моң,
буяуҙан?
Юҡ, барыбер ғашиҡ-шағир була,

Уяуыраҡ була уяуҙан:
Ул йыр йырлай,
Ул һүрәттәр яһай,
Буяу алмаһа ла ҡулына.
Шул һөйөүҙән тыуғандыр ҙа сәнғәт
Кешелектең изге юлына.
Тәүге шағир, рәссам йә көйсө лә, -
Моғайын, ул ғашиҡ булғандыр.
Мөхәббәтен, шиғри матур,
моңло итер әсән,
ҡулын һуҙғандыр
Был ерҙәге сағыу биҙәктәргә ,
шиғри һүҙгә,
сихри моңдарга,
Кәм сәнғәтте алып сыҡҡандыр ул
Үҙе үтер оҙон юлдарға!..
Ә был оҙон, урау юлы уның
Һикәлтәле, ҡыйын булғанға,
Һәр аҙымы һайын мөхәббәтен
Ҡара көстәр быуып торғанға,
Нәфрәтен дә ҡушып мөхәббәткә,
Ҡорал иткәндер ул сәнғәтен...
Эйе!
Һин даулаштың,
һин яулаштың, сәнғәт,
Ерҙең тәүге азат сәғәтен.
Һин көс булып, Һин үс булып,
Хис уяттың, уйҙар уйлаттың.
Юлдарыңда күпме ҡорбан ятты,
Юлдарыңда күпме ҡан аҡты!..
Әй, ҡыйыу һүҙ,
тере буяу,
саф моң!
Онотмайыҡ изге ҡаныңды.
Кейгелектең саф намыҫы итеп,
Күтәрәйек һинең даныңды.
Кеше
ғашиҡ бөгөн
бар донъяға,
Мөхәббәте һыймай йыһанға.
Йондоҙло тел кәрәк бөгөн уға.
Әй, ҡанат ҡуй,
заман илһамға![12]

Сәнғәттең йәмғиәттәге әһәмиәте, кешеләргә эстетик йоғонтоһо, һүҙ сәнғәтенең тылсымлы көсө хаҡында 64 кенә шиғыр юлы аша ни тиклем тәрән һәм образлы әйтелгән! Шуға ла әҫәр китап уҡыусыһының күңеленә уйыла. Уның аңында художестволы картина-вәхшиҙәрсә үлтерелгән Аҡмулла, Бабичтар һыны терелеп пәйҙә булғандай, шул картина зиһенде ялмай, хисләндерә һәм йөрәкте ярһыта.

Фәнни текст иң тәүҙә, аҡылға аҙыҡ биреп, фекер дарьяһын ҡуҙғытып ебәрһә, художестволы һүҙ хис-тойғоға юл аса, кешелә дәрт уята, илһам саҡкыһын өҫтәй.

## Артефакт тураһында төшөнсә

Әҙәби текстарҙың һәр береһе - ҡабатланмаҫ, берәү һәм берәгәй күренеш. Эшләп-төҙәтеп, матурлап бөткәндән һуң скульптура, архитектура ҡомартҡыһы һәм шуның ингеләр

ҡабат яңынан үҙгәртеүҙәргә дусар ителмәй. Шулар һымаҡ уҡ әҙәби текстар ҙа, бер ҡарағанда, статик хәлдә ҡатып ҡалған сәнғәт төрҙәре иҫәбендә йөрөргә хаҡлы. Ошо йәһәттән улар һынлы сәнғәт үрнәктәренә оҡшаш. Ижад ителгәндән әҙәби әҫәр тексының автор тарафынан иң тулы тип иҫәпләнгән һәм уҡыусы хөкөмөнә тәҡдим ителгән варианты автор ихтыярынан тыш һис үҙгәртелмәй, баҫманан баҫмаға шул килеш күсерелә. Әммә әҙәби текст менән художестволы картина араһы, икенсе ҡарағанда, ер менән күк кеүек.

Һәр сәнғәт әҫәренең тышҡы материаль кәүҙәләнеше һәм эске эстетик йөкмәткеһе үҙенсәлекле уҡмашҡан бөтөнлөктө, органик берлекте барлыҡҡа килтерә. Уларҙың тышҡы ҡиәфәтен-күренештәрен фәндә **артефакт** (латинса - яһалма эшләнгән) тигән термин менән атайҙар. Әҙәби текста артефакт һәм эске йөкмәткенең үҙ-ара бәйләнеше йәки бер-береһенә тоташыуы башҡа сәнғәт төрҙәренән ҡырҡа айырыла. Картина, мәҫәлән, ниндәйҙер материалды буяу юлы менән эшләгән һүрәттән ғибәрәт. Уның артефактын, йәғни ҡулланған материалды, буяуҙы, айырып-алмаштырып булмай, сөнки, улай эшләгәндә, һүрәт юҡҡа сыға һәм картина картина булыуҙан туҡтай. Шулай уҡ архитектура ҡоролмаһының формаһы йә бетон, йә кирбес-таш, йә быяла йәки металл ярҙамында кәүҙәләнә. Материалдың үҙен ҡоролманан айырып алыу - мөмкин булмаған эш, ул ҡоролманы емереү булыр ине. Тимәк, һынлы сәнғәт төрҙәрендә артефакт һәм эске йөкмәтке ысын мәғәнәһендә бер-беренән айырылғыһыҙ, бергә уҡмашҡан.

Әҙәби текста иһә был бәйләнеш бөтөнләй икенсе төрлө. Ижадсы, ҡайһы осорҙа һәм ниндәй ҡитғала нисек яҙыуына ҡарап, төрлө материалға (папирус, ебәк, туҡыма, тире, туҙ, ҡағыҙ һ. б.) төрлө яйлама менән (тимер ручка, ағас таяҡ, ҡауырһын һ.б.) төрлө типтағы хәрефтәрҙе ҡулланып яҙыша ала. Әммә был автор текстына һәм уның йөкмәткеһенә һис бер зыян килтермәй. Бер үк тексты теләгән бер хәрефтәр системаһына - графикаға күсереп була. Мәҫәлән, "Урал" һүҙен латин, ғәрәп һәм башҡа алфавиттағы хәрефтәр менән яҙырға мөмкин, бындай транслитерациянан уның яңғырашы ла, мәғәнәһе лә үҙгәрмәй. Өҫтәүенә, өр-яңы сифаттарға эйә булған, йәғни туҙмай-серемәй, оҙаҡ һаҡлана торған материалдарҙы ҡулланып, хәрефтәрҙең ҙурлығын, шрифтын, буяу төҫтәрен йәнең теләгәнсә үҙгәртергә, төрлөләндерергә мөмкин. XVI быуатта Рәсәйҙә Иван Федоров, беренсе баҫыу станогын уйлап табып, әҙәби тексты баҫма рәүештә сығарыу асышына ирешкән. Хәҙерге көндә компьютер технологияларына нигеҙләнгән ҡеүәтле полиграфик база меңәрләгән тираж менән, теләгәнеңсә биҙәп, әҙәби тексты кәрәгенсә күбәйтергә мөмкинлек тыуҙыра. Әммә шуныһы: әллә нисек, әллә күпме баҫылһа ла, һәр данала автор тексы үҙгәрешһеҙ ҡала.

Артефакт әҙәби текстың йөкмәткеһенә нисектер зыян килтереү түгел, киреһенсә, мәғәнәүи һәм эстетик информация өҫтәй. Артефакттың һәр бер элементы, теге йәки был әҙәби тексҡа уҡыусы иғтибарын йәлеп иттерә, реклама ролен үтәй һәм әҙәби йөкмәткене яҡшыраҡ аңларға ла булышлыҡ итә. Һәр заманда яңырып торған материаль-техник база нигеҙендә артефактың туҡтауһыҙ үҙгәреүе бер-береһен алмаштырып килгән уҡыусылар быуынының эстетик зауығына әҙәби тексты ҡулайлаштыра, уларҙың иғтибарын ылыҡтыра.

Ҙур әһәмиәткә эйә булыуға ҡарамаҫтан, артефакт үҙенән-үҙе генә әҙәби әҫәрҙең "ғүмер" оҙонлоғон бер нисек тә билдәләй алмай. Теге йәки был милли телдә ижад ителгән текстың әҙәби процестағы урыны һәм йәшәү һуҙымы уның художестволылыҡ кимәленә бәйле. Юғары художестволы текстар үҙҙәре ижад ителгән осорҙағы уҡыусыларҙы ғына түгел, бәлки, киләһе быуындар уҡыусыһының, улай ғына түгел, башҡа милләт вәкилдәренең күңеленә хуш килә, ҡабат-ҡабат уҡығанда ла үҙенсәлекле эстетик тойғо тыуҙырырға һәләтле. Ошо йәһәттән, Фирдәүсиҙең "Шахнамә"һе, Шекспирҙың трагедиялары ише, донъя кимәлендә "үлемһеҙ"гә әйләнгән әҙәби текстар ҙа бар.

Әйтергә кәрәк, ҡайһы бер ғалимдар, мәҫәлән, үҙ фәнни мәктәптәрен булдырған күренекле рус филологтары М. Бахтин һәм Ю. Лотмандар айырым милләттең, шулай уҡ дөйөм кешелектең мәҙәни ҡаҙнаһын байытыр лыҡ, быуындан быуынға тапшырыла килгән рухиәт хазинаһы тип баһаларлыҡ ҡиммәтле яҙма текстарҙы ғына художестволы текст, тип ҡарау яғында. Башлыса сәнғәт әҫәрҙәрен өйрәнеүгә йүнәлеш тотҡан культурология фәнендә "художестволы текст" термины ошо мәғәнәләрәк ҡулланыла. Айырым һүҙ һөйләмдәрҙән туҡылып, йөкмәтке яғынан тамамланғанлыҡ (завершенность) һәм форма йәһәтенән эстетик бөтөнлөк (цельность) хасил иткән һәм үҙенә күрә уникаль,

ҡабатланмаҫ әҙәби текстар ғына йәмғәтселек фекерен ҡуҙғыта, милли әҙәбиәттәр үҫешенә һиҙелерлек йоғонто яһай, хатта дөйөм кешелек тарихында үҙ эҙен ҡалдыра.

## Әҙәби эшмәкәрлектең асылы

Ғәҙәти һүҙҙәр ярҙамында мөғжизәле һүҙ донъяһы тыуҙырыуҙы "эшмәкәрлек" тигән термин менән нарыҡлау ҡолаҡҡа бигүк ятышлы түгел дә һымаҡ. Ғәрәп теленән үҙләштерелгән "ижад", рус телендәге "творчество" һүҙҙәренә, әгәр ҙә "художестволы" тигән аныҡлаусы ла ҡушылһа, ниндәйҙер поэтик яңғыраш һәм мәғәнәүи тәрәнлек өҫтәлгәндәй тойола. Был аңлашыла ла, сөнки әҙәби ижад процесын ҡәҙимге эшмәкәрлеккә ҡайтарып ҡалдырыу уның ҡатмарлы характерын үтә ябайлаштырыу һымаҡ тәү ҡарашҡа. Уйлап ҡараһаң, көндәлек тормошта һәр кем дә - тел оҫтаһы, теләгәненсә иркен һөйләшә, ә хәреф танырға өйрәнеү менән башындағы бер уйын һис бер икләүһеҙ ҡағыҙға ла төшөрә ала. Әммә шул күптәр араһынан һирәктәр генә дөйөм ҡулланылышта йөрөгән һүҙҙәрҙән ысын художество ҡиммәттәренә - юғары сәнғәт өлгөләренә әүереләсәк текст ижад итеүгә һәләтле. Ошо һәләт, айырыуса шиғыр тыуҙыра алыу, йәғни шағирлыҡ "хоҙайҙан бирелмеш", "тыуғанда уҡ бүләк ителмеш" сифат тип аталып, уның теге йәки был кешелә булыу-булмауы йыш ҡына ниндәйҙер илаһилыҡҡа ҡайтарып ҡалдырыла. Был хаҡта атаҡлы һүҙ оҫтаһы Шәйехзада Бабичтан да аныҡыраҡ әйтеүсене табыуы ҡыйын.

Әлмисаҡтан һин шағирһың, тип
хоҙайҙың әмере бар,
Әмеренә иттең хилаф - мәлғүн
мөхиттең йәбере бар...[14] тип яҙа ул **1916** йылда "Йәш шағирға" әҫәрендә. Ғөмүмән, шағирлыҡ тойғоһо һәм уның сығанаҡтары хаҡында уйланмаған-яҙмаган шағирҙар элек тә, хәҙер ҙә бик һирәктер.

Халыҡ шағиры Н.Нәжми хатта "шағирлыҡты яҙыусылыҡтан" айырып ҡарай. Уныңса, шағир булып тыуалар, ә яҙыусы булып китәләр, әммә уларҙың уртаҡ яҡтары ла бар: "Шағирлыҡ - ул яҙмыш, тимәк, яҙыусылыҡ та шулай".[15] Үҙенең "Ғалимлыҡ һәм яҙыусылыҡ" тигән яҙмаһында Н.Нәжми "яҙыусылыҡ" төшөнсәһенә үҙенсәлекле градация индерә һәм ысын яҙыусыны "кораусынан" айырып күрһәтә.[16] Шиғыр, уйлай китһәң, һәр бер әҙәби шедевр ҙа, йә бар, йә юҡ, тип таба әҙип. Шуға ла уларҙы тыуҙырған талант һәм оҫталығы хаҡында оҙон-оҙон тикшереү-анализдың китап уҡыусыһы өсөн кәрәге самалы, унан тағы еренә еткереп аңлатып та булыуы шикле, тиеберәк иҫәпләй Н.Нәжми: "Шағирлыҡты һәм оҫталыҡты аңлата башлаһаң, аҡыл һатыуға әйләнеп китеүе мөмкин, сөнки шиғырҙы тойоу, уны ҡағыҙға төшөрөү процесын шағир үҙе лә аңлатып бөтә алмайҙыр - улар бит сихри һәм ғазаплы, шатлыҡлы һәм бәхетле минуттар - үҙең дә һиҙмәй ҡалаһың".[17]

Халыҡ шағиры М. Кәрим әле 1958 йылда уҡ "Йөрәккә юл" уйланыуында "әҙәби ижадтың төп хужалары тип, талант һәм тәбиғи һәләтте"[18] атап, ҡәләм тибрәтеүсе һәр берәүҙә мотлаҡ булырға тейешле ижад осҡоно хаҡында һүҙ алып бара. Шул осраҡта ғына "шиғыр ул, кислородлы һауала ут гөлт итеп тоҡанған шикелле, тормош киңлектәрен күргән шағир күңелендә балҡып тыуа ала. Әммә был талап барыһы ла бер төрлө яҙышырға тейешлекте аңлатмай. Киреһенсә, һәр шағирҙың үҙ темаһы, поэтик ҡарашы, ысынбарлыҡҡа ҡарата үҙенең идея-художество баһаһы булырға тейеш, шул саҡта ғына "күңелдән сығып күңелгә ятҡан шиғырҙар" яҙылыуы мөмкин.

Гөлт итеп ҡабыныуҙы, зиһендәге кинәт балҡышты, шағирҙар үҙҙәре әйткәнсә, күңелдә моң яралыуҙы фәндә "творческое озарение" йәки "инсайт" тип атайҙар һәм подсознаниела барған, тап теге йәки был кешенең үҙенең аҡыл эшмәкәрлегенә, фекерләү ҡеүәһенә бәйле процестар рәүешендә аңлаталар.[1] Икенсе төрлөрәк уны **ижади интуиция,** хатта алтынсы тойғо (шестое чувство) тип тә йөрөтәләр. Ижад өсөн улар мотлаҡ кәрәк, әммә шул "шиғри осҡондо", уй-образ балҡышын тотоп алыу һәр ижадсының сослоғона, һәләтенә бәйле. "Шағир" тигән шиғырында тап ошо ижад мәлен Рәшит Назаров образлы тасуирлай:

*Алыҫта!.. Алыҫта!.. Офоҡ ситендә*
*Бер генә секунд тик ҡабынып ҡуя,*
*Тылсымлы нәмәкәй, ә уның битендә*

*Тылсымлы яҙыу бар — сагылып -куя.*
*Ялп итеп... һәм тиҙ ук ябынып куя.*
*Өҫтөнә а-ҡ томан - югала...*
*Ниндәй етеҙ, йор!*
*Кем укый алһа шул тылсымлы яҙыуҙы,*
*Ул - шагир!*[20]

Телдән ижад итеү - импровизация тап ошондай мәлдәргә ҡоролалыр, моғайын. Зиһен үткерлеге, логик фекерләү һәм белем сығанаҡтарының байлығы, информацион етеҙлек һәм *әллә* күпме бүтән ижади ресурстар нигеҙендә генә материэдгазациялана импровизаторлыҡ һәләте. Элек-электән халыҡ бындай һәләтте бик юғары баһалаған. Атаҡлы йырауҙар һәм сәсәндәр хаҡындағы легендаларҙың һәм уларҙың ижади һүҙҙәренең һаман да халыҡ хәтерендә һаҡланыуы - быға яҡшы дәлил.

Әммә шағирлыҡ, бигерәк тә яҙыусылыҡ, импровизаторлыҡ түгел, ул тап процессуаль яҡтан айырыла. Зиһендәге балҡышты тотоп алыу менән һәр һүҙ оҫтаһының реаль ижад процесы, йәғни яҙыу-һыҙыу башлана. Иҫ китерлек: "Шиғырҙы яҙмайһың, шағир булып тыуғандарға шиғыр үҙенән-үҙе килә", тип раҫлаусыларға ун һигеҙ генә йәшлек талант эйәһе Рәшит Назаров ҡаршы сыға. Ул шиғыр ижад итеүҙең, әҙәби әҫәр тыуҙырыуҙың ауыр эшмәкәрлек икәнлегенә баҫым яһай:

*Кисултырып тагы шигыр яҙам...*
*Куп ишеттем шагир халкынан —*
*Шагир йәшәй бары илһам менән,*
*Яратылган улар ялкындан,*
*Көнләшерлек шагир хал-кынан...*
*Мин дә яҙам бына, шигыр яҙам...*
*Йәшермәйем, псай саж йырымда*
*"Мин шагирмын", - тип тә әйшәмендер, ~*
*Йә рифмага -кулай урында.*
*Йә тик былай - матур һуҙ өҫөн,*
*Шәп яңгырай йырҙа был исем!*
*агыҙ буйлап дәртле бер моң ага:*
*"Шагир өҫөн төн дә, кис тә юк,*
*Шагирҙар ул таң, яҙ менән йәшәй..."*
*Ә йөрәк тын - уй ҙа, хис тә ю-к...*
*Тик моң ага: "төн дә, кис тә КУК..."*
*Их!.. Мин ябай кеше, ябай гына...*
*Шагир булһам икән мин әгәр!*
*Кур уларҙы: шаян-наяндарҙы:*
*Һәр көн улар куктә йөҙәләр,*
*Айҙы эйәр итеп атланалар,*
*Берәм-берәм йондоҙ өҙәләр.*
*Ә мин бына, тып-тын башты эйеп,*
*Ниҙер яҙам, һыҙам тагы ла...*
*Эх, шулай ҙа шагир булһаң ине,*
*Бер ни тугел һис ни уларга...*
*Ауыр икән шагир тугелдәргә*
*Тормошта ла, шигыр-йырҙа ла –*
*Ауыр икән... тагы шигыр яҙам...*[21]

Ысынлап та, кеше уҡырлыҡ әҫәр тыуһын өсөн, илһамға өҫтәп хеҙмәт-көс тә сарыф ителеүен раҫлай халыҡ шағиры Рауил Бикбаев үҙенең «Шағирә» шиғырында:

Кешеләргә әйтер һүҙҙе эҙләп,
Йоҡо күрмәй күпме тән үтә...

Шағирлыҡ һәм шиғыр яҙыу хаҡында яҙылған һәр шиғырҙа үрҙәге фекерҙәр образлы

сағылыш таба һәм ижад мәлдәренең тәүгеһенә - Р.Назаров быны бик дөрөҫ тотоп алған - иғтибар күберәк бүленә. Нисек кенә булмаһын, тәбиғәттән бирелгән һүҙ оҫталығы теге йәки был заттың өлөшөнә тейгән көмөш икәнлеге һәм уға йөкмәтелгән оло миссия булыуы бер ниндәй бәхәс тыуҙырмай.

### Әҙәби ижадты өйрәнеү мәсьәләләренә бер байҡау

Әллә нисәмә быуат буйына бәхәстәр ҡуҙғытҡан проблема кеше аңының үрҙә беҙ телгә алған моменты -"рухи экстаз, илһам, күңелгә үҙенән-үҙе килә торған моң, йәғни әҙер әҙәби образдарҙың, әҙер идеяларҙың кинәт ярал ыу ы" - кеүек моменты менән бәйле. Кешенең үҙенән башҡа, дөрөҫөрәге, уның ихтыярынан тыш, тәү ҡарашҡа үҙенән-үҙе аңға килә торған психик хәлде аңлатыу әсән Көнбайыштың айырым ғалимдары (Э.Гартман, З.Фрейд, К.Юнг)[23] "бессознательное" тигән философик категорияны фәнни ҡулланышҡа индерә, һәм философияла, психологияға айырым фәнни йүнәлешкә шулай нигеҙ һалына.

XX быуат аҙағында һәм XXI быуат башында ла кеше мейеһендә барған нейропсихо логик, нейрофизиологик процестарҙы өйрәнеү яңы фәнни-техник ҡаҙаныштар нигеҙендә өр-яңы баҫҡысҡа күтәрелә. Әммә был әлкәлә информация күбәйгән һайын, кеше аңына бәйле серҙәр артҡандан-арта бара. Кеше мейеһен өйрәнеү институтын нигеҙләгән академик Н.П.Бехтерева тап мейе һәм уй бәйләнештәрен хәҙерге көндәге "тайна тайн", "барлыҡ ғаләмдәге иң серле, иң аңлайышһыҙ ҡатмарлы объект" тип атай һәм, ысынлап та, ижад процесының ҡайһы бер моменттарын фәнни нигеҙҙә һаман да аңлатырға мөмкин түгеллеген раҫлай.[24] Шулай итеп, кеше аңының тәбиғәтен әлегә тиклем фәнни нигеҙҙә ышандырырлыҡ дәлилдәр менән тейешенсә аңлатып булмай икән, кешенең "һүҙ оҫталығы" тигән һәләтен асыҡлауҙа ла ниндәйҙер әйтеп-һөйләп аңлата алмаҫлыҡ сер ҡалыуы тәбиғи.

Башҡа берәй эш барышын өйрәнгән кеүек, ҡайһылыр яҙыусының әҫәр ижад итеүен фән ҡушҡанса тикшерергә булдыҡ, ти. Уның өсөн кемдер, яҙыусының эргәһенән китмәйенсә, күпме һүҙ-һөйләм яҙғанына минутлап-сәғәтләп иҫәп алып барһа ла, уның күңелдәге уйҙар даръяһының ағышын бер нисек тә үлсәй-өйрәнә алмай. Ғалимдар дөрөҫөн әйтәлер: "Вопросы о потаенной первичной стадии останутся при этом не вполне, а иногда и совсем неуясненными". Быға асыҡлыҡ индерергә теләһә, бары ижадсы, бары үҙе генә "оҫтаханаһы" менән таныштырып, эш тәжрибәһе менән уртаҡлаша, әҫәрҙәренең яҙылыу нескәлектәре менән бүлешә ала. Теләһә...

Башҡалар ҡатнашлығынан тыш, шаһитһыҙ башҡарыла торған эш икәнлеге, етмәһә, ижадсының үҙенең дә быға әллә ни ризалығы юҡлығы хаҡында яҙған танылған ғалим А.И.Белецкий үҙенең "В мастерской художника слова" тигән хеҙмәтендә. Эйе, ғалим раҫлауынса, әҙәби ижад эшен теоретик күҙлектән ентекле тикшереү ауыр. Ҙур булмаған был мәҡәләһендә А.Белецкий яҙыусының ижадына ҡағылышлы ҡыҙыҡлы күҙәтеүҙәр яһай һәм сюжет һайлау, кешеләр образын һүрәтләү, тәбиғәтте тасуирлау кеүек әҫәр тыуҙырыуҙың айырым моменттарына туҡтала. Шуныһы мөһим: ғалим әҙәби ижадтың үҙенсәлектәрен материалист булараҡ баһалай: "Мы теперь знаем, что литературное творчество не следствие некоего помешательства, и деятельность разумная и целесообразная, как и другие виды умственной деятельности".[26]

Үткән быуаттың егерменсе йылдарында бындай фекерҙең яңғырауы совет әҙәбиәт ғилеменең формалашыуына, һис шикһеҙ, үҙ йоғонтоһон яһамай ҡалмаған.

Совет власының тәүге йылдарынан уҡ әҙәби ижад сфераһы материалистик позицияларға ҡуйыла һәм әҙәби үҫеш партияның асыҡтан-асыҡ етәкселегендә бара. Наҙанлыҡтан арынып, ижадҡа массовый рәүештә яңы көстәр ылыҡтырылыуы, уларҙың күбеһе, Пролеткульт ҡаҙанында ҡайнап, Пролеткульт ойошторған цехтарҙа, түңәрәктәрҙә ижадҡа тотоноуҙары "ижад процесын" сорнаған мистик ореолды юҡҡа сығара. Шулай ҙа яҙылмаған ҡанундар буйынса ижадтың тәүге этабы - илаһи мәле - фәнни тикшеренеүҙәрҙән ситтә ҡала бирә.

Ижадтың үтә нескә, үтә шәхси характерын иҫәпкә алып, әҙәби әҫәрҙең ижад тарихын өйрәнеүҙең фәнни мәктәбен нигеҙләүсе ғалим Н.К.Пиксанов үҙ ваҡытында "яҙыусы үҙе ап-асыҡ итеп белдермәйенсә, ниндәйҙер әҫәргә ҡағылышлы прототиптар, протосюжеттар хаҡында һүҙ булыуы ла мөмкин түгел" тигәнерәк фекер белдергән.[27] Уның

был һүҙҙәре оҙаҡ ҡына ваҡытҡа текстологияла ла, әҫәр анализлағанда ла иҫәпкә алынырға тейешле методологик күрһәтмә төҫөн ала.

Шундай ҡараштар һөҙөмтәһелер - яҙыусылыҡ хеҙмәте хаҡында 1955 йылда донъя күргән ҙур йыйынтыҡ ("О писательском труде")[28] шул осорҙағы күренекле әҙиптәрҙең сығыштарынан, хәтирәләренән, уйланыуҙарынан һәм йәш ижадсыларға төбәлгән кәңәштәренән төҙөлгән. Совет яҙыусылары М.Горькийҙан башлап Серафимович, Н.Погодин, К.Федин, К.Паустовский, Д.Фурманов, К.Симонов, И.Эренбург, А.Твардовский, А.Фадеевҡа тиклем, һүҙ оҫталығы һәм яҙыусы хеҙмәтенең айырым моменттарын асыҡлап, уның даими ауыр эш икәнлегенә баҫым яһай. Алтмышынсы йылдарҙа П.Медведевтың, А.Цейтлиндың, Т.Ермаштың монографиялары[29] баҫылып сыға. Шулай уҡ 80-90-еы йылдарҙа теге йәки был яҙыусының тормош юлына һәм ижадына тәрән байҡау яһалған монографияларҙа[30] был проблемаға ҡағылышлы бик бай мәғлүмәтте табырға була.

Художестволы әҙәбиәттең теоретик нигеҙҙәрен системалы яҡтыртҡан һәм әҙәбиәтсе белгестәр әҙерләүҙә дәреслектәр сифатында тәҡдим ителгән хеҙмәттәрҙә[31] яҙыусының конкрет эшмәкәрлек процестары етерлек дәрәжәлә яҡтыртылмаған. Уларҙың бер төркөмөндә авторҙың фекерләү ҡеүәһе, донъяға ҡарашы кеүек шәхеәнә аң даирәһенә иғтибар күберәк бүленһә, икенселәрендә теге йәки был әҫәрҙең ижади тарихын асыҡлау юҫығында ижадсының тормош: юлына, ижад үҙенсәлектәренә бер аҙ күҙ һалына. Бары Н.А.Гуляев дәреслегендә генә ижад тап процесс күҙлегенән бер ни тиклем яҡтыртыла. Шартлы ғына бүленепг икәнлегенә иҫкәрмә яһап, ғалим ижади процестың айырым фазаларын йәки этаптарын һанап үтә: "замысел, создание плана, написание произведения, его отделка".[32] Дөйөмләштереп әйтһәк, әҙәби ижадты өйрәнеүҙә, ҡапма-ҡаршы уҡ булмаһа ла, ике төрлө ҡараш ныҡынған. Ғалим И. Ф. Волков раҫлауынса, берәүҙәр ижадтың тәүсығанаҡтарын эҙләп төпсөнһә, икенселәр төп тикшереү объекты тип ижадтың емешен - әҙәби әҫәрҙе ала, һөҙөмтәлә барыһы ла "мало занимаются процессом сотворения художественного произведения и текстом в его собственной художественной значимости".[33]

Башҡорт әҙәбиәте ғилемендә яҙыусылыҡҡа ҡағылышлы мәсьәләләр, әйтергә кәрәк, әҙәбиәттең үҙенән айырып ҡаралманы. Э.Харисовтың урта мәктәптәр өсөн дәреслек сифатында яҙылған 1944 йылда баҫылып сыҡҡан "Әҙәбиәт теорияһы"нда яҙыусылыҡ эше башлыса тормош: материалдарын һайлай белеүгә ҡайтып ҡала: "ул тормоштоң үҙен ҡыҙыҡһын-дырған яҡтарын, айырым күренештәрҙе, деталдәрҙе күҙәтә, тормош "ваҡлыҡтарына" художник иғтибарлығы менән яҡын килә... уларҙы, ысынбарлыҡтағы индивидуаль формаларын, үҙенсәлекле сифаттарын һаҡлап, бергә йыя, дөйөмләштерә-образландыра".

Алтмышынсы йылдарҙағы совет әҙәбиәт ғилеме ҡаҙаныш-тары нигеҙендә яҙылған "Әҙәбиәт теорияһы"нда күренекле ғалим К.Әхмәтйәнов яҙыусы эшмәкәрлегенең айырым яҡтарына туҡтала. Уныңса, "тормоштоң күп һанлы күренештәре араһынан кешенең хисен уятырҙай һәм аҡылын камиллаштырырҙай" яҡтарҙы ғына һайларға, уларҙы төп идеяға яраҡлаштырып үҙгәртергә, "шымартырға" булдыра алғандарҙы ғына, йәғни ижад хыялына эйә булғандарҙы ғына, яҙыусы тип иҫәпләргә мөмкин". Ижади хыялды К. Әхмәтйәнов һәр төрлө ижади процестың тәүшарты итеп тә, әҙәбиәттең иң мөһим элементы тип тә билдәләй. Ғалим шул уҡ ваҡытта ижади хыялды әҫәр яҙыу алдынан һуҙыла торған яҙыусының хәл торошо рәүешендә ҡарай: "ижади хыял ваҡытында яҙыусы үҙе һайлаған тормош күренештәрен үҙенсә үҙгәртә, уларҙы тағы ла "ысынайтыу" менән мәшғүл була."[36]

Ашаған белмәй, тураған белә, ти халыҡ мәҡәле. Үҙе генә кисергән, үҙе генә белгән ижад мәлдәрен әҙиптең үҙенән башҡа кем яҡшыраҡ яҡтырта алһын? Ошо йәһәттән академик Ғ. Хөсәйеновтың 1995 йылда донъя күргән "Ижад серҙәре" тигән айырым парсаларҙан һәм өҙөктәрҙән ҡоролған китабы бик отошло. Ғалим булараҡ ул, оҙайлы йылдар буйы башҡа әҙиптәр, шағирҙар менән яҡындан аралашып, күптәрҙең ижадтарын һәм тормош юлдарын ентекле өйрәнеү, донъя әҙәбиәте буйынса фәнни хеҙмәттәр менән танышыу барышында бай мәғлүмәт туплаған. Бүтәндәрҙең эш алымдарын күҙаллау өҫтөнә, танылған яҙыусы булараҡ, үҙенең шәхси эш тәжрибәһенә таяныу, автор үҙе әйткәнсә, яҙыусы хеҙмәтенең бөтә

нескәлектәрен иҫәпкә алырға һәм системалаштырырға мөмкинлек биргән. Ғ.Хөсәйенов яҙыусылыҡҡа тәбиғәт тарафынан бирелгән рухи һәләт тип ҡарай һәм уны "бүтәндәргә ҡарағанда донъяны киңерәк һәм зирәгерәк күрә алыу, нәмәләрҙең айышына нескәрәк төшөнөү, көслөрәк кисереү, киң хыял итә белеү, күҙаллау... һәм шуларҙы ҙур оҫталыҡ менән йәнле һәм йәмле итеп тасуирлап биреү образлы фекерләү ҡеүәһе" тип асыҡлап китә. [7] Әҙәби ижад эшен оҙон-оҙаҡ дауам итә торған ҡатмарлы күренеш: булараҡ билдәләп, ғалим уны бер нисә этапҡа бүлә.[38]

**Тәүге этап** - яҙырға уй-ниәт тыуыуы, яҙыласаҡ әҫәрҙең идея-темаһы ойошоу, хәтерҙәгене һәм зиһендәгене барлау.

**Икенсе этап** — материал туплау, төрлө сығанаҡтарҙы өйрәнеү, план-схема төҙөп ҡарау, герой-характерҙар хаҡында уйланыу, эскиз, этюд яҙып ҡарау, тонер, сюжет-композиция элементтарын уйлау.

**Өсөнсө этап** - яҙа башлау, яҙыу процесы. Ижадтың иң оҙайлы, иң көсөргәнешле сағы - текстың варианттарын һайлау, аҡҡа күсереү, баҫтырырға әҙерләү һ.б.

Яҙыусының психофизиологик хәләтенә ҡарап, ғалим художестволы текст ижад итеүҙең өс фазаһын[39] айырып күрһәтә. Беренсе һәм икенсе этаптарҙы әҫәр яҙырға әҙерләнеү тип атаһа, өсөнсө этап **өлгөрөү** мәле булып сыға. Яҙыусыға хас рухи-психологик моменттарҙың береһе - тамамлау фазаһы - әҫәр яҙылып бөткәс башлана, тип өйрәтә Ғ.Хөсәйенов.

Әҙиптәр тормошонан ул килтергән байтаҡ миҫалдарҙан күренеүенсә, һәр ижадсы тамамланған әҫәре менән үҙенсә "хушлаша" икән. Кем яҙып бөтә лә онота, кем яңынан-яңы төҙәтмәләр индерә, ҡайһылар, хатта китап булып баҫылғас та, текст өҫтөндә эшләүен ташламай.

Тәжрибәле белгес һәм бер үк ваҡытта оҫта яҙыусы Ғ.Хөсәйенов ижади процесс ағышын бары схематик, йәғни шартлы рәүештә генә үрҙәгесә бүлгеләргә була, тип иҫкәртеүҙе урынлы һанай, сөнки ижад - үтә шәхси эш. Ғалим уны хатта "интим процесс... һөйөшөү шикелле, яҙышыу ҙа аулаҡты ярата"[40] тип образлы сағыштыра. Һәр яҙыусының үҙ ижад манераһы бар һәм ул, ғалим фекеренсә, "һаҡһыҙ ҡағылыуҙы, анализ-тикшеренеү тип ботарлап барыуҙы, шаран-яранлыҡты бик иш итмәй." Тап ошо "һаҡһыҙ, әрһеҙ ботарлауҙары мөмкин" тигән мотив нигеҙендә әҙиптәр тәнҡитсене лә, ғөмүмән, белгесте лә ижад лабораторияһына индермәүҙе хуп күрә. "Яҙыусылар үҙҙәре лә ижад серҙәре менән бүлешеүҙе, үҙҙәренә генә мәғлүм яҡын уй-тойғоларын, рухи хәләттәрен асып барырға ашыҡмай,"[41] - тип раҫлай ғалим.

Бәлки, ижад процесын бөтөнләй өйрәнмәҫкә кәрәктер? Яҙыусының күпмерәк һәм ҡасаныраҡ, ҡайһылайтып яҙышыуында кемдең нindәй эше бар? Уйлап китһәң, массовый уҡыусы өсөн теге йәки был әҫәрҙең нисегерәк яҙы лыу ы түгел, ә уның булыуы һәм күңелгә ятыуы ҡиммәт бит.

## Әҙәби ижад технологияһы кәрәкме?

Куңғы осорҙа - фәнни-техник революция 'касафатылыр - аулаҡта үҙе генә бикләнеп ижадҡа сумған яҙыусы образы юйыла башланы. Фәнни ҡаҙаныштар көндәлек тормошҡа гөрләп ингән Көнбайышта ғына түгел, йәшерәк быуын башҡорт оҙиптәре арҡаһында ла ижад итеү йәки яҙыу технологияһын булдырыу һәм әҙәби процесҡа индереү хаҡында фекерҙәр ишетелә башланы. Әйтергә кәрәк, технология әллә ни яңы һүҙ түгел, ул башлыса материаль байлыҡтар етештереүгә ҡарата әйтелә. Мәҫәлән, "Жигули" еңел машиналарын эшләү тулы технологик процестан ғибәрәт. Образлы әйткәндә, конвейер буйлап, шөрөптән башлап үҙ йөрөшө менән магазинға оҙатырлыҡ дәрәжәгә еткереү, ғәмәлдә, бер-бер артлы, эҙмә-эҙлекле, өҙлөкһөҙ дауам иткән - шөрөп-гайка бороу, нығытыу, көйләү, буяу, ҡоршау һәм башҡа шуның ише - тиҫтәләрсә эш операцияларынан тора. Шуныһы: бөтөн технологик циклда бер генә кеше лә, йә иһә һәр бер операцияла берәр-берәр эшсе лә тир түгергә мөмкин. Айырым
продукцияларҙы етештереү ана шулай уйланылған- көйләнелгән, меңдәрсә тапҡыр ҡабатлана алған эш операцияларына нигеҙләнеүе уларҙы автомат -станоктар, роботтар менән алыштырырға мөмкинлек бирә.

Художестволы текст ижад итеүҙе технологик процесс итеп яйға, ағымға һалып

буламы? Әгәр ҙә була, тибеҙ икән, ижад процесының бөтә технологик процедураларын фәнни өйрәнергә һәм аныҡ методикаһын эшләп, шуның нигеҙендә ентекле инструкция төҙөргә кәрәк була. Аҙаҡтан теләүселәрҙе методика буйынса уҡытырға, инструкцияларға таянып, оҫтарғансы күнекмәләр үткәрергә ҡала.

Шундай "оҫтахана"лар тарихта булған, һәм был хаҡта А.И.Белецкий үҙенең алда телгә алынған хеҙмәтендә бик ҡыҙыҡлы миҫал килтерә.

*В 1666 году некий Ришесурс в Париже, на площади Дофина, открыл бюро, где давались литературные консулътации и уроки хорошего стиля: директор бюро, саж написавший до 20 томов, обучал любителей в краткий срок есем трюкам писателъского ремесла; он преподавал искусство плагиата, искусство рабского перенимания и перенесения, искусство усвоения ходячих формул: он давал возможность сделатъся писателем и прекрасным оратором "без гения, бех труда, без заботы".*[42]

Тарихтан мәғлүм булыуынса, совет власының тәүге йылдарында уҡ "пролетариат культураһын тыуҙырыу" лозунгыһы аҫтында Пролеткульт ойошмалары төҙөлә. Улар етәкселегендә Мәскәүҙә һәм күп кенә төбәктәрҙә ижадҡа өйрәтеү түңәрәктәре, цехтар, мастерскойҙар ишәйеп китә. Пролеткульт йоғонтоһо Башҡортостанға, әлбиттә, килеп етмәгән. Ә шулай ҙа Февраль революцияһы килтергән азатлыҡ елдәре һәм милли үҙаңдың уяныуы һөҙөмтәһе булараҡ Каруанһарайҙа тыуған "Тулҡын" ойошмаһы ла башҡорт йәштәрен берләштергән ҙур ижад мәктәбе була. Уның ағзаларының күбеһе, мәҫәлән, Ш.Бабичты гына алайыҡ, художестволы текст ижадсыһы ғына түгел, оҫта декламатор, сәхнә артисы, музыкант, йырсы, бейеүсе, сәсән-импровизатор, ялҡынлы оратор-пгитатор, сәйәсмән, ғалим, етмәһә, ойоштороусы, режиссер кеүек ғәжәйеп күп яҡлы эшмәкәрҙәр булып сығыш яһай. Шул "Тулҡын"дың шауҡымлы тулҡындары һуңғараҡ Каруанһарай педтехникумы типтәренә лә тәьҫир итә. Башҡорт әҙәбиәтенең алтын фондын барлыҡҡа килтергән З.Биишева, Б.Бикбай, (-.Агиш, Ғ.Хәйри, Б.Вәлид һәм башҡаларҙың Каруанһарай йәштәре булып үҫеп сығыуы бер ҙә осраҡлы хәл түгел.

Әҙәби текст ижад итеү технологияһы мәсьәләһенә кире ҡайтайыҡ. Хәҙерге әҙәбиәт донъяһында юҡ-юҡ та ҺЫЛ хаҡта һүҙ сыҡҡылай. Мәҫәлән, "Рухи ҡиммәт һулараҡ бөгөнгө башҡорт әҙәбиәте" тигән темаға "Аҙна" пкште редакцияһы ойошторған "түңәрәк өҫтәл"дә, тил анттар булыуға ҡарамаҫтан, кеше уҡырлыҡ яҡшы пҫорҙорҙең һуңғы осорҙа әҙ яҙылыуы хаҡында әйтелә. Пыпьщ сәбәбе, һөйләшеүҙә ҡатнашыусы әҙиптәр фекеренсә, яҙыу технологияһы, йәғни әҫәр яҙыу техникаһы етешмәүҙә, шунһыҙ ипманса әҙәбиәт индустрияһын ҡороу-көйләү икеле. Ә әҙәбиәт индустрияһы нисек булырға тейеш һуң?

Танылған драматург Н.Ғәйетбай быга ҡыҙыҡлы миҫал килтерә: *Фракцияла беҙҙең копдәрҙә бер ҡалала халыҡ фенол менән ағыулана. Иртәнсәк шундай хәбәр тарала. Ә кисен театрға Эжен Скриб тигән драматургтың ошо хаҡта спектакле ҡуйыла. Ярты көн эсендә сценарий яҙыла: яҙыусы уҙе пьесаның һөлдәһен яҙа, икенсе берәү диалогтар тоҙой, өсөнсө кеше монолог әҙерләй һ.б. Спектакль кискә әҙер булһын өсөн драматургка 70 кеше эшләшә, Бына шулай була инде әҙәбиәт индустрияһы?'**

Ғәмәлдә һүҙ драма әҫәрен яҙыу һәм сәхнәләштереү процесы хаҡында барһа ла, уның тәүге атаһын драма тексын ижад итеүҙе ярайһы уҡ теүәл төҫмөрләргә була. Яҙыусы, йәғни төп автор, идея бирә, сюжет композиция ҡора. Шуны (әҫәрҙең, Һөлдәһен) ул ҡағыҙға төшөргән бер үк ваҡытта икенсе кешеләр, үҙ ара бүлеш:еп, диалог-монологтар төҙөй, артистар шунда уҡ иҫтәренә һалып, репетиция яһай һ.б. Күренеүенсә, һүҙ бер драматург әҫәре тураһында барһа ла, уны индивидуаль ижад тип әйтергә тел бармай. Был коллектив хеҙмәт, тотош фирма ҡабарған эшмәкәрлек, тик вывескаһына күберәк көс һалған, идея биргән, шуға таянып, проект төҙөгән автор исеме сығарылған. Көнбайыштағы авторҙар араһында, матбуғатта яҙылғанынса, йөҙәрләп роман яҙғандар тимәк, улар үрҙәгесә әүҙем технологик ысулга эйә булғандар һәм текст яҙыу эшен технологик процесҡа ҡорғандар, тип уйларға урын бар һымаҡ. Ундай авторҙарҙың үҙ ижади ҡалыптары, үҙ технологияһы ойоша, мәҫәлән, атаҡлы инглиз яҙыусыһы А.Кристиҙың күпселек әҫәрҙәре, детектин жанрында булып, билдәле бер сюжет ағышына һәм композицион алымға ҡоролған. Сикләнгән араууҡта (именье йә ҡунаҡ йорто) ниндәйҙер сәбәп менән туғандар-дуҫтар йыйыла һәм уйламағанда араларынан берәү үлә. Барыһының да тегене юҡ итергә үҙ сәбәптәре лә бар кеүек, тик тәфтишсе ентекле тикшереү һөҙөмтәһендә бөтөнләй уйла-маған кешенең ғәйепле

икәнлеген асыҡлай.

Шулай ҙа коллектив ижад һөҙөмтәһендә тыуған әҙәби текстарҙың художество ҡимммәттәре хаҡында һүҙ йөрөтәүе нисектер ситен. Ваҡытында көн ҡаҙағына һуғып, йәмәғәтселек фекерен бер аҙ ҡуҙғытҡан хәлдә лә, уларҙың быуындарҙан-быуындарға ҡәҙерләп тапшырылыр рухи аманатҡа әйләнеүе нисектер шикләндерә.

Әҫәр яҙыу технологияһы тигәндә, асылда "хоҙай биргән талант, илаһиҙан ебәрелгән һәләт, тәбиғәттән яралмыш осҡон" тигән факторҙарҙың серлелеге юҡҡа сыҡҡандай һәм ижадты бары теләк, ихтыяр, егәрлелек, ныҡышмалылыҡ, сәмлелек һөҙөмтәһендә формалашҡан һәнәргә, матди байлыҡ туплау маҡсаты менән башҡарылған кәсепкә ҡайтарып ҡалдырғандай. Шул уҡ ваҡытта яҙыусылыҡты профессиональ кимәлгә күтәреү кәрәклеген, художестволы текст яҙыуҙы технологик процесс һымаҡ көйләү зарурлығын да инҡар итеп булмай. Халыҡ-ара информацион процестарҙың үтә тығыҙайыуы арҡаһында соци-аль-иҡтисади һәм мәҙәни-этнокультур әлкәлә донъя кимәлендә глобализация процестары көсәйә бара.

Йәшәйештең бигерәк тиҙ үҙгәреп-алмашынып торған шарттарында һәр эште, шул иҫәптән әҙәби текстар ижад итеүҙе лә, үҙ мәлендә, һуңлатмай, сағыштырмаса ҡыҫҡа ваҡыт эсендә башҡарыу заман талабы булып яңғырай. Халыҡ шағиры Р.Ғарипов был хәҡиҡәтте әллә ҡасан уҡ ап-асыҡ итеп яҙған:

*Ирлек булһын шағирлыҡта.*
*Шағирлыҡта ирлек булмаһа,*
*Ни мәғәнә дөрөҫ һүҙ әйтеүҙән,*
*Дөрөҫ һүҙең инде һуңлаһа?***

Заман менән бергә атлау, халыҡ менән бергә булыу, уның тарафынан үҙ ителеү, халыҡ араһында танылыу, тәбиги, һәр әҙиптең мөҡәддәс хыялы ул. Бының әсән ижади уяулыҡ - яңылыҡты шунда уҡ эләктереп алып, йәһәт кенә әҙәби һүҙ әйтеү, лозунгылар ташлау ғына етмәй. Үткән быуаттың егерменсе-утыҙынсы йылдарындағы шаулы кампаниялар айҡанлы яҙылған бихисап агитплакат әҫәрҙәре, саҡырыу-өндәүҙәргә ҡоролған яңғырауыҡлы шиғырҙарҙың күбеһе берәр көнлок кенә була. Э бит улар ҙа технология яғынан ярайһы уҡ камил, әҙәби форма талаптарына яуап бирә. Яҙыу технологияһы тигәндә, беҙҙеңсә, иң тәүҙә профессиональ оҫталыҡ, урыҫтар әйтмешләй, "профессионал н своем *целе"* булыуҙы күҙ уңында тоторға кәрәк.

## III бүлек

## Әҫәр яҙыуҙың этаптары. Ижади уйлаиммш

Билдәле, яҙыусыларҙың һәр ҡайһыһы үҙемә нисек ҡулай, нисек булдыра ала, шулай ижад итә. Был .эштең мотлаҡ үтәлергә тейешле дөйөм ҡағиҙәләре, мотлаҡ ҡулланыуҙы талап иткән әҙер рецепттары юҡ. Тик барыбер ҙә ижад эше, ғөмүмән, ниндәй гепо маҡсаттарҙан сығып башҡарылмаһын, һәр эшмәкәрлек иң тәүҙә билдәле бер ваҡыт һуҙымында дауам итә торған процесс итеп ҡарала.

Художестволы әҫәр тыуҙырыуҙы проңесг игеп ҡараһаҡ, уның эҙмә-эҙлекле ике этаптан тороуы асыҡлана: *а) текст яҙыуға әҙерлек барышы h,км 6) яҙыу процесы.* Тәүгеһе уның башлыса ап, кимәлендә бара. Уны ижади уйланмыш (творчегкип ламыеел) осоро тип тә атап була.

Теге йәки был әҙәби текст ижад итеүгә әҙерлек осоронда яҙыусының күңелен һәм аңын биләп алған уй-фекер эшмәкәрлегенең бөтә нескәлектәрен яҡшыраҡ аңлау әсән һәр кемгә лә таныш эшкә күҙ һалайыҡ...

Төҙөүселәрҙең ҡатлы-ҡатлы бейек йорт төҙөгәнен һәр кемдең әҙ генә булһа ла күҙәткәне барҙыр. Кирбес артынан кирбес өйөлә... Уларҙы нисек һәм күпме һалырға, ҡайҙа тәҙрә уйырға, ҡайҙа ишек ҡалдырырға, ҡайҙа стена һуҙырға - барыһы ла алдан уйланылған проект буйынса башҡарыла. Проект, кемдеңдер заказы буйынса һыҙылып, йорттоң нимәгә тәғәйенләнгәнен иҫәпкә ала, шуға ла тейешле материалдарҙы һайлау, уларҙы һәр береһенә тоташтырыу, йәбештереү, эш алымдарын билдәләү кеүек мәсьәләләр ҙа проектта уҡ самалана. Проектты һыҙыу барышында архитектор башҡа архитектур үрнәктәрҙе лә күҙ уңында тота, төҙөлөш практикаһын да иҫенән сығармай.

Яҙыусы эшмәкәрлеге лә, бер ҡараһаң, архитекторҙыҡына ифрат оҡшаш. Тик шуныһы: проекттың авторы ла, шул проект буйынса төҙөүсеһе лә - автор үҙе. Әҙәби проект тигәндәй, Көнбайыш илдәрендә йыш ҡына нәшерҙәр тарафынан теге йәки был йөкмәткеле әҫәр яҙыуға алдан заказ бирелеүе мәғлүм. Э совет яҙыусыларына заказ партия исеменән еткерелде. Совет осоронда ҡайһы бер ҡәләм оҫталары, завод-фабрикаларға, колхоз-совхоздарға, шаулы төҙөлөштәргә оҙайлы ижади командировкаларға ебәрелеп, конкрет әҫәрҙәр яҙырға бурыс һәм йүнәлеш алды. Шулай ҙа әҙиптәрҙең күбеһенә теге йәки был әҫәрен яҙыуға "социаль заказды" унең үҙ йөрәге ҡуша.

Архитектур проекттан айырмалы рәүештә, әҙәби әҫәр "проекты", яҙыусыларҙың үҙҙәре раҫлауынса, әллә нисәмә вариантта ҡорола. Уны ҡорғанда бүтән әҙәби өлгөләрҙе - уларҙы ҡабатламаҫ әсән! - күҙ уңында тоторға кәрәк. Әммә һәр яңы әҙәби "проект" буш ерҙә тыумай, уны ижад итеү мәлендә ниндәйҙер йоғонто яһаған, хатта яҙыласаҡ әҫәргә нигеҙ булып хеҙмәт иткән сығанаҡтар була.

## Әҙәби проект сығанаҡтары

Характерына ҡарап, тыуасаҡ әҫәрҙәрҙең яҙмышына һәм булмышына йоғонто яһаған сығанаҡтарҙы өҫкә төркөмләргә була.

1. Тәүгеләрҙән йыш ҡына **"тормош материалы"** тип атайҙар. Яҙыусы үҙе күреп белгән кешеләр тормошо, күңелен тетрәндергән хәл-ваҡиғалар, аяныслы һәм ғибрәтле яҙмыштар, халыҡтың үткән героик тарихы, күренекле шәхестәрҙең һәм үҙ тормошондағы эпизодтар, башҡа тарихи факттар, ҡыҫҡаһы, кешеләр йәшәйешенең айырым биттәре яҙыласаҡ әҫәргә материал ролен үтәй. Ғ.Ибраһимовтың "Кинйә", Б.Рафиҡовтың "Ҡараһаҡал", Ғ.Хөсәйеновтың "Ҡанлы илле биш", Р.Байымов-тың "Сыбар шонҡар", Я.Хамматовтың "Салауат", "Һырдаръя", "Ҡара яу", Ә.Хәкимовтың "Думбыра сыңы", Н.Мусиндың "Шунда ята батыр һөйәге" кеүек тарихи, тарихи-хроника, тарихи-документаль романдарҙың, Ғ.Шафиҡовтың "Шомдоң һуңғы балҡышы", Р.Солтангәрәевтың "Осто боркот" ише повестарҙың, М.Кәримдең "Оҙон-оҙаҡ баласаҡ" һымаҡ автобиографик әҫәрҙәрҙең, Н.Асанбаевтыц "Ҡыҙыл паша"һы шикелле драмаларҙың реаль ерлеге асыҡтан-асыҡ күренеп тора. Ошо уҡ рәткә күпмелер һәм нисектер үҙгәртелгән, әммә ысынбарлыҡ менән бәйләнеше бәхәсһеҙ билдәле булған әҫәрҙәрҙе, мәҫәлән, И.Насыриҙың "Күҙәй" (төп герой Ғимай Басыровтың прототибы - яҙыусы үҙе Имай Насыри) романын, С.Агиштың "Фәтхи һалдат" (төп геройҙың прототибы -большевик, репрессия ҡорбаны Фәтхи Әхмәҙуллин) хикәйәһен индерә алабыҙ.

Тарихи әҫәрҙәрҙең байтағы ниндәйҙер документҡа теркәлеп ҡалған берәй фактҡа, йә хәтирә- иҫтәлектәрҙән мәғлүм булған күренешкә "ит үрҙереү", уны художестволы реконструкциялау һөҙөмтәһендә ижад ителә. Мәҫәлән, тарихи сығанаҡтар аша 1235 йылда Көньяҡ Уралға венгр короленең ҡушыуы буйынса монах Юлиандың килеүе билдәле. Б.Рафиҡовтың "Ахырызаман көткәндә" романының нигеҙенә шул факт һалынған. Яҙыусы, Юлиандың башҡорттар араһында йөрөүе хаҡындағы юлъяҙмаларына таянып, шул ваҡытта булыуы мөмкин булған хәл-ваҡиғаларҙы күҙ алдына килтереп, шаҡтай мажаралы сюжет ҡорған. Көндәлек тормоштағы ниндәйҙер хәл-ваҡиға, матбуғаттағы информация, кемдер әйткән һүҙ һәм башҡа күп төрлө факторҙар теге йәки был әҫәр яҙыуға этәргес ролен уйнарға мөмкин, мәҫәлән, 1937 йылғы сәйәси репрессиялар шаһиты Ҡ.Аҙнабаевтың иҫтәлектәре М.Иҙелбаевтың "Ҡыҙыл ҡарҙар" исемле әҫәренең нигеҙенә ятҡан. Ә бына, Р.Бикбаев үҙе яҙыуынса, бер шиғриәт байрамында тапшырылған хат "Халҡыма хат" поэмаһы ижад ителеүгә төп сәбәпсе була.

Ҡайһы ғына әҫәрҙе алһаҡ та, уларҙы ижад итә башлауҙың тәүшарттары яҙыусы йәшәгән осорҙан һәм ул йәшәгән мөхиттән айырылғыһыҙ икәнлеге күренә. Хәҙерге ысынбарлыҡтан әҙәби фекергә үҙенсәлекле тәьҫир яһаған күп миҫалдар килтерергә мөмкин. Дөйөм цивилизацияға билдәле мәғлүмәттәр, мәҫәлән, космик караптарҙа кешеләрҙең йыһанға осоуы, һәр милли әҙәбиәткә берҙәй хеҙмәт итә ала. Икенсе төрлө әйткәндә, бер үк фәнни-теоретик идеялар, айырым гипотезалар, фән һәм техника ҡаҙаныштары, дини һәм һуңғы осорҙа популярлашып киткән изотерик тәғлимәттәрҙәге фекерҙәр нигеҙендә һәр автор

үҙенсә сюжет һәм композиция формаларын тыуҙырырға һәләтле. Улар ҙа, кешелек аҡылы тыуҙырған бөгөнгө ысынбарлыҡ күренеш-тәре булараҡ, һәр ижади эшмәкәрлеккә шаҡтай йоғонто яһап, ниндәйҙер әҫәрҙе яҙыуға тәүэтәргес хеҙмәтен үтәй. Мәҫәлән, Н.Ғәйетбаевтың "Ҡара ҡумта" әҫәре - Көнбайышта йөҙҙәрсә китаптарҙа һәм видеотаҫмаларҙа һүрәтләнгән, сираттағы "йыһан мажараһы", тик уларҙан айырмалы рәүештә унын сюжеты башҡорт ерлеге менән бәйле. Йә иһә икенсе миҫал. Кешенең лептон йәки эфир хәлендәге информацион күсермәһе булыу ихтималлығы хаҡындағы фараздар хәҙерге традицион булмаған дауалау ҡулланмаларында, бүтән баҫмаларҙа фәнни иҫбатланған хәҡиҡәт рәүешендә популярлаштырыла. Бөгөнгө көндә улар һәр кемгә лә тиерлек мәғлүм. Быға ҡоролған сюжеттар Көнбайыштың кино баҙарында күпләп етештерелә, шуларҙың ҡайһы берҙәре, мәҫәлән, танылған бер американлы режиссерҙың "Привидение" видеотаҫмаһы беҙҙең үҙәк экрандарҙа туҡһанынсы йылдарҙа уңыш менән барҙы. Ундағы геройҙың "күсермәһе" Ф.Исхаҡованың "Кешекүсермә" романындағы төп герой "күсермә"генә ифрат оҡшаш. Һуңғыһының милли мөхиттә һәм киң социаль бәйләнештәр фонында һүрәтләнеүе һәм геройҙарҙың милли характер сифаттары менән сорналыуы әҫәрҙең уңышын тәьмин иткән.

Дөйөмләштереп әйткәндә, ниндәйҙер әҙәби "проект" өсөн материал, тормоштоң үҙе шикелле төрләнеп һәм даими яңырып тора. Һәр яҙыусы шул тормош: материалынан үҙенсә илһам ала, ижади файҙалана.

2. Яҙыусы әҙәби проект өсөн файҙаланған материалдың икенсе төрө художестволы әҙәбиәттең үҙенә бәйле. Күп кенә әҫәрҙәрҙә быҒаса билдәле булған әҙәби материалдан алынған өҙөктәр, һылтанмалар, айырым образдар осрай. Мәҫәлән, Р.Бикбайҙың "Һыуһаным - һыуҙар бирегеҙ" поэмаһында боронғо китаптарҙың исеме һаналып үтә - заманалар ағышы күҙаллана:

Дини хөрәфәттәр араһында
"Йософ вә Зөләйха"ны,
"Ҡотадғу белек"те...
Белекһеҙҙәр тиҙәк араһына ырғытты.. ,[45]

Үҙе хеҙмәт иткән милли әҙәбиәттең йә булмаһа бүтән әҙәбиәттәрҙең теге йәки был фактына күпмелер дәрәжәлә мөрәжәғәт итеү фәндә реминисценция тигән төшөнсә менән йөрөтөлә башланы. Латин телендәге был һүҙ "нимәнелер хәтерләтеү, нимәнелер иҫкә төшөрөү" тигәнде аңлатып, һүҙлектәрҙә башлыса музыка әлкәһенә ҡағылышлы термин булараҡ бирелә.[46] "Бер көй икенсе билдәле көйҙө хәтерләтә, бер музыкаль әҫәрҙә бүтән бер таныш: музыка ишетелгән кеүек" мәғәнәһендә ҡулланылғанлыҡтан, музыкаға ҡағылышлы реминисценцияны башҡортсалап "музыкаль шаңдаҡ" тип тә тәржемәләргә булыр ине.

Байтаҡ ҡына әҙәби әҫәрҙәрҙә шундай уҡ "шаңдаҡ, әҙәби шаңдаҡ" тойомлана. Әҙәби реминисценцияны, башҡортсалап әйткәндә, "әҙәби алынма" тип тә атап була. Асыҡлап китәйек: ҡайһылыр художестволы тексттың бер өҙөгөн, йә иһә персонажын, йә сюжет-композиция үҙенсәлектәрен генә түгел, теге йәки был яҙыусының тормошона һәм шәхесенә ҡағылышлы факттарҙы, ғөмүмән, әҙәби процестың теләһә ҡайһы моменттарын файҙаланыу ҙа реминисценция күренеше инә. Улар теге йәки был әҫәрҙе уҡыған саҡта әҙәби фекерҙе, әҙәби процесты иҫкә төшөрә һәм тейешле образ тыуҙырыуға булышлыҡ итә.

Таныш факттар, таныш образдар, таныш мотивтар, әлбиттә, һуңынан ижад ителгән тексты аңлауҙы еңелләштерә, уҡыусы аңында таныш ассоциациялар тыуҙыра. Әммә ысын яҙыусы башҡалар тарафынан яҙылған әҙәби материал менән артыҡ мауыҡмаҫҡа, үҙ фантазияһын эшкә егергә тейеш: ни тиһәң дә "әҙер әҫәрҙәр" - башҡаларҙың ижад емеше. Шуларҙы к үҙ уңында тотоп та ҡайһы бер ғалимдар, мәҫәлән, В.Е.Хализев әҙәби реминисценцияларҙы -**"авторҙыҡы булмаған (неавторский) текст,** йә булмаһа **"әҙәбиәттәге әҙәбиәт"** тип атай.

Лингвистикала, ғөмүмән, бүтән сығанаҡтарҙан алынған текст фрагменттары, айырым тотороҡло һүҙбәйләнештәр аллюзия (латинса - "ымлау, ишаралау, төрттөрөп йә ситләтеп әйтеү" мәғәнәһендә) тип тә нарыҡлана. Әгәр ҙә аллюзияның бөтә төр алынмаларға ҡарата әйтелгәнен, йәғни киң мәғәнәлә ҡулланылғанын, иҫәпкә алһаҡ, әҙәби сығанаҡтарҙан алынған

өлөшө "реминисценция" булып сыға.

Баштан уҡ асыҡларға кәрәк: дөйөм алғанда, реминисценцияларҙы икегә төркөмләргә була. Бәғзе авторҙар, асыҡтан-асыҡ атап, күрһәтеп файҙаланғандарын - "**асыҡ** (явная) реминисценция", ә ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында асыҡлап тороу кәрәкле һаналмаған һәм шуға ла атап күрһәтелмәгәндәрен "**аҫтыртын йәки йәшерен (неявная) реминисценция**" тип айырырға мөмкин.

**Асыҡ** реминисценция өлгөләрен башҡорт әҙәбиәтендә күп-ләп осратырға була. Кибәтулла Ҡарғалы үҙенең "Мәжмәғ әл-әдәб" әҫәрендә бөйөк Фирдәүсине лә, атаҡлы Румиҙы ла йыш телгә ала. Унан саҡ ҡына алдараҡ ижад иткән Тажетдин Ялсығол үҙенең "Рисәләи Ғәзизә" китабының инеш бүлегендә үк ҡыҙының һорауы буйынса Аллаяр суфыйҙың "Ҫөбәт әл-ғажизин" әҫәрен шәрехләүен белдерә. Ғөмүмән, урта быуаттарҙағы Көнсығыш: әҙәбиәттәре өлгөләрендә башлыса реминисценцияның бары асыҡ формаһы ғына урын алғандыр тиергә була. Хатта ошо рәүештә әҙәби алынмаларға нигеҙләнгән айырым жанр нәзирә урта быуаттар әҙәбиәтендә киң тарала. Бынан тыш традицион биш сюжетҡа ҡоролған поэмалар циклы -хәмсә жанры барлыҡҡа килә һәм әзербайжан, үзбәк, фарсы-тажик әҙәбиәттәренең атаҡлы вәкилдәре - аҡыл эйәләре Низами, Науаи, Дәхләүи, Жами кеүек шағирҙарҙың ижадында лайыҡлы урынды биләй. Көнсығыш традицияларында өлгөрөп еткән башҡорт әҙиптәре үткән быуаттың егерменсе йылдарына хәтле үҙҙәренең әҫәрҙәрендә, ҡайһы һүҙ оҫтаһының ниндәй әҫәренән нимә генә алынмаһын, шуларҙы асыҡтан-асыҡ атап китеүҙе, һылтаныуҙы иң элек үҙҙәре өсөн мәртәбә һанаған. Мәҫәлән, Ш.Бабичтың шиғырҙарында кемдән һәм ҡайҙан үрнәк алғаны, нимәне файҙаланғаны асыҡтан-асыҡ күрһәтелә. Уның "Шәмсетдин суфый ауыҙынан" тигән әҫәрендә Ш.Зәкиҙең "Булғай-булмағай" тигән популяр әҫәренең ҡалыбы, хатта рифмалары ла сатира тыуҙырыу маҡсатында ҡабатланған. Мәшһүр "Китабеннас" әҫәрен яҙыуға этәргес биргән бер китап "Фатиха" бүлегендә ентекләп тасуирлана:

*Аҡтарып, таптым китап араһынан бер китап,*
*Һәр ауыл, һәр тирмәгә, һәр кемгә мәғлүм ул китап...*
*Был китап ҡуҙғатты миндә көслө тәҡлид шөһрәтен,*
*Һалды сихри шәүжәтен, нәҡ йәнде тарткыс бер ҡатын...*[47]

Хәҙерге әҙәбиәттә асыҡ әҙәби алынмаларҙың төрлө формалары осрай.

**Цитата** - асыҡ реминисценцияларҙың иң таралған төрө.

Уларҙы барлау аша әҙәбиәттәрҙең үҙ-ара бәйләнешен, ижад мәктәптәре, әҙәби традициялар хаҡында аныҡ мәғлү-мәттәр алырға мөмкин. Теге йәки был әҫәрҙән, йә иһә яҙыусының былай ғына әйткәненән өҙөктәр төрлө маҡсатта алыныуы мөмкин. Бер осраҡта цитата авторы менән фекерҙәш: булыуҙы, хатта уны оло авторитет итеп һанап, үҙ фекерҙәрен унан раҫлатыуҙы, йөпләтеүҙе аңлата. Тимәк, цитаталау аша авторға оло хөрмәт һәм ихтирам белдерелә. Ҡайһы бер цитаталар, киреһенсә, алдағы автор менән килешмәүҙе, уға ҡаршы сығыуҙы аңлата. Әҫәрҙең идея-эстетик йөкмәткеһен тейешенсә анализламай тороп, был төр алынма ларҙың әҫәрҙәге функцияларын теүәл асыҡлауы шаҡтай ҡыйын. Бына, мәҫәлән, Р.Бикбаевтың "Ыыуһаным -һыуҙар бирегеҙ!" поэмаһындағы цитата төрҙәренә иғтибарҙы йүнәлтәйек. Ағиҙел буйҙарының, Урал армыттарының үткәндәге йәмен һәм матурлығын раҫлатыр әсән ул халыҡ шағиры Р.Ниғмәтиҙең "Йәмле Ағиҙел буйҙары" поэмаһынан *Ағиҙелкәй һыҙылып ағып сыға Һал-ҡын терегөмөш шикелле* тигән өҙөктө килтереп тора ла, шундағы сағыштырыуҙы "ысынға" әйләндерә: *Ағиҙелгә терегөмөш ағып, Ағыулауып курһә Ниғмәти...* Йә иһә М.Горькийҙың Ағиҙелдең матурлығына һоҡланып әйткән һүҙҙәрен иҫкә төшөрә:

Бер саҡ Максим Горький үҙе әйткән,
Ағиҙелгә хайран ҡалған килеш:
"Там, на Белой, места такой красоты -
ахнешь, сто раз ахнешь..."

Артабан текста шағир "ахнешь" тигәнде хозур тәбиғәттең юҡҡа сығарылыуына инрәп, ҡапма-ҡаршы мәғәнәлә ҡуллана:

*Иҫкә килә Горький һүҙе тағы ла,*
*"Ахнешь, сто раз ахнешь"*
*был йылғала.*
*Йөрәк т,елеп сығыр ахтарың...*[48]

Эпиграф — асыҡ реминисценцияларҙың тағы ла популяр бер төрө. Бындай алынмалар бөгөнгө прозала ла, айырыуса шиғриәттә күп осрай. Шиғырҙың башында икенсе бер шиғырҙан бер-ике юл алып, авторын күрһәтеү күренеше бик киң таралған. Был төр реминисценцияларҙа, беренсенән, эпиграф үҙе һәм эпиграф менән шиғыр араһындағы мотлаҡ тематик, логик ауаздашлыҡ тыуҙырған йәшерен реминисценция ҡатнаша. Бына Рәшит Назаровтың "Һалдат интервьюһы" тигән әҫәренә туҡталайыҡ. Эпиграф итеп М. Горькийҙың "Һеҙ һорайһығыҙ ..." тигән һүҙҙәре алынған. Ул ғәмәлдә әҫәрҙең композицион элемент сифатында файҙаланыла.

*Майҙан гөжләй.*
*Шау-шыу, ергә һыймай,*
*Күккә менеп эҙләй үтер юл.*
*Пресса вәкилдәре*
*Океан булып шаулай, ярһый –*
*Майҙан даулай минән интервью.*
*Хәтәр ҡәләмдәрен*
*Журналистар*
*Күтәргәндәр,*
*Күтәргәндәр штык шикелле.*
*Объективтар миңә тоҫҡалғандар.*
*Әмер көтөп тынған пушка кеүек....*
*Сеү! Тынығыҙ! Һүҙ башлайым...*[49]

Эпиграф ошо һүрәтләнгәндәрҙең барыһы менән һалдаттың бер яҡлы диалогы һымаҡ яңғырай, һәм интервью башлана... Шулайтып, эпиграф был шиғырҙа үҙенсәлекле композицион сара булып хеҙмәт итә. Рәшит Назаровтың киң билдәле шиғырынан алынған

...Йөрәгемде аттым күккә.
.. .Йәшен ҡуйҙы йәшнәп,

тигән өҙөктәр Х. Назарҙың "Йәшнәү" шиғырынан эпиграф сифатында килтерелә. Артабанғы шиғри текст уға антитеза рәүешендә яҙылған:

*Атылмаған йәшен оҙан йәшнәй,*
*Атылғаны - хәтер йәшнәүе.*
*Атылғандың ерҙә - тән яраһы,*
*Йән яраһы була йәшнәүе.*
*Ул ирекле күктәр күкрәгендә,*
*Ер күтәрмәй ундай иректе.*
*Әҙәмдәр бит, йәшендәрҙән йәшереп,*
*Ситлегендә һайыҡмай йөрәкте.*

Эпиграфтар йыш ҡына башҡа әҙәбиәт вәкилдәре әҫәрҙәренән, айырыуса урыҫ телендәге әҙәбиәттән алыныуы мөмкин. Был осраҡта алынмалар, ғәҙәттә, нөсхәләге текстан тәржемәһеҙ ҡуйыла. Мәҫәлән, М. Кәримдең "Ваҡыт туҡталмаһын!" шиғырына эпиграф итеп "Остановись, мгновенье! Ты прекрасно" тигән Гете һүҙҙәре, исемһеҙ шиғырында "Проклятый корабль пассажирский" тигән Р.Киплинг һүҙҙәрен, икенсеһендә Р.Бернстың:

А из земли выходит Джон
Ячменное зерно тигән һүҙҙәре алынған.

Эпиграф һүрәтендә танылған яҙыусыларҙың ҡанатлы һүҙҙәре, билдәле фразалары ла алынырға мөмкин. Мәҫәлән: Й.Ильясованың "Мин дә ҡара..." тигән шиғырының эпиграфы: "Мое белое убожество бок о бок с черным божеством. В каждом негре я люблю Пушкина и узнаю Пушкина, - черный намятник дограмотного младенчества и Всея России". (Марина

Цветаева.). Ошо юлдарҙы дауам итеп, Й.Ильясова үҙенең фекерҙәре менән бүлешә:

Пушкинды ла, эйе, даһи иткән
Ғәрәп ҡаны менән Рәсәй ҡаны,
Ҡара һәм аҡ ҡандар ҡушылыуҙан
Арҡкан ғына икән Рәсәй даны/"[1]

Теге йәки был әҙиптең исем-шәрифтәрен әҫәр **тексына индереү** — башҡорт әҙәбиәтендә иң таралған реминисценция-ларҙың бер төрө. Ижади үҫешенә ыңғай йоғонто яһағаны, айырым ҡылыҡ-фиғылдары менән күңелен байытып, тормош юлында ниндәйҙер яҡты эҙ ҡалдырғаны әсән оло хөрмәт ҡаҙанған айырым әҙиптәр үҙҙәре үк икенсе бер яҙыусы тарафынан художестволы һүрәтләү объекты итеп алыныуы ихтимал. Ҡайһылыр әҙиптең яҙмышы һәм ижады менән яҡындан танышыу һөҙөмтәһендә уйланыуҙар шиғыр юлдарына әүерелеүе мөмкин. Ошо рәүештә тыуған әҫәрҙәрҙең атамаһы уҡ кем хаҡында һүҙ барасағын хәбәр итә. Ул әҫәрҙәрҙең байтағы авторҙың үҙе һайлаған әҙипкә туранан-тура мөрәжәғәте, бер яҡлы диалог формаһында була. Ф.Туғыҙбаеваның, мәҫәлән, "Рәшит Назаров"[9] тигән шиғыры:

Гонаһлы был ергә күктән төшкән
Иблее бит һин. Ҡурҡам һинең көстән.
Эсеп бөткө килә шарабыңды —
Тик бер ауыҙ итеп уны эсһәң, ~[52] тип башланһа, Ирек

Кинйәбулатов "Рәшит Назаровҡа"әҫәрендә

Кин аҡылдан яҙҙырырлыҡ
Шиғыр яҙҙың.
Уны уҡып һин аҡылдан
Үҙең яҙҙың, -тип мөрәжәғәт итә лә
Мин әгәр ҙә һинең һымаҡ
Шиғыр яҙһам,
Үкенмәмен аҡылымдан
Ҡапыл яҙһам.., -[53]

тип бөтөрөп ҡуя.

Р.Бикбаев "Шаҙра шағир"ҙы - Назар Нәжмигә ҡарап,

Йырҙарында — әллә ниндәй һағыш.
Күҙгә — һаран, хискә - йомартһың.
Һуңғы шаҙра шағир...
Күптәрҙе бит
Заманалар артыҡ шымартты[54] тип, заман шиғриәте хаҡындағы уйҙары

менән бүлешә. Х.Назар иһә "М.Кәримгә" әҫәрен туранан-тура шағирға өндәшеүҙән башлай:

Янған саҡта йөрәк, эҙләп терәк,
Йәки яуап эҙләп был осорға,
Бағам, Мостай агай, үҙебеҙҙең
Ҡиссаларҙан ҡала - Шекспирға.[55] Әҙәби алынмаларҙың күбеһе атаҡлы Салауат,

Аҡмулла, Бабич, К.Дәүләтшина, З.Биишева, Р.Назаров, М.Кәрим, Н.Нәжми кеүек башҡорт әҙәбиәте күгендә сағыу балҡыған оло талант эйәләре менән бәйле.

Авторҙар бындай шиғырҙарҙың жанр формаһын йә **арнау,** йә **бағышлау** тип билдәләй. Ҡ.Аралбай "Таналыҡ тауышы" китабының икенсе бүлеген:

Бағышлауҙың һағыш ағыштары
Сафлай-нурлай күңел ярҙарымды.
Арнауҙарҙың борғо тауыштары
Һиҫкәндерә имен таңдарымды,[56]

тип аса. Был бүлектә З.Вәлиди, Ш. Хоҙайбирҙин, М.Мортазиндар менән бер рәттән Аҡмулла, Бабич, сталинизм ҡорбандары - А.Таһиров, Д.Юлтый, Б.Ишемғол, Т.Йәнәби, Ғ.Амантай, И.Насыриҙар, йәнә ҡәләмдәштәре М.Кәрим, Р.Ғарипов, З.Биишева, Н.Нәжми, А.Игебаев, Р.Бикбаев, Ә.Хәким, Б.Рафиҡов, Д.Бүләков, И. Кинйәбулатов, С.Шәрипов һ.б. исемдәренә шиғырҙар осрай.

Х.Ғиләжевтың "Аҡлан шишмәһе" китабының **(1998)** ҙур ғына бүлеге "Бағышлауҙар" тин аталып, унда авторҙың ҡәләм-дәш дуҫтарына, яҡындарына бағышланған әҫәрҙәре

тупланған.

Айырым шағирҙар хаҡында дүрт юллыҡтарҙан торған ҙур ғына шәлкем Ғәбиҙуллала ла бар һәм ул "Шағирҙар" тип атала. Был - әҙәбиәтебеҙҙә башҡорт шағирҙәренә арналған иң күп арнамалар.

Кәбән урап йүгерәләр,
Һәр шағир ҙа оҫта.
Таш та һалып ырғыталар -
Мостай көлә аҫта.[57]

Был шәлкемдә тағы ла "Нәжми", "Бикбай", "Ҡәҙим", "Хәсән", "Сафуан", "Тимер", "Ғәзим",
"Рауил", "Әсхәл", "Мәүлит", "Самат", "Хисмәт", "Ҡол-Дәүләт", "Буранбай", "Рәйес", "Әхмәр", "Салауат", "Рәмил", "Тойғон", "Аҫылғужа", "Тамара", "Кәтибә", "Тамара", "Зөһрә", "Факиһа", "Әнисә", "Эльмира", "Таңһылыу", "Йомабикә", "Гөлфиә", "Ғәбиҙулла" тигән шиғырҙар бар: торғаны менән бөгөнгө башҡорт шағирҙары энциклопедияһы.

М.Кәримдең "Һағынғанда яҙылғандар" тигән шаярыуҙар шәлкемендә "М.Ғәлигә", "Ә.Атнабаевҡа", "Ф.Туғыҙбаеваға", "Н.Асанбаевҡа", "Т.Ғәниеваға" тигән шиғырҙар бар:

Ул төрлөсә. Тик хәйләләп
Яһалмай ул.
Ҡырҡ бер тапҡыр суҡынһа ла
Асанбай ул.[58]

"Арнау", "бағышлау" - һүҙлектәрҙән күренеүенсә, ғәмәлдә синонимдар, өҫтәүенә, исем-ҡылымдар. Йә юбилей, йә шуның ише дата айҡанлы, йә бүтән сәбәптән кемгәлер төбәп ижад ителгән әҫәрҙе арнама йә бағышлама тип атау урынлыраҡ булыр төҫлө. Ҡайһылыр әҙип шәхесенең күркәм сифаттарына ҡыуаныу һәм һоҡланыу, унын менән эс серҙәрен, уй-хыялдарын бүлешеү, үҙен борсоған мәсьәләләр менән уртаҡлашыу рәүешендә яҙылһалар ҙа, улар Көнсығыштан ингән мәдхиә жанрына тартым. Төптән ҡарағанда, кешегәме, кешегә түгелме, бағышлауҙарҙың төп тәғәйенләнеше - маҡтау һәм данлау. Шағирә Р. Хисаметдинова-ның "Тыныслыҡҡа бағышлау" шиғыры ла - тап шундайҙарҙан

Бары тыныс йәшәү хаҡыналыр
Беҙҙең
Илһам, ижад, тырышлыҡ.
Йөрәгебеҙ аһы,
Бәхетебеҙ башы -Тыныслыҡ!
Тыныслыҡ!
Тыныслыҡ![59]

Ҡайһылыр әҙип вафатынан һуң яҙылған бағышлауҙарҙы гәрәптән ингән икенсе бер термин менән мәрҫиә тип тә әйтеп була. Бындай шиғырҙарҙа ",..яҡты иҫтәлегенә" йә "...рухына", йә иһә "...ҡәбере янында", "вафатынан һуң", "юҡһынып", "хәтерләп" кеүек ремаркалар ҡуйыла.

Арнама йәки бағышламалар структура йәһәтенән күп төрлө. Берәүҙәрендә бағышлау объектының исеме әҫәр атамаһы итеп сығарыла, икенселәрендә шиғыр атамаһынан һуң кемгә төбәлгәне йәйәләр эсендә күрһәтелә. Ошондай асыҡлыҡ булмаһа, был әҫәрҙең конкрет бер затҡа арнама икәнлеген билдәләү мөмкин дә булмай. Ҡ.Аралбаевтың, мәҫәлән, "Тоғро ҡалайыҡ", Р. Тойғондоң "Ѣинең кеүек ирҙәр күберәк булһа"шиғырҙары, "Динис Бүләковҡа", "Сабир Шәриповҡа" тигән ярҙамсы яҙыуҙары булмаһа, ғөмүмән, замандашҡа, ҡәләмдәшкә өндәшеү һымаҡ ҡабул ителер ине, сөнки әҫәр эсендә улар телгә алынмай.

Ҡайһы бер бағышлауҙарҙа реминисценцияларҙың бер нисә төрө бергә ҡулланыла. Арнауҙарҙы, мәрҫиә-иҫтәлектәрҙе иң күн яҙыусы шағирҙарҙың береһе И.Кинйәбулатовтың "Уңдыҡ" шиғырына к үҙ һалайыҡ. Беренсенән, шиғырҙың атамаһы М.Кәримдең "Уңдым" шиғырынан алынған, икенсенән, шул уҡ әҫәрҙән эпиграф килтерелә һәм шундағы "минән уңды микән бүтәндәр?" тигән риторик һорауға киңәйтелгән яуап ҡайтарыла:

Уңдыҡ һинән, уңдыҡ. Рәхмәт яуһын!
Ил ҡушылыр ихлас һүҙемә.
Кинән дә ныҡ уңдыҡ һинән,
Һиҙҙереүе ауыр үҙеңә...[60]

Ә бына Әнисә Таһированың күренекле рус шағирәһе А.Ахматоваға

арналған шиғырҙар шәлкеменән "Моңло шағирәнең эҙе буйлап..." тигән триптихы тағы ла ҡатмарлыраҡ структуралы. Тәүге бүлектә А.Ахматованың үҙенең шиғырынан эпиграф алынһа, икенсе бүлек башында М.Цветаеваның "А.Ахматоваға" бағышлауынан өҙөк алына һәм шуға таянып шағирәгә мәдех йырлана. Өсөнсө бүлектә иһә Э.Таһирова хәтерләүҙең дини ритуалын башҡарыу, -сиркәүҙә А.Ахматова өсөн шәмдәл ҡабыҙыу картинаһын тыуҙыра. Шул уҡ шәлкемдәге икенсе бер шиғырында Ә. Таһирова дүрт рус шағирәһен (А.Ахматова, О.Берггольц, Ю.Друнина, М.Цветаева) Анна, Оля, Юля һәм Марина Бергә йыйылғандар табынға...[61] һағынып телгә ала.

Ҙур күләмле иҫтәлектәр, мәҫәлән, И.Кинйәбулатовтың "Йөрәктәге һәйкәлдәр" (З.Биишева иҫтәлегенә), "Ғаләм һаҡсыһы" (Д.Бүләков иҫтәлегенә) яҙылған поэмалары бар.

Яҡты донъянан киткәндәрҙең яратҡан нәмәләре, тыуған төйәктәре, улар данлаған образдар иҫтәлек-шиғырҙарҙың күбеһендә поэтик деталь ролен үтәй.

Бына Кәтибә Кинйәбулатованың Р.Ниғмәти иҫтәлегенә яҙылған "Килдек фәҡәт йырың тыңларға" тигән шиғырында халыҡ шағирының "Һинең кәләшеңдең хаттары" әҫәрендәге образ тыуҙырыусы деталь - "ике бөртөк йәш:":

Ҡайғы еңел килә тигәс, илап, Йәйгем аҡты биттән тәгәрәп, "Ике бөртөк..." Береһе - һөйөү һиңә, Береһе нәфрәт ине әжәлгә... Яҙыусылар исеменә бәйле әҙәби алынмаларҙың үҙенсәлекле бер төрө - "...һөйләгәне", "...әйткәне" тигән баш аҫтындағы әҫәрҙәр. Ҡол-Дәүләттең "Рәми ағайҙың әйткәне" шиғыры шундайҙарҙың иң типик үрнәге булып тора. "Әйткәне" - бында тик шартлы төшөнсә генә, асылда автор үҙе Р.Ғарипов исеменән уның шиғырҙарының дөйөм идеяһын, уның йәшәү принциптарын яҡтыртҡан:

Йылытам тип, туң донъяны
Ҡыш уртаһы йәшнәнем.
Үҙем әсән йәшәмәнем,
Халҡым әсән йәшәнем.[63]

Яҙыусыларҙың исемдәре, уларҙың теге йәки был әҫәренең геройҙары әҫәр эсендәге реминисценцияны тыуҙыра, һәм ул үҙ сиратында художестволы һүрәтләү сараһы сифатында хеҙмәт итә башлай.

Мәҫәлән, Ҡол-Дәүләт "Ос та, йәнем"шиғырында:

Ос та, йәнем, күккә, Рәми ағай
Ожмахына барып ояла, ~[64]

тиеүе бөйөк шағирҙың ижад мәктәбен, мәртәбәһен күҙаллата.

Күренекле шағир Тимер Йосоповтоң "Рәми ағайҙың һөйләгәне" шиғыры, ысынлап та, Рәмиҙең үҙ ауыҙынан ағылған хәтирә формаһына яҙылған. Ундағы тоғролоҡ кәүҙәләнеше булған эт образын әҫәр аҙағында автор икенсе планға - үҙенә күсерә. Сағыштырыу иҫтәлекте күпкә тәьҫирлерәк итә, поэтик образлылыҡты көсәйтә.

Юғалтыуҙар күрҙем, Рәми ағай,
Юям инде ҡай саҡ түҙемде...
Вагон эргәһенән сабып барған
Шул эт һымаҡ тоям үҙемде.. .[65]

Яңы әҙәби образдарҙы һынландырыуҙа айырыуса халыҡ араһында популярлыҡ яулаған, исемдәре символ дәрәжәһенә күтәрелеп изгеләштерелгән яҙыусыларҙың исем-шәрифтәре, улар ижад иткән әҙәби образдар файҙаланыла. Бына бер нисәһе:

Күтәргәндәр ирҙәр түҙмәҫ йөктө
Һәҙиәләр ябыҡ яурынында.
(Т.Искәндәрова,"Халыҡ тойғоho"),

Башҡорт батыры, татар шағиры тип
Аңда йәшәй Салауат һәм Туҡай.
(Х.Назар, "Асманға ашыу"),

Беҙ Мостайҙың геройҙары һымаҡ:
Һин - Аҡйондоҙ, ә мин - Мәрәһим,
(Р.Ҡолмөхәмәтов - "Рамзай",
"Беҙ Мостайҙың геройҙары һымаҡ")

Ишек асып инеүҙәрем булды –

Түргә әйҙүкләне Гөлйөҙөм
Биш балаһы менән Айбул аты...
(Ф.Туғыҙбаева "Бәхет һүрәте")
Йырлап торған Нәжми йүкәһенән
Япраҡ түгел, гүйә, моң тама.
(Ҡол-Дәүләт, "Туҡай урамында тыуған шиғыр"),
һәҙиәлер, бәлки,
Дәүләтшина –
Уйҙарына тоғро ҙур кеше.
"Ырғыҙ"ына - ғәзиз ил ҡыҙына
Бар мираҫы - йөрәк тибенге.
Кем ул? Зәйнәп Биишева мәллә?
Аҫыл томдар, улдар инәһе.
(Р. Хисаметдинова. "Башҡорт ҡыҙына").

Асыҡ реминисценция үрнәктәре фәҡәт милли әҙәбиәт хазинаһы менән генә бәйле, тип уйлау төптө дөрөҫ булмаҫ ине. Яҙыусыларҙың хәҙерге информацион саралар ярҙамында донъя кимәлендәге әҙәби процесс менән яҡындан таныш булыуын, башҡа ҡитғаларҙағы, үткән осорҙарҙағы әҙиптәр ижадында үҙҙәренә ниндәйҙер рухи ауаздашлыҡ табыуын тап шул әҙәби алынмалар миҫалында тойомларға була. Мәҫәлән, урта быуаттарҙа ғәрәп-фарсы телендәге яҙма сығанаҡтарҙан үҙләштерелгән әҫәрҙәрҙең геройҙары, сюжет элементтары хәҙерге әҙәбиәттә теге йәки был символик мәғәнәлә йыш ҡулланыла. Айырыуса барлыҡ мосолман донъяһында бәхетһеҙ мөхәббәт кәүҙәләнеше рәүешендә Таһир-Зөһрә, Ләйлә-Мәжнүн, ә бәхетлеһе рәүешендә - Йософ-Зөләйхә исемдәре күп орсай. Күренекле шағир Абдулхаҡ Игебаевтан бер миҫал:

Гәрсә, ергә, күккә сәләм биреп,
Кәр көн Сулпан ҡал ҡыр, таң атыр.
һәр замандың Мәжнүн, Ләйләләре
Бер-береһе әсән йән атыр...

Бар донъяһын онотоп яратыр![6] Рәми Ғарипов әҫәрҙәрендә асыҡ алынмаларҙың һәммәһе лә ҡулланыла һәм һәр бер әҫәренең идея-эстетик йөкмәткеһе менән тығыҙ бәйләнешкә инә.

Бер ҡараһаң, утыҙ етелә
"Тымыҡ Дондар" ижад ителә...
Балҡымаған ерҙә Бабичтар!
Әйтерһең дә, Туфан ҡалҡмаған,
Булмаған да Һәҙиә, Юлтыйҙар! ("Табыныу")
Бөтә Дон-Кихоттар, минең арттан! ("Дон-Кихот")
Минең менән йөрөй Урал батыр,
Дон-Кихот та китә ҡултыҡлап.
Осоп килә миңә Дауыл ҡошо,
Ғафури ҙа килә һылтыҡлап.
("Йәшәр кәрәк, тиһең...")
Урал батыр Аҡбуҙатын менеп,
Замандарҙан саба заманға,
Йәншишмәһен бөркөп тереклектә,
Фауст ише Ергә ул баға..
("Урал урманы")

Ошо ғына өҙөктәрҙән дә, шағирҙың ижад офоҡтарының киңлеген самаларға була: М.Шолохов, Х.Туфан, Һ.Дәүләтшина, Д.Юлтый, Сервантес, "Урал батыр" эпосы, М.Горький, М.Ғафури, Гете хәсиәте...

Әҙәби алынмаларҙың үҙенсәлекле бер төрө художестволы тәржемә эшмәкәрлеге менән тығыҙ бәйле. Ҡайһылыр сит телдән әҫәрҙең өҙөгөн тәржемәләп, уға үҙ фекерҙәрен өҫтәп, ижади үҫтереп
ебәреү башҡорт шиғриәтендә йыш ҡына осрай. Йәнә лә Р.Ғариповтың "Йәш философ" шиғыры - быға асыҡ миҫал. "Пусть всегда будет солнце!"тип башланған популяр йырҙың ҡушымтаһы әҫәрҙә раҫланған "философия"ның нигеҙ хеҙмәтен үтәй:

Ни уйлайһың, йәш философ?
Ни фәлсәфә ҡораһың?
Шул фекерҙә тораһың:
һәр саҡ булһын ҡояш, тиһең,
һәр саҡ булһын к үк, тиһең.
Әсәм булһын, мин булайым,
Э ҡоралды... түк, тиһең,
Ә һуғышҡа "юҡ!" тиһең.[67]

Бындай ижади тәржемәләр - асылда урта быуаттарҙағы Шәреҡтән килгән әҙәби традицияларҙы үҙенсәлекле дауам итеү, тиһәк тә дөрөҫлөккә тап килер.
К.Кинйәбултованың "Әсә һулышы" (1980), Г.Юнысованың "Аҡ ямғыр" (1998) йыйынтыҡтарына, Х.Назарҙың "Заман заңы" (1995) китабының "Ҡәләмдәшлек - миңә ҡәрҙәшлек" бүлегенә ингән төрлө милләт шағирҙарынан ирекле тәржемәләрен нәзирә тип тә атарға була.

Әйтергә кәрәк, асыҡ реминисценцияға нигеҙләнгән хатта айырым жанрҙар ҙа бар. Мәҫәлән, пародия һәм шарждар, шаярыудиялар икенсе бер авторҙың айырым фраза, шиғыр юлынан башлана. Б.Исҡужиндың "Һаҡ булығыҙ, ҡыҙҙар" пародияһы, автор үҙе күрһәткәнсә, Э. Үтәбайҙың:

...Тик шулай ҙа "ағай" һүҙен ҡушмай,
Әйтһәң минең исемде...

-тигән юлдарынан сығып яҙылған. Пародияла "ағай" һүҙе аша реаль картина һүрәтләнә:

Мин өйләнгәс, ҡыҙҙар күбәйгәндәр
Ҡайһы ғына ике арала!
Һәр береһе: "Ағай, ағай", - тиеп,
Аяҡ араһында урала...[68]

"Ағай" һүҙе был осраҡта пародия яҙыу өсөн нигеҙ булып хеҙмәт итә һәм үҙенсәлекле реминисценция өлгөһө тип ҡарала ала.

**Аҫтыртын йәки йәшерен реминисценцияларҙы** билдәләү ауырыраҡ. Бының әсән иң тәүҙә өлгө, үрнәк булған әҫәрҙе йә башҡа әҙәби фактты яҡшы белеү, шунда уҡ уны төҫмөрләй һалыу һәләте үҫешкән булырға тейеш. Күп кенә осраҡта бындай реминисценциялар барлығы авторҙың үҙе менән булған теге йәки был әҫәре хаҡындағы әңгәмә-һөйләшеүҙәр аша асыла. Мәҫәлән, күренекле әҙип Әхиәр Хәкимовтың "Өйөрмә" романында ниндәйҙер реминисценция булыуы-булмауы башҡа ла инеп сыҡмай. Ул хаҡта китап баҫмаһы өсөн автор тарафынан яҙылған махсус инеш һүҙ хәбәр итә:

*"Бутән ҡәләмдәштәрем нисектер, миңә иһә, яңы әҫәргә тотонор өсөн, ниндәйҙер сағыу факт йәки берәй сетерекле ваҡиға "көйҙөрөп" алырға тейеш. "Өйөрмә" менән шулай булды. Роман башынан аҙағынаса күңелдә уйланылған, геройҙарым, төҫмөрләнә ине, ә баяғы "этәргес пружина" табылмай ҙа табылмай...*

*Тап ошо мәлдә Һәҙиә Дәүләтшинаның юғалған әҫәре тирәһендә имеш-мимештәр ишетелә башланы... Йөрәгем жайнап китте. Һәҙиә апайҙың юғалған ҡульяҙмаһы хаҡында мәрхум тәнҡитсе. М.Минһажетдиновтың сер итеп һөйләгәндәре иҫкә төштә. Ошо хәлдәр мин эҙләгән "пружина" хеҙмәтен утәне лә инде. Шул мотив романдың ике булеген бәйләргә лә ярҙам итте..."*[69]

Ә.Хәким үҙе яҙғанынса, Һ.Дәүләтшинаның әҫәре юғалыу факты романдың сюжетын ойоштороған композицион сара ролендә сығыш яһай һәм үҙенсәлекле әҙәби реминисценция өлгөһө итеп ҡарала ала.

Йәнә тағы бер әҫәргә, Ғ.Хисамовтың бер романына, күҙ һалайыҡ. Ул асыҡ цитатанан башлана.
Башҡорт халҡының мәшһүр йыры "Урал"дың популяр бер строфаһы эпиграф итеп алынған.

Романдың исеме лә ошо уҡ йырҙан алынма, йәғни реминисценция булып тора - "Тамып та ғына ҡала ҡандары". Әҫәрҙең сюжеты 1916-1919 йылдарҙа Башҡортостанда барған тарихи ваҡиғаларҙы: Февраль һәм Октябрь революциялары, граждандар һуғышы, Башҡорт автономияһы өсөн көрәш: ваҡиғаларын һүрәтләүгә ҡоролған. Әҫәрҙең бантында уҡ төп герой Сәлих образының прообразы атаҡлы башҡорт шағиры Шәихзада Бабич икәнлеген

аңғарабыҙ. Берҙән, ул -Өфөләге "Ғәлиә" мәҙрәсәһе шәкерте, тулы исеме лә ҡатлы-ҡатлы: Шәйхсәлих. Атаһы Рәхмәтулла иһә -ауылдың хөрмәтле кешеһе, өҫтәүенә, мөғәллим, төрлө емеш ағастарын үҫтереүсе оҫта баҡсасы. Иң әһәмиәтлеһе: Сәлих иҫ киткес шиғри талантҡа эйә. Әҫәрҙә яңғыраған айырым шиғыр өлгөләрендә лә Бабич шиғырҙары "еҫе" һиҙелә.

*...Ни эшләп инәлтеп торһон шағир? Салих һөйләнеһөйләне лә:*

*- Их, мандолина ю-к, мин һеҙгә йырлап та күрһәтер инем, - тип, алан-йолан - каранды... Ҡулдан-кулға үтеп, мандолина гпакта куперсеккә тапшырылды. Салих, - ҡылдарҙы бер-ике сиртеп, яңғырашын тикшерҙе лә моңло, юғары тауыш менән йырлап ебәрҙе:*

*- Туған хал-ҡым, бәхетең, көнөң әсән...*

*Бына Ҡыҙыл Армияға -ҡушылыу уңайы менән саф-саф теҙелгән баш^ҡорт эскадрондары алдында шағир сығыш яһай:*

*Баш-ҡорт китте -кыҙыл юлдан,*
*Хаж булғанға -ҡыҙыл юл...*[70]

Алдағы юл Бабичтың "Халҡым әсән" шиғырын хәтерләтһә, һуңғы ике юл киң билдәле "Ҡыҙылдарға ҡушылыу айҡанлы башҡорт халҡына көйлө хитап" әҫәренә стилизация булып яңғырай.

Салихтың Ырымбурға барыу менән Башҡорт хөкүмәте эшендә әүҙем ҡатнаша башлауы, Темәстә хөкүмәт гәзитен сығарыуға йәлеп ителеүе, Ҡыҙыл Мәсеткә китеп барғанда юлда ҡыҙылдарҙың Смоленск полкы һалдаттары тарафынан вәхшиҙәрсә үлтерелеүе - барыһы ла Бабич биографияһының эпизодтарын ҡабатлай. Салих образы тап Бабичҡа бәйләнешле икәнлеген аңғартыр өсөн, автор роман аҙағында Көнсығыш фронты командующийына Зәки Вәлиди яҙған рәсми документтан ҙур ғына өҙөктө әҫәр тексына индергән. Шуның һөҙөмтәһендә йәшерен тойолған реминисценция ярым асыҡҡа әйләнә.

Ҡайһы бер китапты уҡыған саҡта ныҡ тәьҫирләндергән, хис-кисерештәр уятҡан моменттар, әҙәби геройҙар, айырым поэтик деталдәр хәтергә ныҡ юйыла, һәм шулар нигеҙендә анда тоторокло образдар формалаша. Яҙыусы үҙе лә һиҙмәҫтән аңында һаҡланған әҙер образдарҙы аңһыҙ рәүештә ижади ҡулланырға мөмкин. Бындай осраҡтарҙа яҙыусы фантазияһы тыуҙырған үҙаллы образмы, әллә реминисценция һөҙөмтәһендә ижад ителгән икенсел образдармы икәнлеген билдәләү бик ҡыйын. Күп осраҡта бындай тап килеүҙәрҙе ауаздашлыҡ, осраҡлы оҡшашлыҡ тип баһаларға ҡала. Бына, мәҫәлән, С. Әлибайҙың "Аҫыл таштар эҙләй бер ҡыҙ" шиғырының тәүге:

Яр буйынан бер ҡыҙ килә,
Яланаяҡ, яланбаш,
Һығылдырып буй-һындарын,
Эҙләп йөрөй аҫылташ, -[7]

тигән строфаһын укығас та, М.Кәримдең

Диңгеҙ буйлап йүгерә бер малай,
Ялан тәпәй. Беҙҙең нәҫелдән.
Эҙҙәрендә йым-йым итә ваҡ таш, -
Гүйә ергә йондоҙ сәселгән, ~[72]

тигән юлдары хәтергә килә. Бер үк картина тасуирланыуҙан тыш, бер үк һүҙҙәрҙең (буйлай, бер, яланаяҡ-ялан тәпәй, эҙҙәр, йымылдашҡан таш) -ҡабатланыуы шиғри оҡшашлыҡты кө-сәйтә. Р.Ғариповтың

Хыялымда яңғыҙ елкән булып,
Сайҡалаһың йылдар буйына.
Йә һис юғалмайһың үҙең унан,
Йә бирмәйһең тыңғы уйыма,[73]

тип яҙғаны менән танышҡанда, мәктәп йылдарынан һәр кемгә мәғлүм Лермонтовтың "белеет парус одинокий" картинаһы күҙ алдына баҫа.

Хыялдарҙа эҙләп күк диңгеҙҙең
Аҡ карабын, алһыу елкәнен,
Онотабыҙ ерҙә кешеләрҙең
Мал көткәнен, иген иккәнен --
Ошо үҙе тормош икәнен, ~[74]

тип, Р.Бикбаев бөтөнләй бантҡа күренеш һүрәтләй. Был юлы Лермонтов түгел, ә А.Гриндың "Алые паруса" әҫәре, бигерәк тә шуның буйынса ҡуйылған һәм ил экрандарында шаулап барған фильм сюжеты һәм ал елкәнле аҡ карап килтерәсәк бәхетле тормош хаҡында хыялланған Ассоль образы хәтергә килә.

Авторҙарҙың үҙ һылтанмалары булмағас, шунан артығын раҫлау мөмкин түгел. Һәр хәлдә йә тегеләй, йә былай тип өҙөп кенә әйтеп булмай, ул - сетерекле һәм бәхәсле мәсьәлә.

Хәҙер инде Р.Назаровтың "Елкән һәм диңгеҙ" әҫәренә мөрәжәғәт итәйек.

Сал диңгеҙҙең уртаһында
Аҡ елкән.
Был дауылда - кем икән ул,
Кем икән?
Ниңә сыҡҡан. Ниңә йөрөй
Интегеп,
Тулҡындарҙан тулҡындарға
Һикереп? -
Бер югала, бер күренә
Ағарып.
Еңелмәҫме ул диңгеҙҙән
Ах!-арып?..

Был юлдарға күҙ һалғас та, үҙенән-үҙе шулай уҡ

Белееет парус одинокий
В тумане моря голубом.
Что ищет он в стране далекой,
Что кинул он в краю родном?

тип башланған таныш шиғыр иҫкә төшә. Яңғыҙ аҡ елкән, билдәһеҙлек менән бәйле һағыш, интегеү, арыу... Р.Назаров яҙғандары - барыһы ла Лермонтов рухында. Ысынлап та, күренекле рус шағирының йоғонтоһо был осраҡта бәхәсһеҙ. Әммә Р. Назаров Лермонтов һүрәтләгән диңгеҙҙәге елкән картинаһын үҙенсә яңыртыу менән генә сикләнмәй, ә төп иғтибарҙы диңгеҙ һәм елкән мөнәсәбәттәрен асыҡлауға йүнәлтә. Әҫәрҙең ике генә строфанан торған икенсе бүлегендә ысынбарлыҡ раҫлана: "диңгеҙ әсән елкән" - елкән диңгеҙҙә гиҙеү әсән бик кәрәк! Ә өсөнсө бүлектә таныш образдарға символик мәғәнә һалына. Шағир уларҙы кешеләр планына күсерә һәм парадоксаль һығымта яһай:

Был диңгеҙ - минең хыялым,
Йәшәмәй ул һинһеҙ.
Һин ундағы аҡ елкәнһең -
Һинең әсән диңгеҙ![75]

Урта быуаттарҙа шәреҡ шағирҙары билдәле әҙер сюжеттарҙы, таныш: образдарҙы ижади яңыртыу аша үҙҙәренең оригиналь художестволы фекерләү ҡеүәһен, поэтик оҫталығын күрһәтергә ынтылған. Ирекле тәржемәнән, шәрехләүҙән айырмалы рәүештә нәзирә жанрына мөрәжәғәт итеү һәр берәүҙең шағирлыҡ кимәлен билдәләргә мөмкинлек биргән һәм үҙенсәлекле поэтик ярыш формаһында ҡаралған. Ошо күҙлектән баһалағанда, "Диңгеҙ һәм елкән" әҫәре -классик нәзирә өлгөһө. Р.Назаров Лермонтовҡа ябай эйәреүсе, үҙенсә, әммә барыбер ҡабатлаусы ғына түгел бында. Ул, Лермонтов тыуҙырған әҙәби донъяны бөтөнләй яңы эстетик яҫылыҡҡа күсереп, өр-яңы образдар ижад итеүгә һәләтле шағир булараҡ сығыш яһай.

3. Әҙәби текст яҙыу өсөн файҙаланылған иң бай сығанаҡтарҙың береһе - халыҡтың ауыҙ-тел ижады. Ата-балаларҙың тормош тәжрибәһе, әйләнә-тирәләге донъя, кеше йәшәйеше хаҡындағы белем булараҡ быуаттар буйына халыҡ тупланған һүҙ сәнғәтенең әһәмиәте әйтеп бөткөһөҙ ҙур. Ауыҙ-тел ҡомартҡылары аша боронғоларҙың йәшәү рәүеше, ғөрөф-ғәҙәттәре, милли йолалар үҙләштерелеп, һәр берәүҙә милли үҙаң формалаша. Ысынбарлыҡтағы барлыҡ күренештәргә, хәл-ваҡиғаларға, кешеләрҙең бер-береһенә мөнәсәбәттәрҙе билдәләй торған үҙенсәлекле "'үлсәмдәр" системаһы - милли эстетик ҡараштар тап халыҡ рухиәтен сағылдырған аҫыл һүҙ

үрнәктәре миҫалында тәрбиәләнә. Үҙен халыҡтың бер вәкиле, шағир әйтмешләй, бер тамсыһы итеп тойоуҙа, ил тойғоһон булдыуҙа, ҡыҫҡаһы, һәр берәүҙең шәхес булып өлгөрөп етеүендә ауыҙ-тел ижады ҡаҙаныштары мөһим роль уйнай. Көндәлек йәшәйештә ул байлыҡты һәр кем үҙенеке һанай, үҙ ихтыяжынан сығып, теләгәненсә ҡуллана, һөйләй, үҙгәртә - үҫтерә ала.

Яҙма әҙәбиәттең башы — фольклорҙа. Һүҙ бында телмәрҙең яҙманан алда йәшәүе, йәғни хроника юҫығында түгел, ә халыҡ ижадының барлыҡ формаларының яҙма әҙәбиәтте байытып, даими тулыландырып торған мәңгелек шишмә булыуы хаҡында бара. Һәр тарихи осорҙа ла, яҙыусыны илһамландырыу һәм рух өрөү өҫтөнә, әҫәр ижад итеүҙә үҙенсәлекле һәм ышаныслы әҙәби материал булып хеҙмәт итә халыҡ ижады өлгөләре. Һүҙ ҡомартҡыларындағы мифик геройҙар, сюжет мажаралары, тылсымлы һәм мөғжизәле көстәр хәҙерге ижадсыларға ла мауыҡтырғыс һәм фәһемле әҫәрҙәр тыуҙырыуға булышлыҡ итә. Сал тарих төпкөлөндә яралып, быуаттар һүҙымында үҙенең йәшәү көсөн юғалтмаған эпостар, ҡобайырҙар ҡәләм оҫталарының һәр ваҡыт иғтибар үҙәгендә.

Башҡорт һүҙ сәнғәтенең камил һәм үлемһеҙ ҡаҙаныштарының бере - "Урал батыр" эпосы айырым урынды биләй. Ундағы һүрәтләү арсеналына мөрәжәғәт итмәгән бер генә автор ҙа юҡтыр, тиһәң дә, хата булмаҫ. Бына, мәҫәлән, Р.Бикбайҙың "Тамғалы уҡ" ғибрәте Урал батырҙың халыҡ үтенесе буйынса Йәншишмә һыуын уртлауы эпизодына антитеза рәүешендә төҙөлгән.

...Далала йот-ҡырғын. Ҡоролоҡтан барлыҡ тереклек, ырыу халҡы юҡҡа сығыу алдында. Һуңғы өмөт - Йәншишмәнән яулап алып ҡайтылған һәм алтын һауытта ҡәҙерләп һаҡланған тереһыуҙа. Бары бер генә кеше - ырыу башлығы Хужағол ғына, эпик Урал батыр шикелле, тереһыуҙы уртлап, тирә-йүнгә бөркә ала. Үҙ үлеме менән башҡаларҙы ҡотҡарырға бурыслы ул. Ырыу ҡарты һауытты башлыҡҡа тоттора...

Хужағолдоң көйгән ирене
Ҡалтыранып тейҙе һыуға...
Айырылырға изге һыуҙан
Хужағолдоң етмәй көсө.
Ҡалдырмайса тамсыһын да,
Бер тынала эсеп бөттө...
Халыҡ хайран...
Күкрәгендә бар ырыуҙың
Ҡайнай нәфрәт.[76]

Аҡһаҡал әмәлен таба: йәшел тауҙар итәгендә ырыу яңынан тамырлана. Йәшәү дауам итә, әммә унда мәңге үлемһеҙгә әйләнгән Хужағолға урын юҡ.

Теҙләнә ул, эй ялбара,
Тәңреһенән үлем көтөп.
Ил-халыҡтар балаларға

һөйләй уны ғибрәт итеп. Шағир "үлем-үлемһеҙлек" проблемаһын социаль планға күсерә һәм "халыҡ, ил" төшөнсәләре менән бәйләй: "илдән башҡа мәңгелек юҡ".

"Урал батыр" эпосындағы барлыҡ геройҙар ҙа, йә изгелек, йә яуызлыҡ символдары сифатында әҫәрҙән әҫәргә күсеп йөрөй. Бөгөнгө шиғриәттә Һомай, Һомайғош образы киң таралған.

Мәҫәлән, Т. Искәндәриәнең "Һомайғошом" шиғырында:

Һомайғошом, Һомайғошом!
Арсала һин үҙемде.
Йортомдағы, бишектәге
Ырыҫ утын һүндермәҫлек
Бир һин миңә түҙемде, —

тигән юлдарҙа Һомайғош - ырыҫ уты, бишек, түллек, ҡатын-ҡыҙ аллаһы менән асссоциациялана.

М.Ямалетдинов үҙенең бер китабын "Һомайҡош" тип атаһа, Ф.Туғыҙбаеваныҡы "Минең ҡошом -Һомай" тип исем-ләнгән. Шул китабына ингән "Ҡаңным - Һомайғоштоң ҡәлғәһе" тигән дастаны бар. Унда Һомайҙы шағирә Инә Тәңре тип ололай:

Һомайғошто һыуҙан, ерҙән,

Эй, саҡыра кендек инәһе,
Олуғ Бәхет Ҡошо - Инә Тәңре
Ошо сәғәт осоп килһәсе, ~[78]

тип, яңы тыуған балаға һомайғоштан ҡот килтереүен һорай:

Һомайғош - инә Тәңре,
Ҡабул ит теләгемде,

һомай булған ерҙә Аҡбуҙат бар. Аҡ ҡанатлы Аҡбуҙат образы кемдәрҙе генә илһамландырмаған, елкендермәгән икән?

Эйәрләп тә алып Аҡбуҙатты,
К үк тауҙарға ҡарай юл алам, -~[79]

тип Ҡол-Дәүләт "Башҡорт ере" шиғырында Аҡбуҙатты илһам ҡошо, ижад ҡомары менән дә сағыштырып ҡуя, 9 Т.Йосопов гел хәрәкәттә булған, алға барған - ағып ятҡан Ағиҙелдәге боҙҙарҙы тиңләй уға:

Иҙелдә аҡ боҙҙар
Ҡайнаймы еҙ күбек...
Боҙ аға - Аҡбуҙат,
Ҡайҙа һуң эйәре...[80]

Миҫалдарҙан күренеүенсә, халыҡ ижадынан алынған Һомай, Аҡбуҙат образдары ябай сағыштырыу ғына булып ҡалмай, бөгөнгө шиғриәттә үҙенсәлекле, киң мәғәнәле, сағыу символдар дәрәжәһенә күтәрә. Һомай - ҡот, бәхет, ырыҫ, билгеһе, Аҡбуҙат - хыял, илһам, дәрт, көс символы булып нығынған.

Урал батыр тирә-яғына уртлап һипкән Йәншишмә образы ла бөгөнгө әҙәбиәттә, айырыуса шиғриәттә, киң сағылып! таба. Мәсем, Һәүбән, Һыуһылыу, Нәркәс, Алпамыша, Ерәнсә сәсән Ҡәһҡәһә, Ҡатил, Зәрҡум һәм башҡа образдар ҙа йыш осрай торғандарҙан:

К үҙ алдыма килә: көнсөл көләр,
Ҡәһҡәһәләр итер тантана...[81]

Был миҫалда "яуыздар, ҡара эслеләр, үлтереүселәр" тигән һүҙҙәр урынына эпостағы яуыз батша - Ҡәһҡәһә исеме алынған.

Һуңғы осорҙа "Урал батыр" эпосына иғтибар тағы ла нығыраҡ арта төштө. Унның тексына ирекле тәржемәләр, комикстар, комментарийҙар күренә башланы. Шағирә Т.Карамышеваның "Асылған серҙәр" дастаны тотошлайы менән "Урал батыр"ға нигеҙләнгән шаҡтай күләмле шиғри әҫәр булыуы менән айырылып тора. Автор мәшһүр эпос йөкмәткеһендәге һәр бер элементтан күсерелгән мәғәнә, сер эҙләп, уларҙы бөгөнгө менән бәйләй. Мәҫәлән, "серле таяҡ - рухтың-йәндең шишмәһе", ә "Урал" хәҙерге Заман образын һынландыра:

Беҙ ҙәме шулай уҡ Уралдың
Тураҡлап өйөр бер дейеүе?
Килбәтһеҙ һәм йәмһеҙ хайуандар -
Боронғо кешенең үҙеме? 8

Йыш ҡына халыҡ фантазияһы тыуҙырған образдарҙы әҙиптәр хәҙерге геройҙарға, замандаш образына гиперболик яңғыраш биреү өсөн файҙалана. Бына, мәҫәлән, Т.Йосоповтоң "Шәкүр менән Ғәзим алышы" әҫәрендәге ике студент шағир хәтерендә "береһе - Урал батыр, береһе - Аҡъял батыр" булып һынлана. Эгәр ҙә Т.Йосопов, "дуҫтары менән шашып туҙғанын" һағынып, студент саҡтарҙың романтикаһын тасуирлау өсөн эпос традицияларына мөрәжәғәт итһә, А.Игебаев тәбиғәт ҡосағында хозурланыуын, туған Һаҡмарына булған һөйөү хистәренең ярһыуын һүрәтләгәндә "Заятүләк һәм Һыуһылыу" эпосындағы картина пәйҙә булыуын раҫлай:

Ә ҡамыштар араһынан
(Бер минутҡа булһа ла):
- Мин Һыуһылыу, - тип,
йылмайып,
Нурҙан тыуған ҡыҙ бала
Ярға килеп сығыр кеүек,
Алтын сәсен туҙғытып...[83]

**Ҡобайыр, әкиәт, йыр, риүәйәт, легенда, көләмәс** кеүек жанр формаларының яҙма әҙәбиәттә ныҡлы урын алыуы - үҙаллы өйрәнелә торған айырым мәсьәлә. Шуларҙың йә халыҡ араһында йөрөгән, йә баҫмаға теркәлгән ҡайһы берҙәренең тулыһынса, бик булмаһа

ҡайһылыр фрагменттары һөйкәлмә ваҡиғалар, лирик сигенеүҙәр рәүешендә проза һәм поэзия әҫәрҙәренә индерелеп ебәрелә.

Айырыуса халыҡ йырҙарын файҙаланыу киң таралған. Үткән быуаттың егерменсе йылдарында башҡорт оҙон йырҙарының тарихына нигеҙләнгән бихисап драма әҫәрҙәре ижад ителде. Х.Ғәбитовтың "Һыйыҡай менән Юлдыҡай", М. Буранғол овтың "Ашҡаҙар", "Ялан Йәркәй", "Шәүрәкәй", "Таштугай" драмалары ваҡытында милли драматургияның иң популяр үрнәктәре була.

Йыр исемдәре, айырым юлдары әҫәрҙәргә атама (Ғ.Хисамовтың "Тамып та ғына ҡала ҡандары", Н.Мусин "Шунда ята батырҙар һөйәге"), әҙәби образдар, образ-символдар сифатында ла йыш осрай. Шиғриәттә бигерәк тә "Урал", "Буранбай", "Тәфтиләү" кеүек мәшһүр тарихи йырҙар, "Зөлхизә", "Таштуғай", "Сәлимәкәй" кеүек мөхәббәт йырҙары йыш телгә алына.

Яралғандыр уның йәнкәйе лә
"Урал" ғына тигән мәшһүр көйҙән. (Ф.Туғыҙбаева, "Яуап көнө"),
АЯҒӨҪТӨ баҫып,
Түбәтәйен һалып,
Бер ҡарт йыр башланы:
"Буранбай".
Бындай йырҙар баҫып йырланыла,

Бындай йырҙар ултырып йырланмай. (Р.Хисаметдинова "Буранбай"). Ә.Үтәбайҙың "Нәфрәт һәйкәле" "Тәфтиләү" йыры тураһында иҫкә төшөрә:

"Тәфтиләү"ҙә тигән халыҡ йырын
Йырламағыҙ бер үк ҡысҡырып.
Йәберенән, башҡорт нәфрәтенән

Еребеҙ бит китер ысҡынып... Күп осраҡта йырҙың исеме генә түгел, ә тарихы ла әҫәр туҡымаһына инеп китә. Т.Йосоповтоң ҙур күләмле "Ҡош тубы" поэмаһының лирик геройы башҡорт иленең үткәндәрен хәтерләгәндә, "Тәфтиләү" йырының һүҙҙәре ишетелгәндәй:

Аҡтарылып илгә яҙҙар килә,
Яҙҙар кеүек ташты һағышым.
Башҡорт телкәйенә, эй, ҡаныҡты,
Түрәләргә төшһөн ҡарғышым.
Баш осонда йәшен йәшнәне лә,
Баш осонда күктәр күкрәне.
Башҡорт улҡайҙарын ҡан илатҡас,
Алтынланды улар күкрәге.
Шаулай ғына урман,
Ҡая сите,
Сәскәләре ҡалҡыр ер кипкәс.
Ташҡайҙарға соҡоп яҙҙым ҡарғыш,
Ейәндәрем уҡыр, мин киткәс...[84]

Шулай ҙа бөгөнгө башҡорт әҙәбиәтендә халыҡ ижадының иң йыш һәм иң күп ҡулланылған өлгөләре - мәҡәлдәр. Мәҡәлдәр боронғо ата-бабаларҙың фәлсәфәһенән, тормоштоң бөтә осраҡтарына ҡарата ла ҡулланып була торған логик һығымталарынан ғибәрәт. Дөрөҫлөгө йә дөрөҫ түгеллеге иҫбатланмай торған, әммә ысын хәҡиҡәт итеп һаналған аксиомалар тип ҡаралырға хаҡлы улар. Мәҡәлдәр теге йәки был фекерҙе, һығымтаны раҫлау йә кире ҡағыу өсөн телмәр
ағышына индерелә. Йыр һүҙҙәре кеүек үк, әйтем-мәҡәлдәр йыш ҡына әҫәр исемдәре итеп тә алына (Я. Хамматов "Бөртөкләп йыйыла алтын"),эпиграфтарға сығарыла һәм текст эсендә лә файҙаланыла.

Тәрән уйланыуҙарға ҡоролған, донъя, йәшәйеш, кешеләр хаҡындағы философик йөкмәткеле шиғырҙар йыш ҡына мәҡәл йөкмәткеһенә нигеҙләнә. Шуға күрә, ғәҙәттә, мәҡәлдәр шиғырҙың тәүге ике юлында килтерелә һәм артабан мәҡәлдең мәғәнәһе асыҡлана, миҫалдар килтерелә, һығымта яһала, аңлатма бирелә. Мәҫәлән, Д. Талхинаның «Йөрәгемдә йырҙар йөрөтәм» (1997) китабындағы ҙур ғына төркөм шиғырҙарына мәҡәлдәрҙе ҡабатлау,

тип тә әйтеп була:

"Бөлөр илгә бөкөрө ул тыуа", - тиҙәр,
Бөлә илем, бөлә,
Үлә телем үлә...
Ҳалҡым яҙмышы
Йөрәкте телә...
«Теле юҡтың-иле юҡ»,-тиҙәр,
Телем әлегә бар...
«Ағасына ҡарата балтаһы», - тиҙәр.
Халҡым миңә ағас төҫлө...
«Атын урлвтҡас, һарайым бикләнгән», - тиҙәр
Ауыҙ-тел ижады ситкә ағыла,
Йырыма-моңома
Сит тауыш һарыла...
«Еренә ҡарай йыланы,
Тауына ҡарай боланы», - тиҙәр.
Йылан да булғым килә,
Болан да булғым килә...

Бер үк мәҡәлдәр төрлө авторҙырҙың шиғырҙарында күсеп йөрөй. Д.Талхина шиғырын «Бөлөр тлгә бөкөрө ул тыуа», тип башлаһа Ф.Туғыҙбаева «Бөлгән илгә» шиғырында:

«Бөлгән илгә бөкөрө бей тыуыр», - ти,
Был әйтемде нисек онотмаҡ?
Бөкөрө бей бит, күкрәгемә баҫып,
Сүл бүреһе кеүек олотмаҡ, - ти.

Әйтергә кәрәк, Ф.Туғыҙбаева мәҡәлдәрҙе сама белеп һәм урынлы ҡллана. Йыш ҡына ҡайһы бер автор мәҡәлдәге дөйөм фекерҙе конкретлаштырып, уны икенсе мәғәнәүи яҫылыҡҡа күсерә лә, шуға таянып, мәҡәлгә ҡапма-ҡаршы һығымта яһай. Мәҫәлән, Н.Нәжмиҙең «Йөрөгән таш, их, шымара, тиҙәр» шиғыры «йөрөгән таш шымара» тигән мәҡәлгә антитеза рәүешендә яҙылған һәм яңы образ тыуҙырылған.

Күп осраҡта авторҙар мәҡәл-әйтем, тапҡыр һүҙҙәрҙең боронғолар, ата-бабалар һүҙе икәнлеген әҫәрҙә билдәләп китеүҙе урынлы һанай.

Ҡайһы бер автор мәҡәлдәрҙе лирик герой ауыҙынан ишеттерә. Миҫал әсән А.Игебаевтың "Сая юламан" ~ Ә.Бикчәнтәевҡа арнамаһынан:

...Гәрсә һинең
һис бер ваҡытта ла,
"Юл ғазабы - гүр ғазабы ул, - тип.
Сырай һытҡан сағың булманы...

Халыҡ ижадының аҫыл гәүһәрҙәре - мәҡәлдәр айырым авторҙарҙың ҡәләме аша яҙма әҙәбиәткә инеп киткәне кеүек, яҙма әҙәбиәттең үҙенән дә дөйөм ҡулланылышҡа ингән мәҡәлдәр, афоризмдар осрай. Аҡмулла ише аҡыл эйәләре һәм һүҙ оҫталарының айырым шиғри юлдары күптән инде мәҡәлдәр сифатында хеҙмәт итә.

Халыҡ мәҡәлдәре нигеҙендә яңыса мәҡәлдәр ижад итеү өлгөһө лә бар бөгөнгө башҡорт әҙәбиәтендә. Замана әйтемдәренең авторы Ғ. Садиҡов үҙенең "Фәһем шишмәһе" (1996) тип аталған китабында ҡыҙыҡлы ғына һынамыштар, тапҡыр һүҙҙәр туплаған. Улар халыҡтың айырым фразеологик берәмектәрен, афоризмдарын, мәҡәл структураһына тап килтереп, артабан үҫтереү, йыш ҡына хатта кире ҡағыуға нигеҙләнгән:

Аҙ һөйләү ~ күпте һөйләй.
Ғүмер үткәнен көтмәйҙәр.
Ғәрләнә белмәгәнде әрләнеү борсомай...
Дан яулап алыуҙан, күтәреп йөрөү ауырыраҡ
Баштың уңыштарҙан элек әйләнеүе хөрт.

Үрҙәге аҙ ғына миҫалдарҙан күренеүенсә лә, күп осраҡта Ғ.Садиҡовтың тапҡыр күҙәтеүҙәре сатирик -юмористик төҫ ала, шулай ҙа сәпкә тура тейҙерә.

Әҙиптәрҙең халыҡтың ауыҙ-тел ижадын яҡшы белеүҙәренән тыш, үҙ ижадтары өсөн уны материал итеп уңышлы ҡулланыуҙары уларҙың милләт менән тығыҙ бәйләнештәренең бер күрһәткес, ижадының халыҡсанлығын раҫлаусы факторҙарҙың береһе булып тора. Әммә быуындарҙан быуындарға ҡәҙерле аманат итеп тапшырыла килгән был бай һәм күп яҡлы сығынаҡҡа йәбешеп ятыу, сикләүһеҙ мөрәжәғәт итеү автор күрһәтелгән индивидуаль ижадты бигүк биҙәмәй. Заманда әҙәбиәт белгесе К.Әхмәтйәнов яҙыуынса, фольклор үрнәктәре артынан самаһыҙ, һуҡырҙарса эйәреү һис тә

халыҡсанлыҡ өлгөһө була алмай.

Дөйөмләштереп әйткәндә, әҙәби эшмәкәрлектең тәүге этабында бик күп факторҙар менән иҫәпләшергә, һайларға, баһаларға, сағыштырып ҡарарға, оҡшатырға ынтылырға, ҡабатламаҫҡа ынтылырға... кәрәк була һәр ижадсыға. Үҙенең «әҙәби проекты» өсөн ул һәр төрлө сығанаҡты – тормош материалын, әҙер әҙәби әҫәрҙәрҙе һәм әҙәбиәт донъяһын, бигерәк тә халыҡтың бөтмәҫ-төкәнмәҫ художестволы һүҙ хазинаһы файҙалана ала. Шулар нигеҙендәме – түгелме, әммә үҙенеке генә булған, берәүҙә лә, бер ҡасан да осрамаған, өр-яңы текст ижад итергә ихтыярлы ул.

## IV бүлек
## Буласаҡ әҫәрҙе ҡағыҙға теркәү.

Теге йәки был әҫәрҙең аңдағы «идеаль проектын» төҙөү тулыһынса һәр ижадсының донъяны танып белеү ҡеүәһенә, эстетик-этик ҡараштарына, логик фекерләү үткерлегенә бәйле. Әҙәби ижад менән шөғөлләнгән конкрет авторҙың шәхси принциптарына һәм эш алымдарына ҡағылышлы бөтә нескәлек-тәр фәндә «яҙыусының ижад лабораторияһы» тигән төшөнсә эсенә һыйҙырыла. Яҙыусыларҙың һәммәһенең үҙ лабораторияһы, үҙ ижад серҙәре бар, әлбиттә, шулай ҙа барлыҡ әҙиптәргә хас шәхсән эш ысулдарынан тыш, эштең башҡарылыу процесына ҡағылышлы дөйөм моменттыр ҙа бар. Әҙәби ижадтың дөйөм һыҙаттары аң кимәлендә уйланып бөткән, инде өлгөрөп еткән тип табылған «әҫәр версяһы» ғәмәлгә ашыра башлауҙа күренә.

Аңдағы "әҙәби проект" - асылда һүҙҙәр теҙмәһе ул. Шуларҙы аҡ ҡағыҙға теркәү, бик ҡатмарлы психологик процестарҙан булып, һәр кем тарафынан төрлөсә башҡарыла.

Кирбескә кирбес һалынып, йорт стеналары күтәрелгән кеүек, һүҙҙәргә һүҙҙәр ялғанып, әҙәби текст тыуа башлай. Тәү ҡарашҡа үрҙәге ике эш тә бик оҡшаш кеүек: тегендә - айырым-айырым кирбестәр, бында -айырым-айырым һүҙҙәр, бергә ҡушаһың да сығаһың. Ҡайһы берәүҙәр, ысынлап та, художестволы тексттың дөйөм мәғәнәүи йөкмәткеһе айырым һүҙҙәрҙең мәғәнәһе теҙмәһенән тора, тип уйлайҙыр ҙа. Йәнәһе, һәр бөтөн нәмә айырым өлөштәр ҡушылмаһынан барлыҡҡа килә лә баһа, шуның кеүек һүҙҙе һүҙгә тоташтыраһың да - вәссәләм!

Әҙәби тексты бар иткән һүҙҙәр "ябай кирбес" түгел шул, улар донъялағы бер предметҡа хас булмаған ғәжәйеп сифаттарға эйә. Нисәмә быуаттар буйына атаҡлы аҡыл эйәләре һүҙ мөғжизәһе хаҡында баш вата, әллә ниндәй фараздар тыуҙыра, әллә күпме фәнни теориялар нигеҙләй. Аң һәм телгә ҡағылышлы процестарға тәрәнерәк үткән һайын, яңынан-яңы фәнни проблемалар килеп баҫа. Бөгөнгө көндә күп кенә фәндәр ялғамында был процестарҙың тәбиғәте хаҡында ҡыҙыу бәхәстәр бара, беҙ уларға туҡталып тормайбыҙ.

Ҡайһы бер тормош ситуацияларында, әлбиттә, өңһөҙ-һүҙһеҙ ҙә нимәнелер белдереп була. Бына К.Дәүләтшинаның "Ырғыҙ" романына күҙ һалайыҡ.

*.„Бына ул, һөйәкле Иөҙөкэйенең бүләге!*

*Ул узенең -кайнар һөйөү хистәрен эсенә йыйған матур бүләктәр ебәргән: бына үткән яҙҙа тәүге осрашканда үҙе ябынған ал кәшмир яулы-ктың ике бөртөк сәскәһе. Ул шуны өҙгән дә, яндырылған шырпының бер башына -кош йөнө бәйләп, ошо ал сәскәләргә ураған. Тимәк, Өскайын төбө бөгөнгөләй уның хәтерендә. Яулы-ктың ике бөртөк сәскәһе -уларҙың шундағы икәүләп осрашыуҙарының билдәһе. Гөлйөҙөм дә, бына ошо янған шырпы һымаҡ, янып, көйөп йәйҙе үткәргән, ләкин осоп барыр әсән, ошо күк күгәрсен -кауырһыны кеүек, еңел -канаттары булмаған. Етмәһә, матурлап төрөп төрлө йөндән ситтәренә ваҡ кына сулпылар төйөп сукланған, йәшел атлас менән -кыҙыл бәрхәттән -корап яһалған тәмәке то-ксайы. Был ҙур вәғәҙә. Киләсәктәге якты бәхеттәр тураһында, кауышыу тураһында йылы өмөтәр бирә торған теләктәр билдәһе...*

*Айбулат был нәмәләрҙе карағанда, уның йөрәге шул тиклем нъгк һукты, ул Гөлйөҙөмдөң үҙен күреп, уның үҙе менән һөйләшкәндәй булды.* [6]

һирәк-мирәк бындай билдәләр ярҙамында хатлашырға була-булыуын, әммә әйберҙәр күрһәтеп аралашыуға, ым-ишараға бөтөнләйгә күсеү - мөмкин булмаған процесс, ул ҡырағайлыҡҡа кире ҡайтыу булыр ине. Бынан өс быуат самаһы элек үк, 1726 йылда бөйөк инглиз сатиригы Д.Свифт үҙенең хәҙер инде бөтә донъяла үлемһеҙгә әйләнгән сәйәхәтсе Гулливер хаҡындағы китабында тап шундай картинаны һүрәтләп киткән. Әҫәр геройы Лапуту тигән илдең биләмәләрендәге Лагадо ҡалаһында Бөйөк академияға барып юлыға.

Төрлө фәндәр менән шөғөлләнгәндәр араһында филология белгестәрен да тап итә ул.

*...Бынан аҙаҡ беҙ тел ғилеме мәктәбенә индек. Унда өс профессор туған телде камиллаштырыуҙың төрлө проекттарын тикшерә ине. Беренсе проект, күп ижекле һүҙҙәрҙе бер ижеклегә ҡалдырып, йәнә ҡылымдарҙы һәм сифат -ҡылымдарҙы ташлап, аралашыу телен ябайлаштырыуҙы тә-ҡдим итә ине. Проект авторы раҫлауынса, донъялыктағы предметтарға бары тик исемдәр генә тап килә, тип дәлилләй.*

*Икенсе проект, ғөмүмән, бөтә һүҙҙәрҙән ваз кисеүҙе күҙ уңында тота. Авторы был проекттың бигерәк тә һаулы-к-ка файҙаһын һәм ваҡытты исрафламауҙа ҡулай икәнлегенә таяна. Күренеп тора: теге йәки был һүҙҙе әйтеү тамаҡҡа һәм үпкәгә көс төшөрә, шулай итеп, беҙҙең ғүмерҙәрҙе ҡыҫҡарта. Ә инде һүҙҙәр бары тик предметтың атамаһы ғына булып тора икән, уйҙарыбыҙҙы һәм теләктәребеҙҙе аңғартыу өсөн үҙ яныбыҙҙа әйберҙәрҙең үҙҙәрен йөрөтөү уңайлыра-к, йәнәһе.*

*Һаулыҡ өсөн ифрат файҙалы бындай уйланмыш, моғайын, киң ҡулланыу табыр ҙа ине. Әммә ҡатын-ҡыҙҙар, томана халыҡ менән бар төптән булырға килешеп, янъял ҡуптарыу менән янаны. Улар үҙҙәренең теленә тулы ирек биреүҙе тәүәккәл талап итте. Хәлбүки, томаналар - фәндең ярышмаҫ дошмандары. Нисек кенә булмаһын, күп кенә ярайһы уҡ уҡымышлы һәм аҡыллы кешеләр яңы ысул әйберҙәр ярҙамында үҙ-ара аралашыуҙы файҙалана. Бындай ысулдың берҙән-бер уңайһыҙлығы шул: аралашыусы кешеләр һөйләшкәндә кәрәк буласаҡ әйберҙәрҙе төйөнсөккә тултырып, яурындарында йөрөтөргә мәжбүр була. Йөк ташыусыларға оҡшап, ауырлыҡтан иңкәйә төшкән ана шундай аҡыл эйәләрен йыш ҡына күрергә насип булды. Урамда осрашҡан саҡта улар, яурындарынан тоҡтарын ергә һалып, уның ауыҙын сисәләр ҙә унан кәрәкле әйберҙәрҙе сығаралар һәм шул рәүешле әңгәмә ҡоралар, аҙаҡтан ҡаралтыларын кире тултырып, бер-береһенең яурынына йөктәрен һалышҡас, хушлашып айырылышалар ине.*

Хәҙер инде шулар урынына һәр кем үҙен ҡуйып ҡараһын...

Әйтергә кәрәк, хәҙерге заманда Д.Свифттың әҙәби уйҙырмаһындағы сатирик "проекттар" ысынбарлыҡҡа әүерелеүе мөмкин, тип раҫлай ғалимдәр. Мәҫәлән, үткән быуаттың етмешенсе йылдарында уҡ академик В.М.Глушков "недалеко то время, когда появятся возможности для передачи грядущим поколениям всего того, что трудно, а подчас и просто невозможно передать словами. Человек тогда сможет биоточно передать не только накопленную им в течение жизни информацию, но и свои эмоции, чувства и многое другое, вплоть до характера своего личного самосознания..." тип яҙып сыҡҡайны.[88] Ысынлап та, гендар инженерияһының асыштары буларак, айырым кешеләрҙең күсермә-клондары донъяға килеүе хаҡында бөгөн бөтә донъя шаулай. Шулай уҡ донъя матбуғатында әле тегендә, әле бында телепатик бәйләнештәргә хатта, имеш, йыһан гуманоидтары менән контактҡа инеүселәр хаҡында хәбәрҙәр күпләп баҫыла. Йәнәһе, уларҙың аралашыу-ҙары уй рәүешендә. Әммә ләкин уй ҙа, фекер ҙә, аң үҙе лә асылда һүҙҙәрҙән ғибәрәт бит.

Был осраҡта һүҙһеҙ генә аңлашыла: кешеләр донъяһында һүҙгә бер ниндәй алмаш юҡ!

Шулай итеп, һүҙ һәм телмәр - бары әҙәми затҡа бирелгән тылсымлы һәм олуғ бүләк ул. Ул - кешенең мәнфәғәтен һәм асылын раҫлаусы ҡеүәтле ҡорал да. Күҙ аша беҙ донъяны нисегерәк аңлауыбыҙҙы белгертәбеҙ, тормош тәжрибәбеҙ менән уртаҡлашабыҙ, уй-кисерештәребеҙҙе, ҡараштарыбыҙҙы еткерәбеҙ, кем менәндер теләһә ниндәй темаға әңгәмә ҡорабыҙ. Ваҡ-төйәкте генә "сәйнәп"туҡталмайбыҙ, яҡын һәм таныш булмаған ҡитғалар, илдәр, халыҡтар, уҡыған һәм уҡылмаған китаптар хаҡында ла иркен гәпләшәбеҙ. Бөтөнләй күп күрмәгән, ҡолаҡ ишетмәгән мәсьәләләрҙе лә уртаға һалабыҙ, кәрәкһә - бәхәсләшәбеҙ, кәрәкһә -көлдөрәбеҙ. Илатҡан да, көлдөргән дә, бөлдөргән дә тел бит ул, тигән әйтем нәҡ ошо фекерҙе ҡеүәтләй. Телдең ошо үҙенсәлектәрен яҡшы белеп файҙаланыуеы һәм һүҙ ҡоралы менән иң оҫта эш итеүселәр булып иң тәүге сафта әҙиптәр тора.

### Әҙәби һынландырыу төрҙәре

Һәр ҡәләм оҫтаһы, милли телдең барлыҡ мөмкинлектәрен эшкә егеп, әйләнә-тирәләге ысынбарлыҡты китап уҡыусыһының күҙ алдына барлыҡ буяуҙары, хәрәкәт-хәлдәре менән йәнле картина итеп баҫтырырға ынтыла. Ошо ижади процесты К.Әхмәтйәнов үҙенең

"Әҙәбиәт теорияһы"нда "художестволы һынландырыу" тип атап, уның өс төрөн һанап үтә.[89] Ул яҙғанса, тасуирлау - әйбер, күренештәрҙең тышҡы билдәләрен һынландырыу, һүрәтләү иһә - тормош ваҡиғаларын авторҙың үҙ тойғолары, уй-фекерҙәре аша һынландырыу, хикәйәләү - кешеләрҙең эш-хәрәкәттәрен, үҙ-ара мөнәсәбәттәрен һынландырыу ул.

Бында бер аҙ асыҡлыҡ талап ителә. Алда яҙылғанса, ысынбарлыҡ төрлө саралар менән (буяу, тауыш, хәрәкәт һ.б.) художестволы һынландырылырға мөмкин, шуға ла был төшөнсә барлыҡ сәнғәт әҫәрҙәрен ижад итеү процесының дөйөм атамаһы булараҡ ҡулай. Сәнғәтең бер төрө тиеп ҡаралһа ла, һүҙ сәнғәтенең башҡа төрҙәр менән сағыштырып булмай торған үҙенсәлектәре бар. Улар, әлбиттә, һүҙ феноменына бәйле. Белеүебеҙсә, кеше аңында ысынбарлыҡ ике формала: а) конкрет образ-күсермә рәүешендә, б) абстракт шартлы өндәр йыйылмаһы - һүҙҙәр рәүешендә нығына. Тәүгеһе, мәҫәлән, өҫтәл - фотолағы өҫтәл, сәскә сәскә булып аңда һынлана йә кәүҙәләнә ала, ә бына кешенең эске донъяһына ҡағылышлы, конкрет образы булмаған "уй, хыял, һөйөү, йөрәге ҡупты, хистәре ҡайнаны" тигән хәл-торошто һынландырып буламы? Юҡ, ул хаҡта тик һүҙҙәр ярҙамында һөйләп кенә йә яҙып аңлатырға була. Шуға күрә лә һүҙҙәр ярҙамында ысынбарлыҡтың художестволы картинаһын тыуҙырыуҙы анығыраҡ төшөнсә менән **"ысынбарлыҡты әҙәби һынландырыу"** тип атау урынлы булыр.

Бер ыңғайҙан "тасуирлау" һәм "һүрәтләү" тигән төшөнсәләргә лә күҙ һалайыҡ. Улар икеһе лә бер үк һүҙҙән, ғәрәп телендәге "саууара" тигән ҡылымдан (рисовать, иллюстрировать, изображать, описывать, представлять и т.д.) яһалған һәм асылда бер үк мәғәнәне белдерә.[90] Тимәк, башҡорт телендәге "һынландырыу, кәүҙәләндереү" ул төшөнсәләрҙең синонимы булып сыға. Ысынбарлыҡтың уйҙағы картинаһын һүҙ ярҙамында тыуҙырыуҙы үрҙәге дүрт һүҙ (башҡортса- һынландырыу, кәүҙәләндереү, ғәрәпсә - тасуирлау, һ(с)үрәтләү) менән дә атарға мөмкин, шулар араһынан **"һүрәтләү"** һүҙе термин булараҡ йышыраҡ ҡулланыла. Ошоно иҫәпкә алып, ысынбарлыҡты әҙәби һынландырыуҙың бер төрөн һүрәтләү (русса "описание" мәғәнәһендә) тип атарға кәрәктер.

Һүрәтләүҙең төп объекты - ниндәйҙер статик күренеш, айырым "предмет", мәҫәлән, тәбиғәт күренеше, кеше һ.б. Ижадсы һүҙҙәр ярҙамында шул объекттың тышҡы күренешен, сифаттарын, үҙенсәлектәрен һүрәтләй, уларҙы ысынбарлыҡтағы кеүек итеп күҙ алдына баҫтырырға ынтыла. Бәр һүрәтләү конкрет урын (место) менән бәйле. Шул яҙыусы уйлап сығарған шартлы художестволы урында барасаҡ хәл-ваҡиғаларҙа ҡатнашыусы персонаждар, тәбиғәт, йорт-йыһаз, айырым предметтар айырыуса ентекле һүрәтләнә. Миҫал әсән З.Биишеваның "Мөхәббәт һәм нәфрәт" хикәйәтенә күҙ һалайыҡ. Автор һөйләйәсәк ваҡиғала ҡатнашҡан кешеләр төйәге түбәндәгесә һынландырыла:

.„*Уралдан бик алыҫта, кук диңгеҙ буйында йәшәгән улар. Диңгеҙҙең тымы-к бер - ҡултығында, ҡарлуғас оялары шикелле, балсъпстан һылап, яланғас ҡая таштарға йәбештереп эшләнгән ер өйҙәрҙә ғумер иткәндәр. Эйе, бик бейектә, -ҡарағоштар ғына оя ҡорған осло -ҡаялар араһында, кескәй генә балыҡсылар ауылында...*[91]

Әҙиптәр күп кенә әҫәрҙәрен, һүҙ төркөмдәренән -исем, сифат, һандарҙы ҡулланып, йыл миҙгелдәрен, тәбиғәт торошон, ауыл-ҡала күренештәрен, геройҙарҙың портретын, уларҙың уй-кисерештәрен, хәл-торошон тасуирлауҙан башлай. Р.Солтангәрәевтың "Оло юлдың туҙаны" хикәйәһендә сюжет ебен тағатыу төп геройҙың психологик хәл-торошонан алып кителә:

*...Өсөнсө көн инде төшөмдә ошо йырҙы йырлайым. Матур, моңло итеп йырлайым. Йырымдан шул тиклем йәнгә рәхәт, әйтерһең, йылы, аҡ: томанға төрөнөп ятҡанмын. Юҡ:, төрөнмәгәнмен, шул томанға -ҡушылып ирегәнмен дә -ҡайҙалыр бәуеләм, осам. Аҡрын ғына, талғын ғына осам. Донъя шул тиклем матур, ә уҙем шундай йәшмен, көслөмөн, дәртлемен, һылыумын...*[92]

Сюжет ағышында теге йәки был геройҙың алғы планға сығыуы, йә иһә тәүге осрашыуҙа уҡыусы иғтибарын йүнәлтеү маҡсатында, ғәҙәттә, уның портреты, холҡо-фиғылы, үҙен тотошо ентекле һүрәтләүҙе талап итә. Күп осраҡта быңдай һүрәтләмәләр, әҫәрҙәге бүтән персонаж тарафынан бирелеп, образдарҙың булмышын характерлауҙа мөһим роль уйнай. Н.Мусиндың "Шунда ята батыр һөйәге" романында Алдарбайға уның атаһы Исәкәй тархан күҙе менән ҡарай уҡыусы:

..*Артыҡ ҡапаҡламай эстән генә ярата ошо улын Исәкәй. Ана бит, көсө аң-ҡып*

*торған кәүҙәһен ҡатынҡы тотоп, эйәрендә нисегерәк ултыра. Ҡамсат бурке күтәрелә төшөп арт-ҡа шыуған, -ҡара ҡаштары -ҡарсыға -ҡанатындай сөйөлгән, сөм-пкара һыҙма мыйығы йәш, сағыу йөҙөнә йәм өҫтәп тора. Уның йылғырлығы, сапсанлығы барлыҡ торошһынышында, төҫ-киәфәтендә бер ҡарауҙа күҙгә бәрелә...*[93]

Хикәйәләү иһә - динамикаға, процестарға ҡағылышлы төшөнсә. Эҙмә-эҙлекле, бер-береһен өҙлөкһөҙ алыштырып, шаҡтай оҙайлы дауам иткән хәл-ваҡиғаларҙың, предметтарҙың үҙенсәлекле "хәрәкәте" хикәйәләнә. Барлыҡ эш-хәрәкәттәр билдәле ваҡыт ағышында башҡарыла, шуға ла хикәйәләүҙә ҡылым һәм рәүеш ҙур роль уйнай. Һүрәтләүҙә художестволы урын категорияһы өҫтөнлөк итһә, хикәйәләүҙә яҙыусы фантазияһы билдәләгән "художестволы ваҡыт" төшөнсәһе беренсе планға сыға.

Ҡайһы бер ғалимдар, мәҫәлән, Л.И.Чикина, уй-фекерҙе ҡағыҙға төшөрөүҙең тағы бер төрөн – **фекер йөрөтөү (рассуждение)** формаһын айырып ҡарай. [4]

Ундайҙарҙың йөкмәтке сиктәрен билдәләү - ярайһы уҡ ҡатмарлы мәсьәлә. Һәр хәлдә әҙәби текстағы һүрәтләнгән объекттарҙың үҙ-ара бәйләнештәрен асыҡлау, хәл-ваҡиғаларҙың сиктәрен тикшереү, һөҙөмтә-һығымталар яһау, килеп тыуған проблемаларҙы аңлау-төшөнөү кеүек логик фекерләү закондарына нигеҙләнгән фрагменттар ҙа була. Бында башлыса сәбәпте, маҡсатты белдергән лексика ҙур урын ала. Фекер йөрөтөү әҙәби персонаждарҙан айырылғыһыҙ, улар менән бергә әҫәр буйынса "хәрәкәт" итә һәм әҙәби текста тәғәйен генә урыны юҡ.

*...һүҙ -ҡыҙғандан-ҡыҙа барған мәлендә, йәш кенә булыуынан тартынып тормайынса, Салауат урынынан -ҡуҙғала бирҙе лә, узенең һөйләргә теләуен белдерер өсөн, йыйын ғәҙәте буйынса, бөкләп тотгкан тамсыһын алдына шап иттереп һалды. Ниҙер әйтер. Ҡарттары ла, йәштәре лә уға батты. Әммә уның өлкәндәр -ҡаршыһында һүҙ әйтергә баҙнат итеуен һис кем ғәйеп итмәне. Ҡайҙа дау сыға, -ҡайҙа ғауға -ҡуба -йәшмен тимәй, алға сыға, һиллек яйын таба. Бында ла хаты бар...*

Ғ.Ибраһимов, йыйында ҡатнашҡан һәр берәүҙең уй-фекер ағышын берләштереп, күмәк фекер рәүешендә яҙып киткән.

Яҙыусы әҙәби әҫәр тыуҙырыу процесында ҡағыҙға фекер теркәүҙең үрҙә һаналған өс төрөн башҡа-башҡа айырмай, ә образ тыуҙырыу әсән, самаһын һәм нисбәтен белеп, бергә уҡмаштыра. Әҙәби текста, бер яҡтан, статика ла, хәрәкәт тә, икенсе яҡтан, һүрәтләү ҙә, һынландырыу ҙа, өсөнсөнән, фекер йөрөтөү ҙә, экспрессия ла органик берләшә. Тимәк, һүҙ сәнғәттең барлыҡ төрҙәрен ижад иткәндә ҡулланылған художество сараларының һәммәһен дә алыштыра ала.

## Лексик саралар

Телдең ҡатмарлы тәбиғәтен асыҡлау юлында меңдәрсә хеҙмәттәр яҙылып, тиҫтәләрсә фән йүнәлештәре формалашҡан. Беҙҙең маҡсат шуларҙы бәйнә-бәйнә ҡабатлау түгел, ә яҙыусылыҡ эшмәкәрлеген аныҡлау тәңгәлендә кәрәк булған хәтле дөйөм ҡараш ташлау.

Беренсенән, һүҙҙәр берәй урында күҙгә күренеп ятҡан ниндәйҙер әйберҙәр йә күренештәр өйөмө түгел, шуға күрә уны бер нисек тә кеше аңынан айырып ҡарарға ярамай. Иң тәүге һүҙҙәрҙе кем башлап әйткән һәм ни әсән тап шулай әйткән, тигән һорауҙарға яуап эҙләүҙән мәғәнә юҡ. Нисек кенә булмаһын, әйләнә-тирәләге предметтарға, күренештәргә баш-ҡортса тәү башлап исем ҡушыусы боронғо ата-бабаларыбыҙға беҙ мәңге рәхмәт уҡырға бурыслыбыҙ. Улар атаған тәүһүҙҙәр, телебеҙҙең серемәҫ нигеҙе булып, уның тотороҡлолоғон тәьмин итә һәм яңы һүҙҙәр яһауға база булып хеҙмәт итә. Мәҫәлән, тәүһүҙ "ел"дән - елпеүес, елбәҙәк, еләҫ, елкән, елғыуар, елеү һ.б. яһалған. Ҡайһы бер осраҡта бер үк һүҙ менән төрлө-төрлө күренеште лә атап ебәргәндәр: ат - хайуан, ат - исем, ат - ҡылым. Уларҙы **омоним** тип, ә мәғәнәүи яҡтан яҡын, әммә әйтелештәре башҡаны - **синоним** тип йөрөтәләр фәндә.

Кешеләр үҙе йәшәгән донъяны танып-белеүҙе, йәғни өйрәнеүҙе уның сиктәрен билдәләүҙән баш:лаған, тип иҫәпләй ҡайһы бер ғалимдар. Ваҡыт сиктәрен, мәҫәлән, "көн-төн" тигән бинар ҡапма-ҡаршылыҡ, ә арауыҡ сиктәрен - "ал-арт" йә иһә "аҫ-өҫ" тигән ҡаршы ҡуйыуҙар менән тамғаланған ата-бабаларыбыҙ. Фәндә ундай ҡапма-ҡаршылыҡтарҙы атау өсөн **антоним** тигән термин ҡабул ителгән.

Ғалимдар билдәләүенсә,[96] теге йәки был һүҙҙең булыу-булмауы кешеләрҙең практик эшмәкәрлеге, көндәлек социаль тәжрибәһе менән бәйле. Шул нигеҙҙә
айырым төбәктәрҙә конкрет тарихи осорҙарҙа йәшәгән әҙәми заттарҙың төбәк телдәре (диалекттар), дөйөм халыҡ кимәлендә милли тел ойоша. Ҡыҫҡаһы, **һәр бер тел — ерле һәм милли күренеш,** ундағы һәр һүҙҙә йәки һүҙбәйләнештә теге йәки был халыҡтың донъяны танып белеү, ысынбарлыҡты ҡабул итеү (восприятие)
үҙенсәлектәре сағыла. Мәҫәлән, урыҫ халҡында ҡыҙҙарҙы маҡтау уның буй-һынының матурлығын билдәләүгә ҡорола: "стройна как белая береза". Башҡортта "ҡайын һымаҡ зифа буйлы ҡыҙ" тиеү бөтөнләй мәғәнәһеҙ йә иһә мыҫҡыл итеү һымаҡ яңғырар ине. Ҡайын ул халыҡта "ҡайғы, һағыш" билдәһе рәүешендә ныҒынған, ә ҡыҙҙарҙы маҡтау бүтән ағасҡа бәйле - "буйы зифа тал кеүек". Бының ише миҫалдар бихисап. Теге йәки был халыҡтың үҙенә генә хас фекерләү, донъяны аңлау-аңлатыу үҙенсәлектәренең, милли характерҙың һәм психологияның сағылышы булараҡ, айырым һүҙбәйләнештәр, хатта тотош һөйләмдәр тотороҡло форма ала. Мәҫәлән, "һеркәһе һыу күтәрмәй" тигән һөйләм ғәмәлдә бер һүҙҙе - "үсексән" тигән һүҙҙе алмаштыра- Бары башҡорт кешеһе генә уның ысын мәғәнәһен аңлай, башҡаларға ул мәғлүм түгел, тәржемә итеп тә булмай, шуға ла бындай берәмектәрҙе халыҡтың "йәшерен теле" тип тә атарға була. Фәндә улар фразеологизм йә идиома тип йөрөтөлә. Әҫәрҙә милли колорит тыуҙырыуҙың иң ҡулай саралары булараҡ, идиомалар әҙәби геройҙарҙың телмәрендә йыш осрай.

Художестволы һүҙ ярҙамында, һуңғы осорҙа гуманитар фәндәр әлкәһендә нығынып барған төшөнсә менән әйтһәк, "национальная картина (модель, образ) мира ~ донъяның милли картинаһы (моделе, образы)" -һынландырыла.

Милли телдәрҙең һәр ҡайһыһы үҙ-ара контакттар йоғонтоһона күпмелер бирешә торған асыҡ системанан ғибәрәт. Бәр тел айырым бер халыҡтың үҙ-ара аралашыу ихтыяжын тулыһынса тәьмин итә. Үҙҙәренең генә эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә тыуған продукцияға, милли тел ҡанундарынан сығып, яңы һүҙҙәр, *яңы* төшөнсәләр уйлап табыла. Әммә бер генә халыҡ та үҙ-үҙенә генә бикләнеп көн итә алмай, тарихтың билдәле баҫҡысында күрше һәм бүтән халыҡтар менән алыш-биреш кеүек бәйләнештәргә инергә мәжбүр. Ситтән ташылған донъя кәрәк-яраҡтарына ҡушылып, уларҙың атамалары ла килә. Элегерәк халыҡ уларҙы үҙ теленә яраҡлаштырып та үҙләштер-гән: самовар - самауыр, перчатка - бирсәткә, скамья — эскәмйә.

Куңғы осорҙа информацион процестарҙың косәйеүе, дәүләт-ара мөнәсәбәттәрҙең тығыҙайыуы, Рәсәйҙә "ҡырағай" баҙар шарттарының уңайлылығы сит илдәр менән төрлө әлкәләгә, бигерәк тә сауҙа хеҙмәттәшлеген үтә йәнләндерҙе. Импорт тауар менән уларҙың исемдәре лә илде баҫты: аяҡта - кроссовка, билдән аҫта - джинсы, өҫтә - футболка, башта - бейсболка, ҡулда - барсетка... Улар шул тиклем күп, төрлө һәм сезон һайын тиҙ алмашына, туған телгә яраҡлаштырып өлгөрөрлөк түгел. Указ-приказдар менән был процесты көйләүе ауыр: кем яңы тауар етештерә, шул исемен дә ҡуша. Туранан-тура, үҙгәртелмәйенсә ҡулланылышҡа ингән сит тел һүҙҙәрен ғалимдар **варваризм** тип белеп атаған, сөнки артыҡ күбәйеп киткәндә улар, сит баҫҡынсылар кеүек, милли телде бысратып, юҡҡа сығарыу зары мөмкин. Яҙыусылар, ғәҙәттә, варваризмдар-ҙы әҫәренә сатирик төҫ биреү әсән файҙалана. Б.Исҡужиндың "Халыҡ-ара шиғыр" тигән шаярыу ы быға иң сағыу миҫал:

Губки алые,
Глазахыялые.
Сәстәр - макарон яуы,
Персиянан бүяуы.
Дуҫтар әйтә:
"Шерше *ля* фам!"
Доннер ваттер!
Ул бит - яфам...[97]

Икенсенән, һүҙ - **социаль күренеш.** Йәшәү рәүеше, эшмәкәрлек шарттары, үҙҙәрен ҡыҙыҡһындырған шөғөлдәре, психологик хәләттәре һәм башҡалар буйынса илдәге халыҡ массалары - социумдар үҙ-ара тығыҙ бәйләнештә көн күрә. Шул
нигеҙҙә тотороҡло социаль төркөмдәр, социаль ҡатламдар ойоша, милли тел сиктәрендә, әммә уларҙы ғына хеҙмәтлән-дергән махсус тел формалаша. Айырым
профессия буйынса берләшкән төркөмдәр ҡулланылышында йөрөгән һүҙҙәр,

һүҙбәйләнештәр **профессионализмдар** тип атала. Яҙыусы улар-ҙы теге йәки был сферала хәрәкәт иткән әҙәби образдарҙы

һүрәтләүҙә актив файҙалана. Шулай уҡ ҡайһы бер социаль төркөмдәрҙең үҙҙәренә генә аңлашылған "йәшерен" телдәре - **жаргон, арго** формалашырға мөмкин. Һуңғы осорҙа күбәйеп киткән детектив тип йөрөтөлгән әҫәрҙәрҙә "бурҙар теле", төрмә жаргоны бик күп урынды ала. Йәнә лә хәҙерге быуын йәштәре-нең үҙенә генә хас һөйләшен төҫмөрләргә мөмкин. Уны үрҙәге француз һүҙҙәренә яҡын мәғәнәләге инглиз һүҙе менән **"йәштәр сленгы" (молодежный сленг) тип атайҙар.**

Өсөнсөнән, **һүҙҙәр — тарихи күренеш.**

Улар ҙа билдәле осорҙарҙа "тыуа" һәм ниндәйҙер объектив-субъектив сәбәптәр арҡаһында тарихи шарттар үҙгәреү менән "үлергә" йәки ҡулланылыштан төшөп ҡалырға мөмкин. Белеүебеҙсә, айырым һүҙҙәр генә түгел, хатта тарихи үҫештә "үлеп ҡалған (мертвые)" телдәр бар. Иң мөһиме: милли тел күренештәре бик тотороҡло, шарттар үҙгәргән хәлдә лә, оҙайлы ваҡыттар һуҙымында тел үҙенсәлектәре һаҡлана, тәбиғи рәүештә быуындан-быуынға тапшырыла килә. Йәшәйеш үҙгәреп, **яңы һүҙҙәр — неологизмдар** барлыҡҡа килһә лә, **иҫке-л әрен — архаизмдарҙы** улар юҡҡа сығармай, ә бары булғанына өҫтәлә генә бара.

Ул тел хазинаһы ҡайҙа һаҡлана һуң?

Халыҡтың хәтер һандығында: ауыҙ-тел ижады үрнәктә-рендә, яҙма сығанаҡтарҙа, әҙәби әҫәрҙәрҙә. Башҡорт теленең ике томлыҡ аңлатмалы һүҙлегендә (1993) 55 мең һүҙ һәм фразеологик берәмек теркәлгән, бында иһә башҡорт теленең барлыҡ байлығы ла инеп бөткән тигән һүҙ түгел әле. Йөҙҙәрсә йыл дауамында халыҡтың һөйләшендә туплана килгән барлыҡ һүҙҙәрҙең һәр береһен онотмайынса хәтерҙә һаҡлауға мохтаж-лыҡ та юҡ, мөмкин дә түгел. Фәнни тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһе шундай: кеше яҡынса **10-16** мең тирәһе һүҙҙе иҫендә тота һәм үҙ телмәрендә ҡуллана ала икән.[98] Кемдер, мәҫәлән, һүҙ оҫталары - әҙиптәр хәтерендә күберәкте йөрөтәүе ихтимал. Һүҙ байлығын белеү халыҡтың тормошон, рухи донъяһын тулыраҡ, теүәлерәк һәм сағыуыраҡ һүрәтләүгә ҙур мөмкинлектәр аса.

## Ассоциатив һүрәтләү саралары

"Хәтер нимә ул, һүҙҙәр уның ҡайһы "мөйөшөндә" һаҡлана, нисек итеп сағыштырмаса аҙ ғына һүҙҙәр менән тормоштоң картиналарын, төпһөҙ һәм сикһеҙ ғаләмдең барлыҡ серҙәрен бер ниндәй ҡыйынлыҡһыҙ белдерергә мөмкин?" тигән һорауҙарға быуаттар буйына яуап эҙләй кешелек. Егерменсе быуат аҙағына тиклем яуапты фән бары уй менән теоретик планда асыҡларға тырышһа, хәҙерге фәнни-техник ҡаҙаныштар кеше мейеһен приборҙар ярҙамында эксперименталь өйрәнеүҙәргә юл асты. Һөҙөмтәлә һүҙҙәрҙең хәтерҙә нисек һаҡланыуы күпмелер аныҡлана башланы, тиергә булалыр.

Атаҡлы совет нейропсихологы А.Р.Лурияның "Язык и сознание" хеҙмәтендә яҙылыуынса, "каждое слово возбуждает целую сложную систему связей, являясь центром целой семантической сети..."[99] Ҡыҫҡаһы, һәр һүҙ кеше аңында үҙ-ара мәғәнәүи бәйләнештәге башҡа һүҙҙәр уратыуында, бер шәлкем рәүешендә йәшәй булып сыға. Ҡайһы бер ғалимдар, мәҫәлән, А.Н.Лук, һүҙҙәрҙең генә түгел, ә ғөмүмән, ысынбарлыҡ образдарының төшөнсәләр менән бергә ассоциатив бәйләнештәр системаһы рәүешендә һаҡланыуын раҫлай: "Ассоциированные между собой образы и понятия - та конкретная форма, в которой они сохраняются в памяти... Простые опыты указывают на тот факт, что в памяти нормального человека слова группируются в "гроздья", в ассоциативные заготовки, которые используются в процессе восприятия и, по-видимому, также и мышления".[100] Эксперименттар һөҙөмтәһендә шул асыҡлана: бына-быуа ҡулланыуҙы көтөп ятҡан "ассоциатив заготовка ~ әҙерләнмәнең һәр ҡайһыһы башлыса тиҫтәләгән һүҙҙәр төркөмөнән тора икән. [101] Мәҫәлән, "йоҡо" һүҙе "оса, баҫа, килә, ҡаса, китә, төйөлә" кеүек ҡылымдар менән генә тотороҡло бәйләнештә, "Йоҡо йыуына, көлә, йүгерә" тип әйтеү бөтөнләй мәғәнәһеҙ яңғырай. Сифатты, рәүеште, күләм-дәрәжәне сағылдырыу йәһәтенән дә был һүҙҙең үҙ "дуҫтары" бар: йоҡо тәмле, татлы, ҡаты, насар, оҙон һ.б. "Күңелле йоҡо, йылы йоҡо, бәләкәй йоҡо" тигән һүҙбәйләнештәр грамматика ҡанундары буйынса дөрөҫ һымаҡ, әммә тарихи үҫештә шундай һүҙбәйләнештәр нығынмаған. Улар теге йәки был һүҙҙәрҙең осраҡлы

механик ҡушылмаһы ғына була һәм бер ниндәй мәғәнә белдерә алмай, шуға ла аралашыу-аңлашыу әсән яраҡһыҙ булып сыға.

Ғалим раҫлауынса, оҙайлы ваҡыттар һуҙымында милли телдә формалашҡан ошондай "әҙерләнмәләрҙең" булмауы фекерләү процесының ныҡлы боҙолоу ына, һөҙөмтәлә аҡыл эшмәкәрлегенең тейешле дәрәжәлә башҡарылмауына килтерә. Әйләнә-тирәләге ысынбарлыҡтың телгә күсермәһе булараҡ, һәр һүҙ тирәһенә яҡынса унлап һүҙ туплана һәм улар үҙ-ара мәғәнәүи яҡтан тығыҙ бәйләнештә тора. Бер үк телдә аралашҡан һәр берәүҙең хәтерендә ғәмәлдә бер үк төрлө "әҙерләнмәләр" һаҡланғанлыҡтан, кешеләрҙең бер-береһе менән аралашыуҙары артыҡ ҡыйынлыҡ тыуҙырмай. Һүҙҙәрҙең ғәҙәтилеге тигәндә, тап ошоларҙы к үҙ уңында тоторға кәрәктер.

Яҙыусы ла үҙенең туған телендәге барлыҡ ассоциатив әҙерләнмәләрҙе бала сағынан уҡ аңына һеңдерә һәм үҙ ижадында иркен ҡуллана.

Шулай ҙа оҫта яҙыусы быныҡ менән генә ҡәнәғәтләнмәй. Китап уҡыусыһының иғтибарын йәлеп итеп, зиһенен балҡытып ебәрер һәм әҫәргә ылыҡтырыр өсөн тәжрибәле автор, һүҙҙе ғәҙәти булмаған йәки логикаға һыймаған бәйләнешкә индереп, әҙәби образ тыуҙырыуға өлгәшә. Мәҫәлән, көндәлек тормошта элек аяҡ кейемдәре күндән тегелгән. Әкиәтсе Ш.Перро иһә гөлсәр башмаҡтар кейҙерә үҙенең Золушкаһына. Етем ҡыҙ яҙмышының бәхетле финалын тап шул туфли хәл итә лә. К.Әхмәтйәновса әйтһәк, һүҙҙе ғәҙәти булмаған бәйләнештәргә индереү **"һүҙ уйнатыу"** була һәм ул уҡыусы өсөн **көтөлмәгәнлек эффекты** тыуҙыра.

Телдәге һүҙҙәрҙең күп өлөшө үҙаллы мәғәнәгә эйә булһа ла, телмәрҙә һәр береһе айырым-айырым ҡулланылмай, башҡа һүҙҙәр менән тығыҙ бәйләнешкә инә. Ысынбарлыҡта бер нисек тә яҡынлығы булмаған, мәҫәлән, сәскә (цветок) һәм атыу (стрелять) кеүек һүҙҙәр үҙ-ара бәйләнешкә инеү менән яңы төшөнсә тыуҙыра: сәскә атыу (расцвести). Һөйләү һәм ботаника фәне телендә, был һүҙбәйләнеш тотороҡло төҫ алып, айырым үҫемлектәргә ҡағылышлы процесс атамаһы булараҡ нығынған: гөл сәскә атты; муйыл, алмағас сәскә атты һ.б.

Үҫемлектәр донъяһына бәйле был төшөнсәгә -һүҙбәйлә-нешкә мәғәнәүи яҡтан икенсе әлкәгә ҡағылышлы күренештең атамаһын өҫтәү тағы ла башҡа - өсөнсө типтағы мәғәнә тыуҙыра: йәшлегем сәскә атты, һөйөүем сәскә атты. Был осраҡта "сәскә атыу" ниндәйҙер хис-тойғонон, хәл-тороштоң, процестың, ынғаймы-киреме икәнлегенә ҡарамаҫтан, иң юғары кульминацион фазаһының атамаһы булып яңғырай: еңел сәнәғәттең сәскә атыуы, художестволы әҙәбиәттең сәскә атыуы, енәйәтселектең сәскә атыуы... **Сәскә атыу** тигәндә, быларҙан башҡа, был төшөнсәгә һис бер бәйләнеше булмаған "сәскә (к волосу) атыу (кидать, бросить)" тигән омонимик һүҙбәй-ләнеш тә иҫкә төшә.

Кеше үҙен уратып алған донъяның һәр күренешенә, һәр әйбергә айырым һүҙҙәрҙән исем ҡушҡан. Ьүҙҙәр - өндәрҙең билдәле бер тәртиптәге теҙмәһе, кеше һәр предметҡа беркетелгән шартлы яңғырама. Шундай уҡ ихласлыҡ менән кеше, әгәр теләһә, бер һүҙҙе икенсеһе менән алмаштырып бүтән күренешкә лә күсерә ала. Һүҙҙәр, яңы һүҙҙәр менән бәйләнешкә инеп, ана шулай яңынан-яңы мәғәнә-төшөнсәләр барлыҡҡа килтереү үҙенсәлегенә эйә. Фән теле менән әйткәндә, **һүҙҙең күп мәғәнәлелеге** телдә яңынан-яңы, яңыларынан яңы төшөнсәләр уйлап табыуҙы алмаштыра: булған һүҙҙәрҙе төрлөсә ҡушарлайһың да - бына һиңә яңы төшөнсә!

Әҙәби текста һеҙҙең ҡайһы мәғәнәһе күҙ уңында тотола икәнен күп осраҡта ҡапыл ғына билдәләп тә булмай. Бына, мәҫәлән, шундай һөйләм: "Өҫтәлдә яткан беләҙеккә айыу майы һөрткәндәр". Уҡығас та кемдер майға буялып ятҡан беләҙекте күҙ алдына килтерер. Ә икенсе берәү беләҙектең юға лыу ын аңлар. Тәү ҡарашҡа икеһе лә дөрөҫ, әммә уларҙың мәғәнәләре ҡырҡа айырыла: ҡайһыһы хаҡында яҙылыуы тик тексты артабан уҡығас ҡына аңлашыла. Шулай итеп, һүҙҙең йәки һүҙҙе алмаштырып килгән тотороҡло һүҙбәйләнештәрҙең теге йәки был мәғәнәһе башҡа һүҙҙәр уратымында, йәғни контекста ғына, тәьмин ителә. Текста һүҙҙәрҙең тура мәғәнәһе материаль кәүҙәләнә, уҡый белгән һәр берәүгә лә ул аңлашыла. Уны ҡарар күҙгә күренгән беренсе яҫылыҡ (уровень) тип билдәләйек.

Күҙ һәм һүҙбәйләнештәрҙең күсмә мәғәнәһе икенсе яҫылыҡты - контексты тыуҙыра. Ундағы мәғәнә төптәрәк ята. Телде яҡшы үҙләштермәгән, халыҡтың "йәшерен" телендәге "әҙерләнмәләр-ҙе" белмәгән кешегә контексты яҡшы аңлау әсән шаҡтай күп көс һалырға кәрәк була. Күсмә мәғәнәлә ҡулланылған һүҙҙәрҙе боронғо гректар, **троп** тип атап, телмәрҙең

мәғәнәһен икенсе юҫыҡҡа бороп, фекерҙе үҙгәртеп ебәрә торған һүрәтләү сараһы тип ҡараған, һуңғараҡ бындай һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәрҙең ике-өс мәғәнәне бергә берләштерә алыу сифатын иҫәпкә алып, латин телендәге "ассоциация-берләшмә" тигән һүҙҙе ҡушҡандар һәм **ассоциатив һүрәтләү сараһы** тип йөрөтә башлағандар. Хәҙерге әҙәбиәт ғилемендә терминдарҙың икеһе лә берҙәй тигеҙ ҡулланыла.

Һүҙҙәрҙең бүтән һүҙҙәр менән ғәҙәти булмаған бәйләнешкә инеү-инмәүе кеше ихтыярына бәйле. Әҙәби ижад менән шөғөлләнеүселәр уларҙың мәғәнәләрен үҙҙәре белгәнсә бора, үҙгәртә, үҙенсә яңы мәғәнәләр эҙләй. Ғәҙәти булмаған өсөн дә ул һүҙбәйләнеш уҡыусының иғтибарын йәлеп итә. Уҡыу барышын яйлатып, уның айышына төшөнөргә тырышалар, фекерҙе тәрәнерәк "ҡаҙырға" мәжбүр булалар. Тап шулайтып, автор уҡыусының уйланыуына, һүрәтләнмеш картинанан күберәкте күҙаллауына ирешә.

Ижадсы ни тиклем һәләтле һәм һүҙгә маһир булмаһын, һәр бер һүҙҙе кинәт башына килгән теләһә ниндәй осраҡлы һүҙ менән ҡушарлай алмай. Һүҙҙең мәғәнәһен күсереүҙең барлыҡ телдәр өсөн дөйөм, йәғни бер үк формалары, сиктәре һәм төрҙәре бар. Мәғәнә күсереү фекерләү закондары буйынса йә оҡшашлыҡҡа һәм айырмаға, йә ҙур төшөнсәнең бәләкәй төшөнсәгә күсеүенә, йә күләм-дәрәжә үҙгәрештәренә һ.б. нигеҙләнә. Шуларға ҡарап, троптар, икенсе төрлө әйткәндә, ассоциатив һүрәтләү саралары бер нисә төргә бүленә.

1. Тышҡы күренеше, төҙөлөшө, төҫө, функциялары һ.б. күп сифаттарының оҡашашлығына нигеҙләнгән һүрәтләү саралары: **метафора, сағыштырыу, эпитет.**

*Ташлап киттең мине, йөрәгем.*
*Йөрәкһеҙ бар кемгә кәрәгем!*
*Гуйә -ҡашы төшкән йөҙөкмөн,*
*Аты йығып -ҡасҡан егетмен. (М.Кәрим)*

*Төнөн куккә ай тсал-ҡһа,*
*Алтындай бал-ҡый Урал тау,*
*Көндөҙ куккә көн "калпсһа,*
*Көмөштәй балпсый Урал тау. (С.Юлаев)*

*Ынйы -ҡыш, апсы-ҡ -ҡыш,*
*Мәрйен кыш, аҫыл -ҡыш.*
*Байрамдар байрамы -*
*Ҡар иле - бөгөн тыш.*
*(Р. Хисаметдинова. " Ҡыш")*

*2.* Билдәле бер ваҡыттағы йә арауыҡтағы тап килеү йә шуның кеүек ниндәйҙер бәйләнеш нигеҙендә мәғәнәләрҙе күсергән һүрәтләү саралары: **метонимия, перифраз.**

*"Аҡмулла" убыусылары гел көлкө һүҙҙәргә эйәләшеп китмәһендәр өҫөн әҙерәк фәлсәфә лә һатырға кәрәк бит!* *(Ш.Бабич."Мәжәлдәр фәлсәфәһе")*

*Һары баш умырзая,*
*Оябыҙға бер мая,*
*Йөрәктәргә - һары май,*
*Күҙебеҙгә - яҙғы ай.*
*Кем икән ул,*
*Кем икән?..*
*Төшөбөҙҙә биҙәгән,*
*Өнөбөҙҙө биләгән,*
*Ҡыҙым булмай кем булһын,*
*Кем һуң уға тиң булһын,*
*Ҡыҙым булмай, кем булһын!*
*( Р .Хисаметдинова." Яратыу йыры" )*

Кешеләр тормошон, кешегә хас айырым сифаттарҙы башҡа йән эйәләренә, тәбиғәткә күсергән һүрәтләү саралары: **аллегория, йәнләндереү.**

*Йәй көнөнөң нурға сумған йәмле көнө,*
*Сәскә ат-кан уләндәрҙең һәр бер төрө...*
*Шунда йөрөгән бал -ҡортоноң берәуһенә*
*Шул урында бер кугәуен осраны,*
*Һәм шунда у-к, бал -кортонан көлә биреп:*
*~ Нихәл, һин? - тигән булып, хәл һораны.*
*(М.Ғафури. "Бал -ҡорто һәм Кугәуен")*
*Тауҙан шыршы төшәп килә -*
*Балитәкле кулдәктән,*
*Әйтерһең дә кейеп алған*
*Башҡорт -ҡыҙынан курмәктән.*
*Тауҙан -ҡайын төшөп килә ~*
*Тәңкә-ҡашмауҙан тоташ.*
*Әллә инде һабантуйға*
*Йыйынамы был туташ?*
*(Р.Хисаметдинова "Ирә мәлдең -ҡыҙҙары")*

Әйберҙе, күренеште, ниндәйҙер төшөнсәне уның бер генә өлөшө аша күсергән һүрәтләү сараһы: синекдоха.

*Тау-таш а-ҡтарған сағында,*
*Өҫтәлдәр һығылған табында,*
*Мул уңыш уҫтергән -ҡырҙарҙа,*
*Байрамда, майҙанда, туйҙарҙа*
*Иптәш һәм друг,*
*Товарищ һәм дуҫ -*
*Баш-корт һәм рус.*
*(Н.Нәжми. "Иптәш һәм дуҫ")*

Бер предметтарҙың күләм-дәрәжәләрен икенселәренә алмаштырған һүрәтләү саралары: гротеск, гипербола, литота.

*Ҡош су-кышын ебетерлек кенә ике тамсы йылы һуҙең булһа икән*
*-*
*Сутылдатып һайрап ебәрергә Миңә еткән!*
*Миңә еткән.*
*(Р.Хисаметдинова. "Йылы һуҙең")*
*Бер төш курҙем әле.*
*Имеш, мине*
*Ҙур бер турә итеп -ҡуйғандар.*
*Имеш, ишәйеп ук киткән дуҫтар,*
*Тубырлашып ята туғандар.*
*Табандарым, имеш, яп-ялтырҙар, -*
*Ьәр береһе ялай табанды.*
*Мин уҙем дә, имеш, ялайым*
*Минән юғарыра-к торғанды...*
*(Б.Исҡужин. "Мин турә булғанда")*
*Валлаһи, тим, еләк ат куҙендәй,*
*Йомортгкалай ине сейәһе.*
*(Ҡол-Дәуләт. "Ҡарындаш[9])*

Авторҙың ышаныуҙары, мораль-этик ҡараштары, әҫәрендә һүрәтләгәндәргә шәхси мөнәсәбәте буйынса мәғәнә күсергән һүрәтләү саралары: табу, **эвфемизм, ирония.**

*Ошо шартлау - әҙәлөуе ине,*
*Һуңғы тауышы ине ғумерҙең.*
*Әсә улы ярҙан тәгәрәне,*
*Аҡ -ҡарҙарға -ҡалды күмелеп.*
*(Н.Нәжми. "Әсә")*
*Бай Нәзиров мал тултырған баржаға о-ҡшай тамам:*
*Ниндәй буксирға тағылһа, ул китә шунда таба!*

*(Ш.Бабич. "Китабеннас")*

Автор һынландырған образ, әҙәби донъя хаҡында һүҙ йөрөткәндә, тел сараларының әһәмиәте асыҡ күренә. Һәр һүҙҙең мәғәнәһен балҡытып ебәреү, урынлы һәм тапҡыр ҡулланыу һүрәтләнеүсе предметтарҙы йәнле итеп күҙ алдына тергеҙергә булышлыҡ итә. Бер генә һүҙҙе алыштырыу ҙа текстағы тәү уйланмыш мәғәнәгә хилафлыҡ килтереүе ихтимал. һүрәтләү сараларынан айырыуса троптар әһәмиәтле. Улар китап уҡыусыһының аңында ассоциатив обрадар һынландырыуға, уларҙың үҙҙәренең тормош тәжрибәһе нигеҙендә хис-тойғоларын ҡуҙғытып, эстетик кисерештәр тыуҙырыуға хеҙмәт итә. Әҙәби өҫәрҙәрҙең көсө лә шунда бит: унда яҙылғандарҙы уҡып, берҙән, тәьҫирләнә, икенсенән, уҡыусы үҙенә фәһем ала, үҙ яҙмышына ҡағылышлы һығымталар яһай. Әҙип махсус рәүештә яҙылған әҙәби текст аша йәмғиәт, дәүләт, тәбиғәт һәм кеше араһындағы мөнәсәбәттәргә үҙ ҡарашын белдерә, башҡаларға ла йоғонто яһай. Тимәк, текстың бер ниндәй һүҙ менән белдерелмәгән, ҡағыҙға теркәлмәгән өсөнсө кимәле бар: уны подтекст тип атайҙар.

Ассоциатив һүрәтләү саралары ана шул подт#кст тыуҙырыу әсән ҙур өлөш индерә.

## Поэтик синтаксис

Бер һүҙ икенсе бер һүҙ менән бәйләнешкә ине, һәр милли телдә тотороҡло һүҙбәйләнештәр системаһы: формалашҡан. Шулар кеүек, һөйләм сиктәрендә һөйләм киҫәктәренең береһе артынан береһе килеүҙең. ҡанунлашҡан ғәҙәти тәртибе була. Башҡорт телендә, ғәҙәттә, эйә - алдан, хәбәр арттан, тултырыусы улар араһында килә; аныҡлаусы - аныҡланыусынан, хәл хәбәрҙән алда тора. Һөйләм киҫәктәренең үрҙәгесә урынлашыу тәртибенә грамматик норма итеп, күренекле тел белгесе Ғ.Ғ.Сәйетбатталов яҙыуынса "һөйләү телендәге, прозалағы хәбәр һөйләмдәге һүҙҙәр тәртибе алына".[102] Әммә ысынбарлыҡта аралашыу ҡағиҙәләр буйынса бармай, ул телмәр эйәләреҙең һөйләшеү маҡсатына, конкрет шарттарға тығыҙ бәйле. Иң мөһим һүҙ хәбәрҙән алда әйтелә, йә иң аҙаҡҡа ҡалдырыла - был ситуация һәр кемгә таныш.

Айырым синтаксик конструкция эсендә һүҙҙәрҙең тәртибен үҙгәртеү мәғәнәүи үҙгәрешкә килтерә, фекерҙе бүтән төрлөрәк итеп яңғыратыуға мөмкинлек бирә. Был арҙан тыш әҙәби текстың айырым өлөштәрен йәки уның эсендәге күпмелер һөйләмдәр шәлкемен, йә булмаһа айырым фразаларҙы мәғәнәүи яҡтан тегеләй йәки былай ҡороу әҙәби образ тыуҙырыуға ҙур булышлыҡ итә. Эстетик һүрәтләү маҡсаттарынан сығып, текстың синтаксик төҙөлөшөн махсус рәүештә ҡороу сараларын әҙәбиәт ғилемендә фигура (латинса - образ, күренеп!) йәки **поэтик** синтаксис тип йөрөтәләр.

Фигуралар менән троптарҙың бер ни тиклем оҡшашлығы бар: ғәҙәти тәртиптән белә күреп тайпылыу. Күнегелгән тәртипте боҙоу, үҙенсә бороп ебәреү - троп булһынмы, фигура булһынмы -көтөлмәгәнлек эффекты тыуҙырып, уҡыусы иғтибарын йәлеп итә. Троп ярҙамында һүҙ мәғәнәһе икенсе яҫылыҡҡа күсерелә, поэтик образ тыуҙырыла. Фигуралар поэтик яңғырашты көсәйтә, әйтергә теләгәнде ҡабартыбыраҡ, сағыуыраҡ күрһәтә. Юҡҡа ғына боронғо һүҙ оҫталары поэтик фигураларҙы бейеү фигураларына оҡшатмағандыр. Хәрәкәт-тәрҙә билдәле фигуралар (түңәрәк яһау, алға-артҡа китеү, әйләнеү һ.б.) яһағанда ғына бейеү эстетик тойғо уятҡан шикелле, һөйләмдәге "боролоштар"ҙа телмәрҙе йәнлерәк, баҙығыраҡ яһай.

Әҙәби текст ижад иткәндә яҙыусы әҙер фигураларҙы ла файҙалана, үҙе лә уларҙың яңы ([юрмаларын тыуҙыра ала. Айырыуса поэзия үрнәктәрендә фигуралар төп һүрәтләү сараһы ролен үгәй. Был аңлашыла: шиғри текст һүҙҙәр һаны менән түгел, ижектәр һаны менән үлсәнә, ритм-рифма тура килтереү өсөн автор һөйләмгә әллә ниндәй конфигурациялар бирергә мөмкин.

Барлыҡ телдәрҙә лә ҡалыплашҡан фигура төрҙәре байтаҡ. Уларҙы "поэтик синтаксис саралары" тигән баш аҫтында дөйөмләштерәләр.

1. Айырым һүҙҙәрзең, һүҙбәләнештәрҙең, һөйләмдәрҙең йә булмаһа текстың айырым фрагменттарыныц ҡабатланыуына нигеҙләнгән фигуралар: анафора (юл башында ҡабатланыу), эпифора (юл аҙағында), эпанастрофа (икеһе лә бергә).

<u>Осто, осто</u> елдәр осто,

Осто, осто япраҡ осто,
Осҡандарга эйәрмәне,
Мөхәббәтем бары боҫто. ..
"Эйәртәм", - тип ҡарҙар осто,
"Әйҙә", - тиеп ҡаҙҙар осто.
Тик ул - ньҡыш, эйәрмәне,
Ҡанат ҡыҫып бары боҫто. ..
Осто, осто - көндәр осто,
Осто, осто - айҙар осто,
Ҡанатлы йән - мөхәббәтем
Күңелемә нығыраҡ боҫто.

(Р.Хисаметдинрва. "Тойғоларым") Р. Хисаметдинованың шиғырҙарында ҡабатлау фигурала-рыныц куплеге һәм төрлөлөгө үҙенсә бер яңғыраш, аһәңлек тыуҙыра. Шағирә шәрек поэзияһында киң таралган рәдиф (ғәрәпсә - юлдаш, hыбайлының артында ултырыусы, эйәрсен) формаһына ла мөрәжәғәт итә. Рәдиф стррфа рифмаһына ҡағылышһыҙ ҡабатланған шиғыр юлы, мәҫәлән, "Инә ҠОШ" әҫәрендә

Иҫем - аҡылым,
Уйым - дәртем,
Бары бала, бары бала!
Шылт итһә лә, ҡанатарын
Балаларҙы ҡамап ала.
Мин - Инә ҡшо! Минә - Инә ҡош!



-мяв*

**Һуңғы юл һәр строфанан һуң биш тапҡыр ҡабатлана.**

Тотошлай бер строфаның ҡабатланып килеүен француз теленән ингән «рефрен» һүҙе менән атайҙар. Һүҙлектәрҙән күренеүенсә, (ЛЭС, 322-се б.), ул русса “припев” (ҡушымта) тигәнгә тап килә. Был форма йырҙарҙа күп ҡулланыла. Телдән башҡарылғанға күрә, халыҡ ижады үрнәктәре синтаксис йәһәттән ябай һәм ҡыҫҡа. Уларҙа ҡабатлауҙарҙың һәммә төрө, мәҫәлән, ҡобайырҙа бер төрлө һөйләм киҫәктәренең күп тапҡырҙар ҡабатланыуы, йыш осрай. Ҡабатлауға ҡоролған был ҡатмарлы синтаксис конструкцияға тел ғилемендә теҙем тигән махсус атама бирелгән.
Ҡабатлауға ҡоролоп, мәғәнәүи яҡтан йә көсәйеү яғына, йә аҙайыу яғына үҙгәрә барған фигураларҙы градация тип йөрөтәләр.

Ах, ажғырып ағып яҡкан тормош һыуы
Аша ла бит! Щаща ла бит! Таша ла бит!
Ах, шул һыуҙан ҡыуаланған ҡүмер ташым
Ашала бит! Ашала бит! Ашала бит!
(Әбүс. «Һин көсһөҙһөң»)

Ҡабатлау ниндәйҙер поэтик фекерҙе уҡыусы хәтеренә нығыпаҡ уйылдыра, ә ҡайһы бер проза текстарында әйтелгәнде яҡшыраҡ аңлатыу өсөн дә хеҙмәт итә. Көндәлек аралашыуҙа ҡабатлауҙар нимсектер ҡолаҡҡа ятышһыҙ тойола һәм грамматикала тавтологик хата сифатында баһалана. Әҙәби текста иһә улар образлылыҡ тыуҙырыу сараһына әйләнә.
2. Һөйләмдә баш киҫәктәрҙең урыны алмашыныу, йә төшөп ҡалыу, йә берәүһенең генә бирелеүе кеүек ғәҙәти булмаған тәртипкә нигеҙләнгән фигуралар: **инверсия, асиндетон, эллипсис** (уй йомоу).
**Инверсия**, йәғни хәбәрҙең һөйләм башына сығыуы, Ғ.Ғ.Сә-йетбатталов һүҙҙәре менән әйтһәк, “һөйләүсе үҙенең һүҙҙәрен күтәренке рух, юғары пафос, энтузиазм менән әйткәндә, һөйләгән телмәренә өндәү, саҡырыу мәғәнәһе биргән саҡта була”. [103] ғалим уның теҙмә әҫәрҙәрҙән тыш, прозала ла ҡулланылған, мәҫәлән, тура телмәрҙе оҙатыусы автор һүҙҙәрендә, рус теленән тәржемәләрҙә осраған формаларын күрһәтеп үтә.
*… Иртәгәһенә иртән мин өйҙәгеләргә һәм фронттағы дуҫтарыма хат яҙырға ултырҙым. Ниндәйҙер ҙур дәрт, юғары илһам менән яҙҙым мин уларҙы. Фронттағы иптәштәремдең һәр береһенә айырым-айырым яҙҙым. Иҫәндәрме икән улар?..*

*(Д.Юлтый. “Ҡан”)*

Асиндетон – һөйләмдең бер генә киҫәгенең (йә хәбәр, йә эйә) ҡабатланыуынан тыуған фигура. Ул йышыраҡ драма әҫәрҙәрендә экспозициянала файҙаланыла: Ауыл. Кис. Клуб алды. Йәштәр һ.б.
Уй йомоу йә эллипсис – ниндәйҙер һөйләм киҫәгенең төшөп ҡалыуына нигеҙләнгән фигура. Ул йыш ҡына балалар өсөн яҙылған йомаҡтарҙа, ҡайһылыр әҫәрҙәге персонаждың уйлаған уйын ниндәйҙер сәбәп арҡаһында (шаяртыу, ҡурҡыу, шомланыу һ.б.) әйтеп бөтөрмәгәнлеген һүрәтләгәндә ҡулланыла.

Һуғыш туп уйыны түгел,
Бик ҡаты һуғыш, ҡаты;
Төрлөһөн уйлай йәш күңел,
Булмағас сәләм-хаты.
Әллә ауыр яраланып,
Госпиталгә керҙеме,
Әллә аҡтыҡ ҡаны тамып,
Бөтөнләйгә…
(Б.Бикбай. «Хат»)

3. Әҙәби текстың өлөштәрен, һөйләмдәр шәлкемен мәғәнәүи яҡтан йә ҡаршы ҡуйыу, йә оҡшатыу, йә иһә мәғәнәһеҙ бәйләнешкә индереү саралары: антитеҙа, оксиморон, йәнәшәлек (параллелизм), парадокс, алогизм.

Антитезаның нигеҙендә антонимдар ята. Алда әйткәнебеҙсә, донъяны танып белеүҙең иң боронғо формалары барлыҡ күренештәрҙең сиктәрен билдәләгән ҡапма-ҡаршылыҡтарҙы табыуҙан ғибәрәт булған. Әҙәби ижадта телмәр ойоштороуҙың был формаһы поэтик фекерҙе инҡар итеү аша ҡабартып күрһәтеү өсөн бик уңайлы.

Ғүмер һөрәм аулаҡ бер ауылда,
Тын күлдәге гүйә табан мин.
Ләкин баҡсы: бөтә тормошомдо
«Көрәш юлды…» тиеп табам мин.
Ҡай сағында йөрәк шундай һыҙлай!
Көскә-көскә һулыш алам мин.
Тик барыбер: «Шундай күңелле!» тип,
Бар донъяға һөрән һалам мин…
(Р.Назаров. «Мин ялғансы түгел»)

Был шаярыуында шағирҙың уйы һәм тормошо ҡапма-ҡаршы ҡуйыла. Әйткәндәй, Р.Назаровтың бик күп әҫәрҙәре төрлө типтағы антитеҙаға ҡоролған: “Ике ел йөрөй…” – һуғыш һәм тыныс тормош, «ике шиғыр» - яҙ һәм көҙ, «Мин төш күрҙем» - төш һәм өн һ.б. Шағир Б.Исҡужиндың тотошлайы менән антитеҙаға нигеҙләнгән шиғырҙар китабы бар, хатта уның исеме лә есеменә тап килерлек итеп алынған: «аҡ менән ҡара»:

Һорағас ҡына биргән – йомартҡы?
Тарих һөйләмәгән – ул ҡартмы?
Төрткәс кенә күргән – зирәкме?
Салбарҙағы һүрәт – биҙәкме?..

Китаптағы «кешеләр менән һөйләшеү» бүлеген

Фәрештә түгелмен, ләкин
Яҙып-теркәп барам:
Ҡайһы һүҙ күңел һүрелтә,
Ҡайһы һүҙҙән байрам.

Тигән строфа менән асып, баштан уҡ шиғри ҡапма-ҡаршылыҡтарға ишаралай шағир.

Оксиморон – антитеза, ҡапма-ҡаршы мәғәнәләге ике генә һүҙ бәйләнеше: һаҡаллы сабый, әҫе ҡар.

Парадокс та, алогизм да ҡаршы ҡуйыуҙың бер формаһы тип ҡарала ала, тик улар логикаға һыймаған, ысынбарлыҡта уйға ла инеп сыҡмаған ҡаршы күренештәр, фекерҙәр рәтендә. Мәҫәлән, «Ярһыу йылға» шиғырында Р.Назаров, берҙән, лирик геройҙың уй-кисерештәре, икенсенән, йылға торошо ҡапма-ҡаршылығын барлап, ғәҙәти булмаған һығымта сығара:

Һәм уйланым:
«шундай ярһыуҙы, - тип, -
Йылға үҙе биргән, күрәһең…
Йылға ла бит йәшлек шикелле,
Бик аҡыллы һәм ул бик тиле…»

Ошо уҡ рәттә көтөлмәгәнлек эффектын тыуҙырыусы һүҙ аймылыштырыу кеүек һүрәтләү сараһына ҡарарға кәрәк. Бында ҡаршы ҡуйыу юҡ, шулай ҙа бер төрлө яңғыраған омонимдарҙы “уйнатыу” көтөлмәгән икенсе мәғәнә тыуҙыра:

Ҡайҙа барма - ерҙә яҙ һулышы…
“Яҙ! Яҙ” – тиҙәр ҡырҙар, урмандар…
“Яҙ! Яҙ” тиҙәр, ә мин: “Яҙма!” – тимен,
“Яҙма!” тимен урман, ҡырҙарға.
( Н.Нәжми. “Яҙ, яҙ, тиҙәр”)

Йәнәшәлек – антитезанан айырмалы рәүештә ҡапма-ҡаршылыҡҡа түгел, ә оҡшашлыҡҡа ҡоролған синтаксик һүрәтләү сараһы. Халыҡ йырҙарының күп өлөшө йәнәшәлектәргә нигеҙләнә. Характерына ҡарап, Уларҙың бер нисә төрөн айырып ҡарайҙар.

Саҡыра ла кәкүк, әй саҡыра

Һаҙлыҡта ғына түгел, таллыҡта.
Был ғүмеркәйҙәрҙең ай ҡыҙығы
Байлыҡта ғына түгел, һаулыҡта.

Осраҡлы бер күренештәр, бөтөнләй бәйләнешһеҙ хәл-тормош һәм башҡалар йәнәшә һүрәтләнә алмай, уларҙың нигеҙендә лә традицион формалашҡан тотороҡло ассоциациялар ята.

К.Әхмәтйәнов үҙенең «Әҙәбиәт теорияһы» фигураларҙың автор ихтыярын сағылдырыусы тип аталған тағы ла бер төрөн айырып ҡарай. Беҙҙеңсә, риторик өндәшеү, һорау, бер яҡлы диалог, ирония тип аталған фигуралар йәнле телмәр менән бәйле һәм айырымыраҡ ҡаралырға тейеш.

## Һүрәтләү сараһы булараҡ өн һәм йәнле телмәр

Бер үк милли телдең күренеше булһа ла, һөйләү теле – йәнле тел һәм яҙма тел бер-береһенән шаҡтай айырыла. Яҙмаға теркәлгән тел – үҙгәрешһеҙ ҡала торған статик күренеш. Уны өйрәнеү һәм тикшереү нигеҙендә тел грамматикаларының традицион синтаксис тип йөрөтөлгән ҙур бүлеге ойошҡан. Һуңғы осорҙа иһә телде динамик процесс итеп ҡарау зарурлығы артты. Тел ғилемендә телдең тәбиғи ағышын өйрәнгән актуаль синтаксис тигән яңы йүнәлеш формалаша башланы, йәнә лә лингвистиканың психология һәм социология менән ялғамында психолингвистика, социолингвистика тигән фәндәр тармаҡланды. Уларҙың да өйрәнеү объекты сифатында телдең процессуаль яҡтары һәм шуға йоғонто яһаған факторҙар ҡарала. Йәнле телмәрҙең барлыҡ аспекттарына туҡталыуҙы маҡсат итеп алмағанбыҙ, шулай ҙа әҙәби эшмәкәрлектә иҫәпкә алынырға тейешле ҡайһы бер моменттарына күҙ һалайыҡ.

Ҡайһы ғына телдең күренеше булмаһын, йәнле телмәр – билдәле ваҡыт һуҙымында һәм конкрет урында бара торған процесс. Әгәр ҙә интервью һымаҡ махсус ойошторолғандарын иҫәпкә алмаһаҡ, ул алдан әҙерләнмәй, бер генә тапҡыр үтә һәм шул рәүешсә башҡаса ҡабатланмай, тулыһынса импровизация булып тора. Иң мөһиме: телдмәр һәр ваҡытта ике йәкиунан да күберәк кешеләрҙең һөйләшеүе – диалог формаһында бара. Кешенең үҙ-үҙе менән һөйләшеүе – монолог – йә уның ниндәйҙер психологик хәләте менән бәйле була, йә спектаклдәрҙә автор ихтыяры буйынса башҡарыла. Диалог барышында һәр берәү, һүҙҙе һүҙгә ялғап, һөйләшеүҙе үҙенсә бороп ебәрергә ихтыярлы, ләкин тулыһынса ирекле түгел. Бер осраҡта диалог йөкмәткеһе тема менән сикләнә, ә айырым шарттарҙа үҙенән-үҙе килеп тыуған һөйләшеүҙәрҙең йөкмәткеһе конкрет ситуация менән билдәләнә.

Өҫтәп шуны әйтергә кәрәк: быуаттар буйынса һәр халыҡтың яҙылмаған, әммә мотлаҡ иҫәпкә алына һәм үтәлә торған үҙенә генә хас аралашыу тәртиптәре формалашҡан. Башҡорттарҙың телмәр этикеты (речевой этикет) башлыса мәҡәл-әйтемдәре булып теркәлгән: уйлап һәм урынлы һөйләү, оло кешенең һүҙен бүлдермәү, әҙ һөйләп күп тыңлау, һүҙҙә тороу, аралашҡанда икенсе берәүҙе битәрләмәү, йөҙөн йыртмау һәм башҡалар. Бигерәк тә халыҡҡа “тура ҡарап тураһын һөйләү”, йәғни үҙ ҡараштарын йәшермәү, үҙ позицияларын асыҡтан-асыҡ белдереү, тағы ла “ҡыҫҡа һөйләү” – әйтергә теләгәнен дөйөмләштереп ҡыҫҡа һәм тос әйтә алыу юғары баһаланған. Был аңлашыла: тура һөйләү, телмәр аныҡлаған тәьмин итеп, аралашыуҙа бер ниндәй аңлашылмауҙарға урын ҡалдырмай, ә ҡыҫҡалыҡ – ваҡытты бушҡа уҙғармау шарты.

Һүҙҙәрҙең мәғәнәүи аныҡлығы, белеүебеҙсә, контексҡа бәйле, ә диалогта ул алдан билдәле түгел. Нисек итеп һөйләшеүселәр бер-береһен тейешенсә аңлай һуң? Диалогта контекста ролен телдең үҙенән тыш (несловесные) факторҙар үтәй: һөйләүсе үҙенең позаһы, мимикаһы, тауыш интонацияһы һәм йөҙөнөң торошо менән өҫтәлмә информация бирә. Ым-ишара теленең милли арсеналы бай: бащ ҡағыу, баш һелкеү, ауыҙ салшайтыу, баш сайҡау, күҙ ҡыҫыу, ҡаш һикертеү, ҡул болғау, бармаҡ менән (төртөп) күһәтеү кеүек хәрәкәттәр, өндәшмәү, күтәрелеп тә ҡарамау, йөҙөн сирыу, арҡаны ҡуйыу, ситкә ҡарау

һ.б. Үҙен нисек тотоуына, тауышының нисегерәк яңғырауына ҡарап та, кешенең ни уйлауын, һүҙҙәренә ни мәғәнә һалыуын самаларға була: шуға ла ым-ишараларға һәр берәүҙеңкүңел донъяһын нисек бар шулай сағылдырған көҙгө ул, тип тә әйтәләр. Халыҡ та “эсендәге тышында” тигән һығымтаға юҡҡа ғына килмәгәндәр, моғайын.

Һүҙҙәр кеүек үк, ым-ишара теле лә һәр халыҡта үҙенсә ҡалыплашҡан, уның барлыҡ нескәлектәрен яҙыусылар әҙәби образ һынландырыуҙар, милли характер тыуҙырыуҙа оҫта файҙалана. Әҙәби геройҙың ҡиәфәте-һыны, ым-ишаралары аша уй кисерештәр үҙгәрешен, тойғо-хистәре даръяһының өҙлөкһөҙ ағышын дөрөҫ тотоп алыуҙы һәм ябай ғына һүҙҙәр ярҙамында әҙәбиәт һөйөүселәрҙе ышандырырлыҡ итеп авторҙың тасуирлауы әҙәбиәт ғилемендә авторҙың тасуирлауы әҙәбиәт ғилемендә «психологизм» [104] тигән төшөнсә менән нарыҡлана.

Психологизм тигәндәй, йәнле телмәрҙең барлыҡ күренештәре лә кеше психологияһына, шул нигеҙҙә тыуған ассоциацияларға тығыҙ бәйле. Айырым һүҙ, һүҙбәйләнештәр генә түгел, теге йәки был өн дә кеше аңында ысынбарлыҡтың берәй күренешенә бәйләнеп, хәтерҙә өн ассоциацияһы булып нығына. Мәҫәлән, “ж-ж-ж” өнө буран, ел выжылдауын, “з-з-з” – себен безелдәүен иҫкә төшөрә. Күп кенә әҙиптәр өндәрҙең тәбиғи яңғырышын үҙенсәлекле һүрәтләү сараһы сифатында ҡуллана. Уларҙың әҙәби ижадта нығынған тотороҡло формаларын әҙәбиәт ғилемендә поэтик фонетика тип йөрөтәләр.

Бер үк тартынҡының һүҙ һайын үк булмаһа ла сағыштырмаса йыш ҡабатланыуы аллитерация тип аталһа, һуҙынҡының ҡабатланыуы ассонанс тигән термин менән билдерелә. Түбәндәге өҙөктә уларҙың икеһе лә ҡулланылған:

Өҙөлдө, бурандар өҙөлдө,
Бурандар һеперҙе эҙеңде…
Эҙләнем, тапманым үҙеңде,
Эҙләнем, тапманым эҙеңде:
Өҙөлдө, үҙәгем өҙөлдө,
Өҙөлдө, шиғырым өҙөлдө.
(Р.Хисаметдинов ”Өҙөлдө” )

Һүҙ оҫталары, моғайын да, теге йәки был тексты яҙырҙан элек бер төрлө өндәр булған һүҙҙәрҙе берәмтекләп сүпләп йыймайҙарҙыр. Әлеге лә баяғы: әҙиптең ассоциатив фекерләүе, ижади интуицияһы аңдаға картина менән һүҙ һәм уның яңғырашын бергә тыуҙыра. Бәғзе әҫәрҙә айырым өндәрҙең йыш ҡабатланыуы осраҡлы түгел, ул тәбиғәттәге тауыштарҙы хәтерләтә. Мәҫәлән, «е-йе» һиҙелер-һиҙелмәҫлек кенә һауа үәрәкәте – ел менән ассоциациялана:

Егет сағым – елкән сағым, -
Елдәрҙә елеп барҙым…
(Б.Иҫҡужин. “Егет сағым”)

Артабан, үҙ иркенә күктә иҫкән ел һәм етеҙ егет образдары ассоциатив бәйләнешкә инеп, шағир уйлаған әҙәби образ һынлана.

Ысынбарлыҡта булған тауыштарға оҡшатып өндәр яңғырашына өлгәшеүҙе К.Әхмәтйәнов өн эйәртеме тип атай. Был һүрәтләү сараһы ҡулланыу – ҡулланмау, тәбиғи, әҙиптең өндәргә һиҙгерлегенән тора. Р.Назиповтың «Төнгө уйланыуҙар» шиғырында шағирҙың «поэтик ҡолағы»на салынған өндәр ап-асыҡ ишетелгәндәй:

Уйҙар ҡатламынан төнө буйы
Йөрәк “туҡ! туҡ!” шиғыр соҡоно.
Һалдат ҡулындағы штык кеүек,
Элеп атта керпек йоҡоно.
Ғүмер ебен тартып ваҡыт аға…
Тирә-яҡта тынлыҡ,
Тып-тыныс.
Тынлыҡ менән йәшәү ауыр икән,

Тынлыҡ менән йәшәү ҡурҡыныс
Ә тышта ҡыш…

Башҡорт телендә ижад итеүселәр өсөн поэтик фонетиканы белеү айырыуса мөһим, сөнки күпселек төрки телдәрҙәге кеүек башҡорт теленең фонетик системаһы сингармонизм законына нигеҙләнгән. [105] Һәр һүҙ бары билдәле һүҙ менән генә бәйләнешкә инә алған һымаҡ, һүҙ эсендә өндәрҙең бер-бер артлы теҙелеүе сингармонизм талаптарына буйһона. Проза булһынмы, йә драмамы, йә иһә шиғырмы, әҙәби текст аһәңле, һөйләшкәндәге кеүек үк тәбиғи яңғыраһын өсөн, ижадсы үрҙәге законды иҫәпкә алырға бурыслы. Халыҡ ижадында өндәрҙең һүрәтләү мөмкинлектәре киң файҙаланыла. Мәҫәлән, серҙәктәрҙең, тел көрмәлгестәрҙең, тиҙәйткестәрҙең, тел шымартҡыстарҙың, йомаҡтарҙың күпмелер өлөшө өндәр уйнатыуға ҡоролған:

Дөбөр-дөбөр итер,
Дөбөрҙәп китер,
Ялт-йолт итер,
Ялтырап китер.

Өндәрҙең дә, һүҙҙәрҙең дә һүрәтләү ҡеүәһе бары бәйләнешле текста, шулай уҡ йәнле телмәрҙә асыла. Ысынбарлыҡты әҫәрҙә йәнле картина һымаҡ тергеҙеү өсөн, хәл-ваҡиғалар уртаһында ҡайнаған персонаждарҙың үҙ-ара һөйләшеүҙәренә ҙур урын бирелә, хатта уларҙың уй-фекерҙәре йыш ҡына тура телмәр формаһында тасуирлана. Йәнле телмәрҙең ҙур һүрәтләү мөмкинлектәрен һүҙ оҫталары яҡшы аңлай һәм уңай файҙалана. Шуны ғына иҫкә төшөрөү етә: өс әҙәби төрҙөң береһе – драма төрө тотошлайы менән диалогтарға ғына ҡорола.

Уйлай китһәң, һәр әҙәби текст – асылда яҙыусының уҡыусыға, йәғни адресатҡа төбәлгән, тик яҙма формала еткерелгән бер яҡлы диалогы ул. Авторҙың ҡатнашыу-ҡатнашмау дәрәжәһе буйынса, уның өс төрөн самаларға була.

Ҡайһы бер әҫәрҙәрҙә автор, үҙен туранан-тура күрһәтеп, уҡыусыға мөрәжәғәт итә. Мәҫәлән, М.Кәримдең “Өс таған” повесында хикәйәләү авторҙың адресатҡа йүнәлтелгән риторик һорауынан башлана: “Һеҙҙең Бөртөклөлә булғанығыҙ бармы? Юҡмы ни? Донъялағы иң матур ауылдарҙың береһен күрмәй нисек түҙәһегеҙ икән? Ҡыйындыр, әлбиттә…”[106] Ә бына Б.Рафиҡов “Ахырызаман көикәндә” романында “автор һүҙен” үҙенең эш өҫтәлен тасуирлауға ҡора һәм уҡыусыны үҙ уйы артынан “тарих төпкөлөнә – ата-баба эргәһенә, улар атҡарған эштәр, ваҡиғалар уртаһына” әйҙәй.[107] “Аҡтамыр” романында Ғ.Хисамов адресатҡа өҫтәлмә аңлатма биреүҙе кәрәк тип таба: “Хөрмәтле уҡыусым, һин ҡулыңа… алдың… әҫәрҙе һин әле уҡый башламағанһың, уның тәүге юлдарына күҙ һалғансы, бер нисә әйтер һүҙем бар.”[108]

Й.Солтанов иһә үҙенең “Ерем, кешеләрем” роман-ҡиссаһын Һаҡмар-һыу менән һөйләшеүҙән башлап ебәрә: “… Ҡайтып киләм һиңә, Һаҡмар-һыу! Ләкин япа-яңғыҙаҡ түгелмен был юлы: иң һөйөклө дуҫыма – Уҡыусымды үҙаҡланым йәнемә… Икебеҙҙе (Һаҡмар-һыу менән мине) аңлар, тыңлар бергәләшеп һөйөнә лә, көйөнә лә бер ул, моғайын… ”Хуш килдең, төклө аяғың менән килдең был яҡҡа, ҡотло табан терәнең фирүз ярҙарға, берҙән-берем, Уҡыусым!” – тип тәбриклләйек беҙ уны, һағыныслым Һаҡмар-һыу!”[109] Артабан ваҡиғалар теҙмәһе уҡыусыны таныштырыу рәүешендә дауам итә.

Әҙәби текст авторы һәм китап уҡыусыһы араһында тиҫтәләгән-йөҙәрләгән йылдар ятырға мөмкин. Адресатҡа турана-тура мөрәжәғәт, уның менән диалог формаһы, күҙмә-күҙ осрашып һөйләшеү эффектын твуҙырып, ижадсы менән әҫәр уҡыусыһын тығыҙ рухи бәйләнешкә индерә. Һәр быуын әҙәбит һөйөүселәре был яҙыусыны үҙ замандашы кеүек ҡабул итә.

Күп әҫәрҙә автор үҙе тыуҙырған әҙәби донъяһы, киреһенсә, өнһөҙ-тынһыҙ ситтән күҙәтеүсе һәм күргәндәрен, йәнәһе, түкмәй-сәсмәй һүрәтләүсе позицияға баҫа. Ул үҙ ҡараштарын, үҙ фекерен асыҡтан-асыҡ белдереп, уҡыусыға баҫым яһамай, үҙаллы һығымталар яһауға юл ҡуя. Авторҙың тәү ҡарашҡа тойолған битарафлығы – ул бары художестволы алым, шартлы битарафлыҡ. Әҫәр персонаждарының ҡылған ҡылыҡтары,

әйткән һәр һүҙе, улар цәшәгән мөхит – барыһы ла автор һайлаған һүҙҙәр һәм һөйләмдәр ярҙамында белдере лә бит. Шул уҡ ваҡытта автор үҙенең позицияһын билдәләгәнгә үҙе йәшәгән осорҙағы идея-эстетик ҡараштарҙы, халыҡтың традицион мораль-әхләҡи ҡанундарын иҫәпкә алырға бурыслы.

Яҙыусының әҙәби текста тасуирланған хис-тойғолар характеры: йә күтәренке рух, йә драматизм, йә трагизм – әҙәбиәт ғилемендә пафос (грекса «көслө тойғо») тигән төшөнсә менән белдерелә. Шулай ҙа булырға мөмкин: йәмғиәттә ниндәйҙер бер ҡылыҡҡа, мәҫәлән, эскелеккә, кире мөнәсәбәт формалашҡан, ә автор уны юғары пафос менән батырлыҡ итеп һүрәтләй, ти. Был осраҡта әҫәр сатирик төҫ ала, авторҙың иронияһын, кире ҡарашын күрһәтә. Яҙыусы һәр хәлдә үҙ мөнәсәбәтен уҡыусыға көсләп таҡмай, ә быға оҫта һәм теүәл һүрәтләүе аша ирешә.

*Үҙ квартираһына ҡайтып инде… Ҡатынының һүҙҙәрен тәмәке төтөнөнә күмелгән килеш тыңланы, береһенә лә иғтибар итмәне. Тик бисәһенең «ағайым» тип өҙөлөп әйтеүенә туҡтала ҡалды. «Ағайым» тигән һүҙ «аға» тигәнгә лә, «ағай» тигәнгә ҡарағанда ла матурыраҡ түгелме?*

*Мәҫәлән, үҙеңдең директорыңа «Янбулат ағайым» тип әйткәндә нисек була? Матур бит. Ләкин бына тап Мәфтухә кеүек бөтә йөрәгең менән өҙөлөп:*

- *Ағайым!!! – тип әйтергә кәрәк…*[110]

С.Агиш үҙенең геройына бер ниндәй ҙә баһа бирмәй, тик уның үҙе эшләгән ойошма етәксеһенә нисек итеп мөрәжәғәт итергә баш ватыуын тасуирлай һәм, артабан шул картинаны оҫта һынландырып, геройҙың ялағайлыҡ сифаттарына ышандыра.

Өсөнсө төр әҫәрҙәрҙә авторҙың уҡыусыға тәғәйенләнгән диалогы бөтөнләй икенсе төҫ ала: ул әҙәби әҫәрҙеге берәй геройҙың бер яҡлы диалогына әйләнә. Башҡорт әҙәбиәтенең прозы төрөндә, айырыуса лирикала быныдай әҫәрҙәр байтаҡ. Д.Юлтыйҙың, мәҫәлән, ҙур күләмле «Ҡан» романына алып, С.Агиштың «Мәхмүтов», Ә.Бикчәнтәйевтың «Ҙур оркестр», «Илсе ҡыҙы», М.Кәримдең «Беҙҙең өйҙөң йәме» кеүек повестарҙа һәм «Оҙон-оҙаҡ бала саҡ» ише күп һанлы автобиографик әҫәрҙәрҙә, С.Шәриповтың миниатюр юл хикмәттәренә тиклем, тасуирлау – һүрәтләү ебе авторҙар тарафынан әҙби геройға «тотторолған». Был типтағы әҫәрҙәрҙә автор үҙе бөтөнләй, хатта битараф шаһит сифатында ла – ҡатнашмай, уның барлығы – юҡлығы персонаждар аралашыуында бер нисек тә белгертмәй, автор үҙе тыуҙырған әҙәби донъяла хәрәкәт иткән персонаждарҙың хәл ҡылыҡтарының, ваҡиға – күренештәр ағышының тәбиғилегенә өлгәшә. Ҡайһы бер драма әҫәрендә автор ғәҙәти образдар рәтендә үҙ роле менән ҡатнаша.

Йәнле телмәргә хас барлыҡ биҙәктәрҙе боҙмайынса һәм бөтә тулылығында яҙмаға теркәү, әлбиттә, бик еңелдән түгел, шуға күрә хәрефтәрҙән башҡа тағы ла өҫтәлмә шартлы тамғалар ҡулланылышҡа индерелгән. Тауыш көсөн һәм интонайияһын, паузаны һәм башҡа үҙенсәлектәрҙе билдәләр өсөн Европала XV быуаттан алып тыныш билдылыре системаһы формалаша башлай һәм хәҙерге ваҡытта улар халыҡ-ара символдар рәүешендә нығынған.[111] Пунктуация, ҙур-бәләкәй хәрефтәр, тексты мәғәнәүи яҡтан белгеләү (абзац), Ә.Үтәбайҙың «Хәнйәр» тексы һымаҡ, әҙәби текстка ниндәйҙер һүрәт формаһы биреү, ҡыҙыл юл, юрамал әйткәнде белдереү өсөн тырнаҡтар, баҫымды күрһәтеү һәм башҡа төрлө артефакт саралары әҙәби текст ижад итеүсегә ысынбарлыҡты тулыраҡ һүрәтләү мөмкинлектәрен бермә-бер арттыра.

## Авторлыҡ хаҡында төшөнсә

Телдең тылсымлы көсө уның фунцияларында күренә. Уның төп тәғәйенләнеше, әлбиттә, аралашыу, хәбәрләшеү, фән телендә әйтһәк, коммуникатив функция. Яҙма һәм һөйләү телебеҙҙе башҡалар ҡыйыш-мыйыш аңламаһын өсөн, дөрөҫ яҙыу, һүҙҙәрҙе урынлы ҡулланыу һәм дөрөҫ әйтеү ҡағиҙәләрен өйрәнеү бик тә мөһим. Мәгәр дөрөҫ яҙыу, дөрөҫ әйтеү генә етәме? Юҡ. Тыңлаусыға йәки китап уҡыусыға мотлаҡ тьәҫир итһен, хистәрен дөртләтеп ҡабындырһын өсөн телдең сағыу һәм образлы булыуы кәрәк. Тимәк, был

тәңгәлдә телдең поэтик, йәғни эстетик функцияһы, хаҡында фекер йөрөтөү зарурлығы тыуа.

Һүҙҙәр мәғәнәүи белешмә генә бирмәй, бәлки, эстетик информацияға ла эйә. Улар кеше аҡылына ниндәйҙер хәбәр еткерә, ул һүҙҙәр, иғтибарҙы үҙенә йәлеп итеп, билдәле бер тойғо уята, образлылығы, ҡабатланмаçлылығы, ритмикаһы, өндәрҙең уҡмашмаһы менән арбай. Поэтик һүҙ, шулай итеп, теге йәки был әйберҙе йә иһә күренеште «ҡапшап ҡарағандай» күңелгә һала, аҡылға күсерә.

Һүҙҙәр донъяһы үтә мауыҡтырғыс, үтә сыбар, һәм ул барлыҡ ғаләм икһеҙ-сикһеҙ булған шикелле, әлегәсә аҙағынаса асылып бөтмәгән. Әҙәбиәткә генә күҙ һалайыҡ: уйҙар донъяһы, идеялар образдар һәм тойғо-кисерештәр диңгеҙе. Ә бит әҙәби әçәрҙең туҡымаһы, бер ҡараһаң, ябай ғына һүҙҙәр теҙмәһенән ғибәрәт. Ул һүҙҙәргә яҙыусы тормош өрә, мәғәнәүи биҙәктәр һала һәм һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе – әйтер уй-фекерен – йәйғор һымаҡ балҡырға мәжбүр итә. Был тәңгәлдә хатта һүҙҙәр теҙмәһен ябай ҡурай тишемдәренә сағыштырырға ла баҙнат итәйек: былай ғына өрһәң, йүнле тауыш та сығарып булмай, тик белеп өрһәң генә, ҡурай сиҥри ауаздар, тимәк, образдар гармонияһын барлыҡҡа килтерә.

Аңдағы әҙәби проектын ҡағыҙға төшөргәндә, яҙыусы туранан-тура һүҙ, һүҙбәйләнештәр һәм һүрәтләү саралары менән эш итә. Һүрәтләү саралары, күреүебеҙсә, ифрат киң төшөнсә, уны грамматика күренештәре генә ҡайтарып ҡалдырыу төптө дөрөç булмаç ине. Икенсенән, һүрәтләү сараларының ниндәйе генә булмаһын, улар әҙәби тексты матурлау, «бөҙрәләтеү» өсөн махсус тағып ҡуйыла торған биҙәүес, баҙлауыҡ түгел, уларҙың барыһы ла әҙәби образ һынландырыуға хеҙмәт итә. Юғары художестволы текст ижад итеүсенең оçталығы шунда: ул һәр һүҙгә, әҙер сараларға, әҙер формаларға ижади ҡарай, теләһә үҙгәртә, кәрәк тапһа, үҙенсә бора уйната. Әгәрҙә уйлағанын тасуирларлыҡтары булмаһа, яңыһын уйлап таба, бығаса телдә булмаған өр-яңы һүҙҙәр, ғәҙәтки булмаған һүҙбәйләнештәр ижад итә, һүрәтләү сараларының бығаса осрамаған төрҙәрен тыуҙыра. Автор, үҙенең тексына индергән һәр детальгә, һәр элементҡа эстетик мәғәнә һалып, уларҙы поэтик детальгә, поэтик элементҡа әүерелдерә. Ысын яҙыусының псевдонимы ла, әçәр исеме лә һуңғы өтөр-нөктәһенә тиклем осраҡлы булмай, әçәрҙең идея-эстетик йөкмәткеһен асыуға йүнәлтелгән була.

Ниндәйҙер әҙәби уйланмышы булһа, шуны ҡағыҙға теркәргә, уның өсөн үҙе теләгән формаларҙы уйлап сығарырға, милли тел байлығын теләгәненсә файҙаланырға һәр автор ихтыярлы (хоҡуҡлы). Ҡләмдәре шымарған билдәле әҙиптәргә генә түгел, булдыра алғанса ижад итергә, ғөмүмән, яҙа белгән һәр берәүгә лә юл асыҡ. Әммә барса ижадсының да әҙәби продукцияһы массовый уҡыусыға тәҡдим итерлекме, унышы – оçталыҡ мәсьәләһе. Ижад ҡомары уянған һәм әҙме-күпме һәләте булған кешене ижадтан төңөлтөп була булыуын, әммә тота килеп уны ижад итеүҙән айырырға, тыйырға бер кемдең дә хаҡы юҡ, әгәр ҙә бының өсөн етди ижтимағи – сәйәси сәбәптәре булмаһа. Теге йәки был дәүләт гражданины булараҡ, һәр бер авторҙың кешелек хоҡуҡтары һәм бурыстары илдең төп Законы – Конституцияла асыҡ күрһәтелә. Унда һүҙ азатлығының дәүмәле лә билдәләнә.

Оçта яҙылғанмы, әллә түгелме, барыбер ҙә ниндәйҙер үҙенсә оригиналь әҙәби текст яҙған икән, ул әçәр авторҙың интеллектуаль милке булып иçәпләнә. Уның берҙән-бер хужаһы – автор үҙе. Барлыҡ миллек төрҙәре кеүек үк, әҙәби әçәр шәхси миллек булып тора. Дәүләт уға авторлыҡ хоҡуғын таный һәм уны башҡалар тарафынан боҙолмауынан ҡурсалай, әгәр боҙола ҡалһа, законлы юл менән уның үтәлеүен гарантиялай. Һуңғы осорҙа ижади эшмәкәрлекте һәм уның емештәрен файҙаланыу хоҡуҡтарын көйләгән байтаҡ закондар ғәмәлгә индерелде. [112]

Авторлыҡ хоҡуғы, асыҡлап әйткәндә, бары әҙер продукцияны, теге йәки был конкрет әçәрҙе генә һаҡлай. Авторҙың индивидуаль ижади эшмәкәрлегенә ҡағылышлы яҡтары, мәçәлән, эш методтары, сюжет-композиция ҡороу алымдары, ул уйлап тапҡан яңы һүҙҙәр-һүҙбәйләнештәр, әҙәби образдар, яңы һүрәтләү саралары, жанр формалары – барыһы ла милли әҙәбиәттең дөйөм ҡаҙнаһына ята, дөйөм әҙәби байлыҡҡа әүерелә. Тәбиғи, ул яңылыҡтарҙың күбеһе, мәçәлән, «Бабич строфаһы, Аҡмулла строфаһы» кеүек

әҙәбиәт ғилемендә авторҙың исеме менән нығына. Теге йәки был һүҙ оҫтаһы тыуҙырған поэтик арсеналға «шул әҙиптең ижади мәктәбе», «шул әҙип тыуҙырған әҙәби йүнәлеш» хаҡында һүҙ сыға: мәҫәлән, Бабичҡа эйәреүселәр, Рәми мәктәбе һәм башҡалар.

---

1. М.Өмөтбаев. Йәдкәр. – Өфө, 1984.190-сы бит.
2. З.Биишева. Әҫәрҙәр, т.2. – «Китап», 1996,479-сы бит.
3. Аристотель. об искусстве поэзии. – М.,1957, с.13.
4. З.Биишева, күрһәтелгән китап, 474-се бит.
5. Г.Н.Поспелов. Теория литературы. – М., 1978, с.121;
 В.Е.Хализев. Теория литературы. – М., 2000, с.90.
6. В.В.Кожинов. Виды искусства. – М., 1960, с.15.
7. К.Әхмәтйәнов. Әҙәбиәт теорияһы. – Өфө, 1985, 11-се бит.
8. Г.Н.Поспелов, күрһәтелгән хеҙмәт, с.43.
9. В.Е.Хализев, күрһәтелгән хеҙмәт, с.89.
10. И.Гальперин. Текст как объект лингвист. Послед-я. – М., 1981, сс.4-8; Л.И.Чикина. Лингвистика текста. – Саранск, 1986, с.5.
11. Литературный энциклопедический словарь (артабан - ЛЭС). – М., 1987, с.373.
12. Р.Ғарипов. Әҫәрҙәр. (Өс томда), 1 т., - “Китап”, 1996, 131-133-сө бб.
13. В.Е.Хализев. Текст. – В сб. “Введение в литературоведение”. М., 1999, сс.409-410.
14. Ш.Бабич. “Беҙ үҙебеҙ – башҡорттар.” – 1994, 110-сы бит.
15. Н.Нәжми. Күңел сәхифәләре. – “Китап”, 1999, 119-сы бит.
16. Шунда уҡ, 167-се бит.
17. Шунда уҡ, 159-сы бит.
18. М.Кәрим. Әҫәрҙәр (биш томда), 5-се т. – «Китап», 1999, 136-138-се бб.
19. А.Н.Лук. Мышление и творчество. – М., 1976, с.119.
20. Р.Назаров. Йәшен, - «Китап», 1994, 123-сө бит.
21. Шунда уҡ, 116-118-се бб.
22. Р.Бикбаев. Ай күргәндәй, ҡояш алғандай: һайланмалар китабы. – «Китап», 1998, 402-се бит.
23. Философский энциклопедический словарь. – М., 1998, с.42; Краткий словарь по эстетике. М., 1993, с.11; Л.С.Выготский. Психология искусства. – Ростов на Дону, 1998, с.108.
24. Труд, 9 июля, 1999; Российская газета, 19 февраля, 2002.
25. А.И.Белецкий. В мастерской художника слова. – М., 1989, с.30.
26. Шунда уҡ. С.14
27. Г.И.Романова. Творческая история произведения. – В сб. Введение в литературоведение, М., 1999, с.401.
28. О писательском труде. – М., 1955.
29. П.Н.Меведев. В лаборатории писателя. – Л., 1960; С.Ф.Елеонский. Изучение творч. Истории художественных произведений. – М., 1962; Цейтлин А.Г. Труд писателя. – М., 1968; Г.Л.Ермаш. Искусство как творчество. – М., 1972.
30. М.Л.Семанова. Творческие истории произведений русских писателей. – М., 1990; сб. Динамическая поэтика. От замысла к воплощению. – М., 1990; Э.Т.Бабаев. кому нужны черновиуи? // Сюжет и время. – Коломна, 1991.
31. К.Әхмәтйәнов. Әҙәбиәт теорияһы. – Өфө, 1971, 1985; Л.Н.Тимофеев. Основы теории литературы, изд.5. – М., 1976; Г.Н.Поспелов. Теория литературы. – М., 1978; И.Ф.Волков. Теория литературы. – М., 1995; В.Е.Хализев. Теория литературы. – М., 2000.
32. Н.А.Гуляев. Теория литературы. – М., 1985, с.110.
33. И.Ф.Волков. теория литературы. – М., с.38.
34. Ә.Харисов. Әҙәбиәт теорияһы. – Өфө, 1944, 85-се бит.
35. К.Әхмәтйәнов. Әҙәбиәт теорияһы. – 1985, 51-се б.
36. Шунда уҡ, 52-се б.
37. Ғ.Хөсәйенов. Ижад серҙәре. – «Китап», 1995, 24-се б.
38. Шунда уҡ, 7-се бит.
39. Шунда уҡ, 40,60,70-се биттәр.
40. Шунда уҡ, 8-се б.
41. Шунда уҡ, 8-се бит.
А.И.Белецкий. В мастерской… с.16.
43. «Аҙна» гәзите, 17 февраль, 2001.

44. Р.Ғарипов. Әҫәрҙәр, 1-се т… 400-сө б.
45. Р.Бикбаев. Ай күргәндәй…426-сы бит.
46. Словарь иностранных слов. – М, 1987, с.428.
47. Ш.Бабич. Беҙ үҙебеҙ…302-303-сө бит.
48. Р.Бикбаев. Ай күргәндәй… 418,421,436-сы биттәр.
49. Р.Назаров. Йәшен… 103-сө бит.
50. Х.Назар. Асманға ашыу. – “Китап”, 2000, 183-сө б.
51. Й.Ильясова. Ҡабырсаҡта. – “Китап”, 1998, 15-се б.
52. Ф.Туғыҙбаева. Минең ҡошом – Һомай. – “Китап”, 2000, 103-сө бит.
53. И.Кинйәбулатов. Арғымаҡта. – “Китап”, 1998, 431-432-се бб.
54. Р.Бикбаев. Ай күргәндәй… 305-се б.
55. Х.Назар. Асманға ашыу… 178-се б.
56. Ҡ.Аралбай. Таналыҡ тауышы. – “Китап”, 2001, 115-се б.
57. Ғәбиҙулла. – китапта: егет һүҙе, - «Китап», 1997, 284-291-се бб.
58. м.Кәрим. әҫәрҙәр (биш томда), 1-се т,.. 293-сө б.
59. Р.Хисаметдинова. Һандуғас ғүмере. - «Китап», 2001, 118-се б.
60. И.Кинйәбулатов. Арғымаҡта… 196-сы бит.
61. Ә.Таһирова. Йөрәк йәдкәре. - «Китап», 1996, 114-се б.
62. К.Кинйәбулатова. Әсә һулышы. – Өфө, 1980, 53-сө б.
63. Ҡол-Дәүләт. – «Егет һүҙе»,.. 68-се б.
64. Ҡол-Дәүләт, шунда уҡ, 69-сы б.
65. Т.Йосопов. Ауырая аҙымдар. - «Китап», 1994, 26-сы б.
66. А.Игебаев. Елеп бара ғүмер йомғағы. - «Китап», 2000, 128-се б.
67. Р.Ғарипов. Әҫәрҙәр, 1-се т. … 270-се б.
68. Б.Исҡужин. Аҡ менән ҡара. – 1992, 120-се б.
69. Ә.Хәкимов. Өйөрмә. – Өфө, 1992, 3-сө б.
70. Ғ.Хисамов. Тамып та ғына ҡала ҡандары. -  «Китап»,  1993, 311-се б.
71. С.Әлибай. Йылдарым һәм йырҙарым. - «Китап», 1999, 193-сө б.
72. М.Кәрим. Әҫәрҙәр (5 томда), 1-се т. … 150-се б.
73. Р.Ғарипов. Әҫәрҙәр (3 томда), 1-се т. … 45-се б.
74. Р.Бикбаев. Ай күргәндәй… 355-се б.
75. Р.Назаров. Әҫәрҙәр (2 томда), 1-се т. -  «Китап», 2002, 104-105-се б.
76. Р.Бикбаев. Ай күргәндәй… 336-сы б.
77. Т.Искәндәриә. Ер менән Күк араһында. – Өфө, 1992, 27-се б.
78. Ф.Туғыҙбаева. Минең ҡошом – Һомай… 180-се б.
79. Ҡол-Дәүләт. – «Егет һүҙе», … 27-се б.
80. Т.Йосопов. Ауырая аҙымдар… 63-сө б.
81. Р.Бикбаев. Ай күргәндәй…490-сы б.
82. Т.Ҡарамышева. Күңелем доғалары. - «Китап», 1998, 30-сы б.
83. А.Игебаев. Елеп бара. … 135-се б.
84. Т.Йосопов. Ауырая аҙымдар…156-сы б.
85. К.Әхмәтйәнов. Әҙәбиәт теорияһы. – 24-се б.
86. Һ.Дәүләтшина. Ырғыҙ. – Өфө, 1977, 145-се б.
87. Д.Свифт. Путешествия Лемюэля Гулливера. – М., 1984, сс. 201-203.
88. Ю.А.Филипьев. Что и как познает искусство. – М., 1976, с.59.
89. К.Әхмәтйәнов. Әҙәбиәт теорияһы…110-сы б.
90. Х.К.Баранов. арабо-русский словарь. – М., 1977, сс.449-450.
91. З.Биишева. Әҫәрҙәр (биш томда), 2-се т. .. 492-се б.
92. Р.Солтангәрәев. Оло юлдың туҙаны. - «Китап», 1995, 77-се б.
93. Н.Мусин. Шунда ята батырҙар һөйәге. - «Китап», 2001, 6-сы б.
94. Л.И.Чикина. Лингвистика текста… с.43.
95. Ғ.Ибраһимов. Кинйә. 2-се китап. – Өфө, 1987,343-сө б.
96. А.Р.Лурия. Язык и сознание. М., 1976, сс.32,115.
97. Б.Исҡужин. Аҡ менән ҡара… 56-сы б.
98. А.Н.Лук. Мышление и творчество… с.12.
99. А.Р.Лурия, күрһәтелгән хеҙмәт…111-се б.
100. А.Н.Лук. Мышление и творчество…сс.17, 18.
101. Шунда уҡ…с.16.
102. Ғ.Ғ.сәйетбатталов. Башҡорт теле, 1-се т. - «Китап», 1999, 208-се б.
103. Шунда уҡ, 210-сы б.
104. Есин А.Б.Психологизм. – Сборн.: Введение в литературоведение, М., 1999, сс.313-328.
105. Хәҙерге башҡорт теле (пединст. Өсөн дәреслек). – Өфө, 1986, 107-се б.
106. М.Кәрим. Әҫәрҙәр (биш томда), 3-сө т. - «Китап», 1997,159-сы б.

107. Б.Рафиҡов. Ахырызаман көткәндә. - «Китап», 1993, 14-се б.
108. Ғ.Хисамов. Аҡтамыр. – Китапта: Тамып та ғына ҡала ҡандары… 326-сы б.
109. Й.Солтанов. Ерем, кешеләрем. - «Китап», 1996, 5-се б.
110. С.Агиш. Һайланма әҫәрҙәр (ике томда). 1-се т. – Өфө, 1974, 24-се б.
111. Книговедение: энциклоп. Словарь. – М., 1982, сс.189,431.
112. Печать, информация и право (сб.законов), 1 изд. - «Китап», 1997, 278с.

**Ҡушымта.**

## Башҡортостан Республикаһы Конституцияһы

### Беренсе киҫәк

### 2 бүлек. Кеше һәм граждандың хоҡуҡтары, ирektәре һәм бурыстары

17 статья. Башҡортостан Республикаһында кеше һәм граждандың хоҡуҡтары һәм ирektәре хоҡуҡиәттең дөйөм танлған принциптарына һәм нормаларына Рәсәй Федерация Конституцияһына һәм ошо Конституцияға ярашлы таныла һәм гарантиялана.

Кешенең төп хоҡуҡтары һәм ирektәре айырып алынғыһыҙ һәм һәр кемгә тыумыштан бирелә.

Кеше һәм граждандың хоҡуҡтарын һәм ирektәре тормошҡа ашырыу башҡа кешеләрҙең хоҡуҡтарын һәм ирektәрен боҙорға тейеш түгел.

Хоҡуҡтарҙы һәм ирektәрҙет Башҡортостан Республикаһының конституцион ҡоролошон көс ҡулланып үҙгәртеү, раса, милли, социаль, синфи, дини күралмаусанлыҡ һәм дошманлыҡ тыуҙырыу, көс ҡулланыуҙы һәм һуғышты пропагандалау өсөн файҙаланыуға юл ҡуйылған.

(«Башҡортостан» гәзите, 242, 6 декабрь, 2002й.)

## Конституция Российской Федерации

### Раздел первый

### Глава 2. Права и свобода человека и гражданина

Статья 29. 1.Каждому гарантируется свобода мысли и слова.

2. Не допускаются пропаганда или агитация, возбуждающие социальную, расовую, национальную и религиозную ненависть и вражду. Запрещается пропаганда социального, расового, национального, религиозного или языкового превосходства.

3. Никто не может быть принужден к выражению своих мнений и убеждений или отказу от них.

4. Каждый имеет право свободно искать, получать, передавать, производить и распространять информацию любым законным путем. Перечень сведений, составляющих государственную тайну, определяется федеральным законом.

5. Гарантируется свобода массовой информации. Цензура запрещается.

## Закон РФ «Об авторском праве и смежных правах» (извлечения)

### РАЗДЕЛ II. АВТОРСКОЕ ПРАВО

Статья 6. Объект авторского права. Общие положения

1. Авторские права распространяется на произведения науки, литературы и искусства, являющиеся результатом творческой деятельности, независимо от назначения и достоинства произведения, а также от способа его выражения.
2. Авторское право распространяется как на обнародованные произведения, так и не на обнародованные произведения, существующие в какой-либо объективной форме:

письменной (рукопись, машинопись, нотная запись и так далее);

устной (публичное произнесение, публичное исполнение и так далее);

звуко- или видеозаписи (механической, магнитной, цифровой, оптической и так далее);

изображения (рисунок, эскиз, картина, план, чертеж, кино- , теле-, видео- или фотокадр и так далее);

объемно-пространственной (скульптура, модель, макет, сооружение и так далее);

в других формах.

3. Часть произведения (включая его название), которая, удовлетворяет требованиям пункта 1 настоящей статьи и может использоваться самостоятельно, является объектом авторского права.
4. Авторски права не распространяются на идеи, методы, процессы, системы, способы, концепции, принципы, открытия, факты.
5. Авторское право на произведение не связано с правою собственности на материальный объект, и котором произведение выражено.

   Передача права собственности на материальный объект или права владения материальным объектом сама по себе не влечет передачи каких-либо авторских прав на произведение, выраженное в этом объекте, за исключением случаев, предусмотренных статей 17 настоящего Закона.

   Статья 7. Произведения, являющиеся объектами авторского права.

   1. Объектами авторского права являются:

      литературные произведения (включая программы для ЭВМ);

      драматические и музыкально-драматические произведения, сценарные произведения… др. произведения

      хореографические произведения и пантомимы;

      музыкальные произведения с текстом или без текста;

      аудиовизуальные произведения (кино-, теле- и видео-фильмы, слайдфильмы, диафильмы и другие кино- и телепроизведения);

      произведения живописи, скульптуры, графики, дизайна, графические рассказы, комиксы и другие произведения изобразительного искусства;

      произведения архитектуры, градостроительства и садово-паркового искусства;

      фотографические произведения и произведения, полученные способами, аналогичными фотографии;

      географические, геологические и другие карты, планы, эскизы и пластические произведения, относящиеся к географии, топографии и к другим наукам;

      другие произведения.

      3.К объектам авторского права также относятся: производные произведения (переводы, обработки, аннотации, рефераты, резюме, обзоры, инсценировки, аранжировки и другие переработки произведений науки, литературы и искусства);

      сборники (энциклопедии, антологии, базы данных) и другие составные произведения, представляющие собой по подбору или расположению материалов результат творческого труда…

Статья 8. Произведения, не являющиеся объектами авторского права

Не являются объектами авторского права:

официальные документы (законы, судебные решения, иные тексты законодательного, административного и судебного характера), а также их официальные переводы;

государственные символы и знаки (флаги, гербы, ордена, денежные знаки и иные государственные символы и знаки);

произведения народного творчества;

сообщения о событиях и фактах, имеющие информационный характер.

Статья 9. Возникновение авторского права. Презумпция авторства

1. Авторское право на произведение науки, литературы и искусства возникает в силу факта его создания. Для возникновения и осуществления авторского права не требуется регистрации произведения, иного специального оформления произведения или соблюдения каких-либо формальностей.

Обладатель исключительных авторских прав для оповещения о своих правах вправе использовать знак охраны авторского права, который помещается на каждом экземпляре произведения и состоит из трех элементов:

латинской буквы «C» в окружности: ©;

имени (наименования) обладателя исключительных авторских прав;

года первого опубликования произведения.

Статья 11. Авторское право составителей сборников и других составных произведений

1. Автору сборника и других составных произведений (составителю) принадлежит авторское право на осуществленные им подбор или расположение материалов, представляющие результат творческого труда (составительство).

Составитель пользуется авторским правом при условии соблюдения им прав авторов каждого из произведений, включенных в составное произведение.

Авторы произведений, включенных в такие издания, сохраняют исключительные права на использование своих произведений независимо от издания в целом.

Статья 15. Личные не имущественные права

1. Автору в отношении его произведения принадлежат следующие личные неимущественные права:

право признаваться автором произведения (право авторства);

право использовать или разрешать использовать произведение под подлинным именем автора, псевдонимом

либо без обозначения имени, то есть анонимно (право на имя);

право обнародовать или разрешать обнародовать произведение в любой форме (право на обнародование), включая право на отзыв;

право на защиту произведения, включая его название, от всякого искажения или иного посягательства, способного нанести ущерб чести и достоинству автора (право на защиту репутации автора).

3.Личные не имущественные права принадлежат автору независимо от его имущественных прав и сохраняются за ним в случае уступки исключительных прав на использование произведения.

Статья 16. Имущественные права

1. Автору в отношении его произведение принадлежит исключительные права на использование произведения в любой форме и любым способом.
2. Исключительные права автора на использование произведения означают право осуществлять или разрешать следующие действия:

   воспроизводить произведение (право на воспроизведение);

   распространять экземпляры произведения любым способом: продовать, сдавать в прокат и так далее (право на распространение);

   импортировать экземпляры произведения в целях распространения, включая экземпляры, изготовленные с разрешения обладателя исключительных авторских прав (право на импорт);

   публично показывать произведение (право на публичный показ);

   публично использовать произведение (право на публичное использование);

   сообщать произведения (включая показ, исполнение или передачу в эфир) для всеобщего сведения путем, передачи в эфир и (или) последующей передачи в эфир (право на передачу в эфир);

сообщать произведение (включая показ, исполнение передачу в эфир) для всеобщего сведения по кабелю, проводам или с помощью иных аналогичных средств (право на сообщение для всеобщего сведения по кабелю);
переводить произведение (право на перевод);
переделывать, аранжировать или другим образом перерабатывать произведение (право на переработку).

Исключительные права автора на использование дизайнерского, архитектурного, градостраительного и садово-паркового проектов включают также практическую реализацию таких проектов. Автор принятого архитектурного проекта вправе требовать от заказчика предоставления права на участие в реализации своего проекта при разработке документации для строительства и при строительстве здания или сооружения, если иное не предустмотрено в договоре.

3. Если экземпляры правомерно опубликованного произведения введены в гражданский оборот посредством их продажи, то допускается их дальнейшее распространение без согласия автора и без выплаты авторского вознаграждения.
   Право на распространение экземпляров произведения путем сдачи их в прокат принадлежит автору независимо от права собственности на эти экземпляры.
4. Размер и порядоу исчисления авторского вознаграждения за каждый вид использования произведения устанавливаются в авторском договоре, а также в договорах, заключаемых организациями, управляющими имущественными правами авторов на коллективной основе, с использователями.
5. Ограничения указанных в пункте 2 настоящей статьи прав авторов устанавливаются статьями 17-26 настоящего Закона при условии, что такое условие не наносит неоправданного ущерба нормальному использованию произведения и не ущемляет необоснованным образом законные интересы автора.

Статья 19. Использование произведения без согласия атвора и без выплаты авторского вознаграждения.

Допускается без согласия автора и без выплаты авторского вознаграждения, но с обязательным указанием имени автора, прочие которого используется, и источника взаимствования:

1) цитирование в оригинале и в переводе в научных, исследовательских, полемических, критических и информационных целях из правомерно обнародованных произведений в объеме, оправданном целью цитирования, включая воспроизведение отрывков из газетных и журнальных статей в форме обзоровпечати;
2) использование правомерно обнародованных произведений отрывков из них в качестве иллюстраций в изданиях, в радио- и телепередачах, звука- и видеозаписях учебного характера в объеме, оправданном поставленной целью;
3) воспроизведение в газетах, передача в эфир или сообщение по кабелю для всеобщего сведения правомерно опубликованных в газетах или журналах статей по текущим экономическим, политическим, социальным и религиозным вопросам или переданных в эфир произведений такого же характера в случаях, когда такие воспроизведение, передача в эфир или сообщение по кабелю не были специально запрещены автором;
4) воспроизведение в газетах, передача в эфир или сообщение по кабелю для всеобщего сведения публично произнесенных политических речей, обращений, докладов и других аналогичных произведений в объеме, оправданном информационной целью. При этом за автором сохраняется право на опубликование таких произведений в сборниках;
5) воспроизведение или сообщение для всеобщего сведения текущих событий средствами фотографии, путем передачи в эфир или сообщение для всеобщего сведения по кабелю произведений, которые становятся увиденными или

услышанными в ходе таких событий, в объеме, оправданном информационной целью. При этом : ш автором сохраняется право на опубликование таких произведений в сборниках;

6) воспроизведение правомерно обнародованных произведений без извлечения прибыли рельефно-точечным шрифтом или другим специальными способами для слепых, кроме произведений, специально созданных для таких способов воспроизведения.

(Основные кодексы и законы РФ: с изменениями и дополнениями на 1 сентября 2002 г. ИД “Весь”, СПб, 2002, сс.410-412, 448).

**Йөкмәткеһе**

Инеш
……………………………………………………………………………………………….3
I бүлек
Белем һәм уның төрҙәре………………………………………………………………..5
Художестволы белем сығанағы – сәнғәт
Сәнғәт
төрҙәре………………………………………………………………………………….9
II бүлек
Художестволы әҙәбиәт. Әҙәби текст………………………...………………….17
Артефакт тураһында төшөнсә……………………………….…………………..24
Әҙәби эшмәкәрлектең асылы……………………………………………...…..27
Әҙәби ижадты өйрәнеү мәсьәләләренә бер байҡау…………………….…..31
Әҙәби ижад технологияһы кәрәкме……………………………………….....37
III бүлек
Әҫәр яҙыуҙың этаптары. Ижади уйланмыш………………………………..….42
Әҙәби “проект” сығанаҡтары: Тормош материалы. Әҙәби алынмалар (реминисценциялар) һәм уларҙың төрҙәре. Халыҡ ижады…………………….……44
IV бүлек
Буласаҡ әҫәрҙе ҡағыҙға теркәү……………………………………………......76
Әҙәби һынландырыу төрҙәре…………………………………………..……...81
Лексик саралар……………………………………………………..……………85
Ассоциатив һүрәтләү саралары………………………………………..…...90
Поэтик синтаксис…………………………………………………..……………98
Һүрәтләү сараһы булараҡ өн һәм телмәр……………………………..…...105
Авторлыҡ төшөнсәһе………………………………………………………...113
Файҙаланылған әҙәбиәт…………………………………………………....116
Ҡушымта………………………………………………...………………………..11
9